*Бер ир лотереяға берәй отош сығарыуын үтенеп, туҡтауһыҙ Хоҙайға ялбара, доғалар уҡый. Ләкин һөҙөмтә булмай. Был ир вафат була, теге донъяла Хоҙай менән осраша ла, уға үпкәһен белдерә:" Лотереяға берәй отош сығарһаңсы, тип, күпме үтендем..." - ти. Хоҙай уға: "Мин ул отошто ебәрергә әҙер инем, тик һин бит бер генә тапҡыр ҙа лотерея һатып алманың..." - тип яуаплай. Ятҡан таш аҫтынан һыу аҡмай шул...*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14 - 20 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№15 (485)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Эшкә тотон да...

ауылға һулыш өр

5



Башҡортостан туризмында...

8-9 "еләкле" урындар бихисап



Заман заңы - бер көнлөк,

халыҡ ижады - ғүмерлек

11



Аҫалы балаҫтың...

яңыса балҡышы

12-13



14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Ни өсөн туҡтауһыҙ янғындар сыға? Төп әйепте королоҡ һәм башҡа стихиялы бәләләргә һылтау дөрөҫмө?

**Рәжәп НӘБИУЛЛИН, БР урман хужалығы министры:** Рәсәй Хөкүмәте 2010 йылғы ғәҙәти булмаған эҫе йәйҙәге янғындарҙан һуң урмандарҙы һаҡлауға йөҙ менән боролдо. Хәтерләһәгеҙ, ул йылды Рәсәйҙең Европа өлөшөндә генә лә 22 төбәктә 1 млн. гектар урман һәм 1,2 мең йорт янды, 50 меңдән ашыу кеше һәләк булды. Илдең урман фондына килтерелгән зыян 120 млрд. һум тәшкил итте. Шуға күрә лә Рәсәй Хөкүмәте урман хужалығында янғын хәүефһеҙлеген финанслауҙы 5 тапҡырға (11 млрд.һум) арттырҙы, ә төбәктәргә янғынға ҡаршы техника һатып алыу өсөн 5 млрд. һум күләмендә субсидиялар йүнәлтелде. Беҙгә урман янғындарын һүндереү өсөн 36 берәмек махсус техника бүленде. Бындай техника ярҙамында урманда сыҡҡан янғындарҙың киң таралып китеүенә юл ҡуймай, утты тиҙ арала һүндереүгә өлгәшелде. Әйткәндәй, былтыр янғын һүндереүҙә 1500 кеше һәм 4000 берәмек техника йәлеп ителде. Янғынды тиҙ арала һүндереү күрһәткесе 89 процент тәшкил итте. Йәғни 80 янғындың 71 осрағын тәүге тәүлектә үк һүндереүгә өлгәшелде. Шуны ла билдәләп үтеү кәрәк: Башҡортостанда былтыр дөйөм көс менән урман янғындары иҫәбен 2010 йылдағынан 7,5 тапҡырға кәметеүгә өлгәшелде. Башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда, Башҡортостанда урман ҡараусылар штатын нигеҙҙә һаҡлап ҡала алдыҡ. Республикабыҙҙың урман хужалығында 3500 кеше эшләй. Янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеүҙә уларҙың да хеҙмәт өлөшө тос булды. Бынан тыш, БР Урман хужалығы министрлығы составында 442 кешенән торған ҡеүәтле төркөмдәр ойошторолдо, улар теләһә ҡайһы ваҡыт янғын һүндереүгә барып етергә әҙер тора. Министрлыҡ инспекторҙары көн һайын урмандарҙы ҡарап сыға. Янғындарҙы иҫкәртеү маҡсатында урмандарға космик мониторинг алып барыла, видеокамералар урынлаштырыла, ерҙә һәм авиация ярҙамында патруль эштәре башҡарыла. Йылайыр һәм Хәйбулла райондары янғын сығыу хәүефе көслө булған төбәктәрҙән иҫәпләнә. Бөрйән, Әбйәлил, Белорет райондарында ла янғын хәүефе ҙур. Был райондарҙа урманға яҡын урынлашҡан 526 торaҡ пункты янғындан һаҡлағыс бураҙналар менән уратып алынған. Кешеләр араһында урман янғындарын булдырмау, уны иҫкәртеү буйынса аңлатыу эштәре алып барыуҙы туҡтатҡаныбыҙ юҡ, сөнки янғын сығыуҙың 90 проценты тап кеше факторына бәйле. Ә бит берәүҙең уйһыҙ-моңһоҙ ғына ырғытып киткән тәмәке төпсөгө, ғәмһеҙ туристар йә бесәнселәрҙең һүндермәй ҡалдырған усаҡ осҡоно ҙур бәлә - янғын сығарып, меңәрләгән гектар йәшел хазинабыҙҙы һәләк итергә һәләтле. Ялҡындың ялы-ҡойроғо юҡ, ти халыҡ. Шуға күрә лә урманда ла, көнкүрештә лә, эшләгән урындарыбыҙҙа ла һәр саҡ уяу һәм иғтибарлы булайыҡ.

(Дауамы 4-се биттә).

ИҒТИБАР!

## БӘЙГЕГӘ САҠЫРАБЫҘ!




Интернетта "Киске Өфө" гәзитенең бәйгеһен иғлан итеүебеҙ тураһында хәбәр иткәйнек инде: **"Алдар менән Ерәнсә ҡоро"**на башҡорт юморы оҫталарын саҡырабыҙ. Ысын юмор, мәрәкә, мәҙәк, лаҡап, көләмәстең иң көттәһе халыҡтың йәнле аралашыу мөхитендә йәшәй икәнен беләбеҙ. Һуңғы ваҡытта сәхнәләрҙә тоҙһоҙ һәм "билдән түбән" мәрәкә һөйләүселәр күбәйеүен иҫәпкә алғанда, ысын юморҙы эҙләп халыҡ араһына сығыу мөҙҙәте еткәне аңлашыла.

Шуға ла юмор оҫталарына мөрәжәғәт итәбеҙ: "Һеҙҙең ауылда нисектер, ә бына беҙҙең ауылда..." тип башлағыҙ һүҙегеҙҙе һәм йәшәгән төбәгегеҙҙәге, ауылығыҙҙағы лаҡап, көләмәс, мәрәкә хәлдәрҙе видеотаҫмаға яҙҙырып, "Вконтакте" сайтындағы "Киске Өфө" төркөмө"нә (**vk.com/kiskeufa**) ҡуйығыҙ. Тулыраҡ мәғлүмәтте лә шул сайтта табырһығыҙ. Бәйгебеҙҙә балалар ҙа, йәше-ҡарты ла ҡатнаша ала. Уға йомғаҡ июнь баштарында яһала һәм еңеүселәргә иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла. Бәйгегә ҡушылығыҙ, мөхтәрәм йәмәғәт!

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

## "ТАМЫРЫ "ТАМЫР"ҘА БУЛҒАНДАР...

### егерме йыллыҡты билдәләй

**Бишектәге бала бишкә төрләнә, ти халыҡ мәҡәле. Ата-әсә бурысы -нисәгә төрләнеп үҫһә лә, сабыйында яҡшы сифаттар, рухи ҡиммәттәр, туған теленә, еренә һөйөү тәрбиәләү, хаҡ юлдан яҙмауын ҡайғыртты булырға тейеш. Был бурыстарҙы, заман башҡа - заң башҡа, тип кенә бөгөндән ситкә алып ырғыта алмайбыҙ. Бына 20 йыл инде ошо йүнәлештә бар көс-ҡеүәтен һалып ата-әсәгә ярҙам итә "Тамыр" телеканалы хеҙмәткәрҙәре. Бөгөнгө көндә "Тамыр" телеканалы тапшырыуҙарын БСТ каналында, "Башинформ", "Кристалл", "Уфанет" кабель селтәрҙәре аша көн дауамында ҡарарға мөмкин. "Тамыр" тапшырыуҙарын көнө буйы ҡараған осраҡта ла, уларҙан ата-әсә бала ҡолағына ятмаҫтай, тәрбиәһеҙ, тәртипһеҙ бер генә һөйләм дә ишетмәҫ, кадр күрмәҫ. Сабыйҙар өсөн мауыҡтырғыс, ыҡтырғыс тапшырыуҙар эшләүселәрҙең үҙҙәре менән һөйләшәйек.**




(Дауамы 6-сы биттә).

✓ *Халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәре, яҙыусылары, шағирҙары, Аллаға шөкөр, күп. Уларҙың әҫәрҙәренән дә өҙөктәр яҙылған ошондай плакаттар ҡуйылһа, йәш быуынға ныҡ тәьҫир итер, тип уйлайым.*



"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ХАЛҠЫБЫҘҒА...
## юл күрһәтеүсе ул

**"Киске Өфө" гәзитен ысынлап та һоҡланыу һүҙҙәре менән телгә алғы килә. Баҫмаға яҙылырға, шуның менән милли матбуғатты күтәреүгә үҙ өлөшөндә индерергә кәрәк, тигән бурыстан сығып ҡына алдырмайһың был гәзитте. Ә ысын мәғәнәһендә ҙур теләк, шәхси ҡыҙыҡһыныу менән көтәһең.**

Дөрөҫ, хәҙер бөтә мәғлүмәтте интернеттан табып була. Ләкин унда башҡорт донъяһына ҡағылышлы кәрәкле, ҡиммәтле яҙмаларҙы осратыуы ҡыйын. Өҫтәүенә, олораҡ быуын барыбер гәзиткә өҫтөнлөк бирә. Интернетҡа ҡарағанда, гәзиттең тағы бер өҫтөнлөгө бар: ҡағыҙ баҫманан мәҡәлә яҙған кешенең йылылығын, энергетикаһын, хеҙмәттә түгелгән көсөн һиҙергә мөмкин. Гәзиттең дә, китаптыҡы кеүек, тере йөнө бар һымаҡ. Эштән һуң өйгә арып-талып ҡайтҡанда, ҡулға "Киске Өфө" алһаң, күңелең ял итеп ҡала. Күңелһеҙ, кәйефең булмаған саҡта ла баҫма ныҡ ярҙам итә. Туҡта, ни эшләп мин былай бошоноп ултырам әле, тигән уй килә башҡа. Рухың күтәрелә, ихтыяр көсөң өҫтәлә. Тарих, мәҙәниәт донъяһын яҡтыртып ҡына ҡалмай, бөгөнгө башҡорт нисек йәшәргә тейеш, тигән һорауға яуап бирә кеүек "Кисек Өфө". Беҙ гел генә зарланып, илап ултырырға тейешбеҙме, әллә боронғо башҡорттар кеүек, йәшәү өсөн үҙебеҙҙә көс табып, көрәшеп йәшәргә тейешбеҙме? Баш ҡала гәзите тап икенсе юлды һайларға, шул юл менән барырға өйрәтә.

Баҫма уҡытыуылар өсөн файҙалы сығанаҡ, өҫтәмә дәреслек булып тора. Хәҙер дәрестәрҙе лингвомәҙәниәт йүнәлеше буйынса үткәреү талап ителә. "Киске Өфө" шул рәүешле уҡытырға булышлыҡ итә. Балаларҙы тәрбиәләү, ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлауға бәйле мәҡәләләр әһәмиәтле. Гәзит уҡыған ата-әсә ғаилә мөнәсәбәттәренә башҡаса ҡарай башлай. Бала гәзитте үҙе уҡыһа, тағы ла яҡшыраҡ. Сөнки уҡытыусының һөйләүе - бер, ә бала үҙе уҡып төшөнһә, бөтөнләй башҡа төрлө тәьҫир итә. Уның фекере, ата-әсәһенә, туғандарына, дуҫтарына булған мөнәсәбәте, ғөмүмән, донъяға булған ҡарашы үҙгәрә.

Донъя бер урында тормай. Һәр нәмә үҙгәрә, үҫеш кисерә. Шул иҫәптән ваҡытлы матбуғат та даими яңырып тора. "Киске Өфө"лә лә эленән-әле яңы рубрикалар, йүнәлештәр барлыҡҡа килеүен күҙәтергә була. Гәзит йәштәр өсөн дә өлгө булһын, унда йәштәр өсөн дә файҙалы мәғлүмәт күберәк бирелһен ине, тигән теләк бар. Сөнки йәш быуын араһында тормошта үҙ урынын тапмаусылар, талантлы, әммә юғалып ҡалғандар бар. Йәштәр тураһында күберәк яҙылһа, бәлки, баҫманың уҡыусылар даирәһе лә киңәйер ине.

**Рәйсә МӨХӘМӘТОВА.**
Ишембай ҡалаһы.

БАШ ЙОРТТА...

# БАРЫҺЫ ЛА ШӘП...
## тик бына баннерҙар

**Олораҡ быуын кешеләре үҙҙәренең йәшлеге уҙған Өфөләрен һағынһа, йәштәр иһә бөгөнгө Өфөнө иң шәп һәм матур ҡала, тип иҫәпләй. Әлбиттә, һәр замандың үҙ күркәмлеге. Ләкин нимә генә тимә, Өфөбеҙ күҙгә күренеп үҙгәрә, үҫә, матурая. Ваҡыт бер урында тормаған кеүек, ҡала үҫеше лә замана талаптарынан артта ҡалмай һәм ҡыҙыу аҙымдар менән алға бара.**

Был хәҡиҡәтте аңлау өсөн Өфө урамдарын бер ҡыҙырып үтеү ҙә етә. Сағыу алтаҡталар аҫтында ифрат ҙур майҙанлы сауҙа комплекстары, заманса ҡоралмалдар менән лыҡа тултырылған медицина үҙәктәре, ял итеү өсөн барлыҡ шарттар булдырылған театрҙар һәм кинотеатрҙар, төрлө кимәлдәге хеҙмәтләндереү тәҡдим итеүсе ҡунаҡханалар, төрлө милләт аҙығын тәмләп ҡарау мөмкинлеге бирген ресторан һәм ашханалар - барыһы ла уйланылып, урын еренә еткерелеп, баш ҡала халҡы һәм килгән ҡунаҡтар мәнфәғәтен уйлап булдырылған.

Ҡунаҡтар тигәндән, Өфө аэропорты һәм тимер юл вокзалынан ҡалаға илтеүсе юлдарҙың таҙа, төҙөк булыуы ла ҡыуаныслы, сөнки килгән кеше ҡала тураһындағы тәүге тәьҫоратын нәҡ юлдарға ҡарап төйнәй. Элегерәк тимер юл вокзалынан ҡалаға илтеүсе трамвай юлы буйлап сүп-сар тулып ятыуы, иҫке өйҙәрҙең күп булыуы күңелһеҙ һәм насар күренеш ине. Шулай уҡ ҡалаға күтәрелеү ҙә күп ваҡытты алды. Бөгөн иһә поезддан килеп төшөүсене ҙур, яҡты һәм заманса тимер юл вокзалы бинаһы ҡаршы ала һәм ҡала үҙәгенә тиҙ һәм комфорт менән күтәрелеү өсөн барлыҡ шарттар ҙа тыуҙырылған. Юлдар темаһын ҡуҙғатҡас, тағы ла бер фекерем менән уртаҡлашҡым килә. Миңә Белорет, Әбйәлил яғынан килеүсе юлдан Өфөгә инеү бик оҡшай, сөнки күҙ алдына иҫ киткес панорама баҫа. Батырыбыҙ Салауат һәйкәле, Аҡ йорт, Дуҫлыҡ монументы, йәйрәп ағып ятҡан Ағиҙел йылғаһы - барыһы ла баш ҡалаға килеүселәрҙә һоҡланыу тойғоһо уятыуына шик юҡ.

Ләкин күңелдә ҡырған әйберҙәр ҙә бар. Мәҫәләнән, юлдың һәр метрында тиерлек ҙур-ҙур реклама баннерҙары ҡуйылған, ләкин бик һирәктәрендә генә үҙебеҙҙә етештерелгән тауар хаҡында мәғлүмәт уҡырға була, ә күбеһендә сит илдеке маҡтала. Шулай уҡ ҡайһы бер реклама баннерҙарының



ҡара төҫтә һәм сит телдә яҙылыуы ла оҡшамай. Реклама урынын сит-ят тауарҙы маҡтар өсөн биргәс, ул яҙыуҙарҙың, исмаһам, сағыу һәм матур итеп яҙылыуын талап итергә кәрәк, тип уйлайым. Баннерҙар темаһын дауам итеп, күңелде ҡыуандырған бер хәл тураһында ла яҙып үтәйем. Яныраҡ Октябрь проспектынан уҙып барышлай бөйөк шағирыбыҙ, шәхесебеҙ Рәми Ғарипов портреты төшөрөлгән һәм уның шиғырынан өҙөк яҙылған ҙур плакатты күрҙем. Шул саҡтағы ҡыуанысымды белһәгеҙ икән! Бындай шәп идеяны тормошҡа ашырыусыны ҡосаҡлап алырҙай булдым. Ысынлап та, ни өсөн элегерәк ошондай күркәм, фәһемле һәм күңелгә ятышлы плакаттар эленмәгән икән? Халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәре, яҙыусылары, шағирҙары, Аллаға шөкөр, күп. Уларҙың әҫәрҙәренән дә өҙөктәр яҙылған ошондай плакаттар ҡуйылһа, бик һәйбәт булыр ине, сөнки был йәш быуынға ныҡ тәьҫир итеү көсөнә эйә, тип уйлайым. Йөҙ ҡат ишеткәнсе, бер ҡат күреү яҡшыраҡ, тиҙәр бит. Ярым шәрә ҡыҙҙар йәки сит телдә баҫылған баннерҙарға ҡарап йөрөгәнсе, үҙебеҙҙең телдәге һүҙҙәрҙе уҡып йән ҡыуана, күҙ рәхәтләнә.

**Рәмилә ӘМИНЕВА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтып ҡуйырға онотоп ҡуймағыҙ.**

Кем "Киске Өфө"гә апрелдә үк яҙылып ҡуйған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәреп, бәхетен һынап ҡараһын: **өс кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ.**

Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе лә** хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. **2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**



Яңауыл районының башҡорт теле уҡытыусылары һәм уҡыусылары.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2012 йылдың 26 апреленән алып 28-нә тиклем Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһы көндәрен үткәреү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан көндәре республиканың Рәсәй Федерацияһы субъекттары менән хеҙмәттәшлеген нығытыу һәм артабан үҫтереү маҡсатында ойошторола. Сара сиктәрендә Рәсәй баш ҡалаһында республиканың сәнәғәт һәм инвестицион мөмкинлектәре менән таныштырыуҙы күҙ уңында тотҡан эшлекле форум, тематик түңәрәк ҡорҙар, Мәскәү һәм Башҡортостан эшҡыуарҙарының осрашыуҙары үтәсәк. Ике төбәк Хөкүмәттәре араһында хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыу планлаштырыла. Шулай уҡ илдең баш ҡалаһы халҡын һәм ҡунаҡтарын ҙур мәҙәни программа көтә.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Сәнәғәт, транспорт, төҙөлөш, элемтә һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитеты депутаттары "Башҡортостан Республикаһында Торлаҡ мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында"ғы БР Законына үҙгәрештәр индереү тураһында" республика закон проектын тикшерҙе. Бөгөн республикала социаль найм буйынса торлаҡ алыуға дәғүә иткән граждандар буйынса мәғлүмәт базаһы бар. Законға төҙәтмәләр иһә берҙәм мәғлүмәт базаһында эконом класындағы торлаҡ һатып алыуға әҙер граждандар теркәлеүен дә күҙаллай.

✓Башҡортостанда Рәсәй Ҡатын-ҡыҙҙар партияһын булдырыу буйынса инициативалы төркөм булдырылды, уны халыҡ-ара шашка буйынса биш тапҡыр донъя чемпионы, халыҡ-ара гроссмейстер, БР шашка федерацияһы рәйесе, республиканың Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Тамара Таңһыҡҡужина етәкләнә. Илдә ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәйәси партияһын булдырыу тураһындағы ҡарар ошо көндәрҙә Мәскәүҙә үткән Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары конференцияһы сиктәрендә ҡабул ителде. Был сарала Башҡортостан Ҡатын-ҡыҙҙар союзы рәйесе Рәшиҙә Солтанова ҡатнашты.

✓Әлеге мәлдә республиканың туғыҙ районындағы 16 тораҡ пункт һыу баҫыу зонаһында ҡалған. Һыу баҫҡан иң күп йорттар - Йәрмәкәй районында. Бында 375 өй Рә йылғаһы ташыуы һөҙөмтәһендә ҡамауҙа ҡалған. Миәкә районының өс ауылы халҡы ла урындағы йылғаларҙа кинәт һыу күтәрелеүе арҡаһында зыян күргән.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ИСЕМЕНӘ КҮРӘ ЕСЕМЕ

**Атаҡлы авар яҙыусыһы Рәсүл Ғамзатов "Минең Дағстаным" тигән китабында исемдәрҙең мәғәнәһе хаҡында шундай һүҙҙәр әйткән: "Ҡыҙҙар исеме йондоҙҙар балҡышына һәм сәскәләр нәфислегенә оҡшарға, ә ир-ат исемендә ҡылыстар сыңлауы һәм китаптар аҡылы сағылырға тейеш". Әлбиттә, шағирҙың әйткән һүҙҙәре бер ниндәй ҙә мәғәнә аңлатмаған исемдәргә ҡағылмай. Яңы тыуған балаға мәғәнәле исем ҡушыуҙан башлана кешенең бәхетле көнитмеше, уңыштарға өлгәшеүе, оҙон ғүмерле, ҡотло, ырыҫлы булыуы.**



Тимәк, кешегә бер генә тапҡыр бирелә торған исем ниндәйҙер бер шартлы тамға, атама йә билдә генә түгел, ә уның булмышының йөкмәткеһен, тормошоноң мәғәнәһен тәьмин итә торған сара ла. Тап шул хаҡта һөйләй "Исеменә күрә есеме" мәҡәлә. Япондарҙа, мәҫәлән, баланың тешәр сағы үтмәйенсә, бер мөсәл ғүмер һөрөп, ун ике йәше тулмайынса, исем ҡушмайҙар. Был осраҡта бала ун икеһе тулғансы шартлы рәүештә алған, беҙҙеңсә әйткәндә, "йүргәк исеме" менән йөрөп тора. Ә инде ун икеһе тулған баланы өлкәндәр тәрлө йәһәттән күҙ-колаҡ, аң-зиһен һынауы аша үткәреп, уның булмыш-асылына, холоҡ-фиғеленә тап килгән, икенсе төрлө әйткәндә, уның һәр йәһәттән шәхес булып үҫешенә булышлыҡ итерлек исемде ҡушалар икән. Кем белә, бәлки, беҙҙә элек булған "Йүргәк исеме ҡушыу" йолаһы ла ошо маҡсатта үтәлеп, һуңынан сабыйҙы ен алыштырыуҙан һаҡлаусы йола булараҡ ҡына һаҡланып ҡалғандыр. Сабыйҙарына мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушыусы атай-әсәйҙәргә ошо хаҡта күберәк һөйләп аңлатырға ине. Бында аңлатма шулайыраҡ яңғырарға тейештер:

- сабыйына сит йә мәғәнәһеҙ исем ҡушыусы ата-әсә уны ҡот-ырыҫынан мәхрүм итә, исем ҡот ҡына түгел, кеше булмышының үҙенсәлекле коды ла. Белеүебеҙсә, компьютерҙа бер сайтты икенсе код менән асып булмай;
- балаһының яҙмышын аҙаштыра, ундайҙар ике социаль төркөм, ике милләт араһында ҡаңғырып ғүмер итеүсән;
- тормошон мәғәнәһеҙ итә, сит исемдәрҙе йөрөтөүселәрҙең нуры булмай, быны дин белгестәре раҫлай;
- булмышына сит-ят ҡылыҡты көсләп таға, сит исем менән ят ҡылыҡ-холоҡ күсеүсән;
- сабыйын йәнһеҙ ҡурсаҡҡа әүерелдерә һ.б.

Исемдең есемде формалаштырыуы тураһында беҙҙең милләткә лә бик күпте һөйләргә булыр ине. Миҫалға Салауат исемен алайыҡ. Ул ғәрәп теленән "доға, намаҙ" тигәнде аңлата. Салауат батырыбыҙ үҙ исемен милләтебеҙ һәм Аллаһы Тәғәлә алдында шундай киммәткә еткереп раҫланы, уның исемен хәҙер халҡыбыҙ, ысынлап та, доға урынына ҡабатлай. Был исемде йөрөтөүсе милләттәштәребеҙ ошо хәҡикәтте бер ҡасан да иҫтәренән сығармаһын ине: Салауат исемен йөрөтөү милләтебеҙ алдында ғына түгел, Аллаһы Тәғәлә алдында ла оло яуаплылыҡҡа тиң. Мин белгән салауаттарҙың барыһы ла тиерлек был исемде лайыҡлы йөрөтә, әммә беҙ үҙ милли асылынан ситләшеп, аҙашып йөрөгәндәрен дә беләбеҙ.

Милләтебеҙҙең аҫыл улы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың исеме Әхмәт һәм Зәки ҡушма исемдәренән тора. Ғәрәп теленән Әхмәт - "иң маҡтаулы", Зәки "саф, зирәк" тигәнде аңлата. Тарихтың иң һынылышлы мәлендә милләтебеҙ ҡашына баҫып, Башҡорт милли хәрәкәтен, уның армияһын төҙөп, милли автономияһын барлыҡҡа килтереп, хаҡлы рәүештә "Рәсәй Федерализмының атаһы" тигән данлыҡлы исемгә лайыҡ булыусы сәйәси эшмәкәрҙе, милләтебеҙҙең һәм башҡа төрки халыҡтарҙың тарихын, шәрҡиәтте өйрәнеүсе арҙаҡлы ғалимды нисек итеп иң маҡтаулылар рәтендә атамаҫһың да, иң сафтар, иң зирәктәр исеменә индермәҫһең!

Йә булмаһа, хаҡлы рәүештә милләтебеҙҙең рухи короле, рухи батшаһы тип иҫәпләнгән Зәйнулла ишан Рәсүлевты, ҡотб-заманы тип нарыҡланған Ғабдулла ишан Сәидиҙе, Аллаһы юлында мөбәрәк булған Ғатаулла ишанды, Мөхәүир хәҙрәтте алайыҡ. Зәйнулла - ғәрәпсәнән "Алла биҙәге, Алланың ятраҡаны", Ғабдулла - "Алланың ҡоло", Ғатаулла - "Алланың бүләге", Мөхәүир "Алланың күршеһе" тигән мәғәнәгә эйә. Ә бит ошо изге заттар донъялыҡта Аллаһы Тәғәлә алдында ла, милләтебеҙ алдында ла үҙҙәренең исемен бар тулылығында раҫлап, бәҡыйлыҡҡа күсте. Уларҙың исемдәре есемдәренә ысын мәғәнәһендә тура килде, һәр хәлдә, был хәҡиҡәтте улар дөрөҫ аңлап, ғүмерҙәрен халҡыбыҙ киләсәге өсөн фиҙа ҡылды.

Шәйехзада - "иң шәп, иң яҡшы" тигәнде аңлата. Башҡорт милли хәрәкәтенә ҡушылып, үҙен азатлыҡ яулау юлында ҡорбан итеүсе Бабич шағир булараҡ ҡына түгел, башҡорт кешеһе, көрәшсе, сәйәсмән булараҡ та исемен халыҡ йөрәгенә яҙҙы. Һәҙиә - ғәрәпсәнән "бүләк, иҫтәлек" тигәнде аңлата. Шәреҡ ҡатын-ҡыҙҙары араһында беренсе роман яҙыусы мәшһүр яҙыусыбыҙ Һәҙиә Дәүләтшина, ысынлап та, "Ырғыҙ" романы яҙып, милләтебеҙгә мәңгелек оло бүләк, иҫтәлек ҡалдырҙы. Атаҡлы сәхнә оҫтаһы Арыҫлан Мөбәрәков ысын мәғәнәһендәге "башҡорт сәхнәһе арыҫланы" юғарылығына күтәрелде. Аллаһы Тәғәләнең 99 исеме араһында Рәшит һәм Шәкүр тигәндәре лә бар. Рәшит ғәрәпсәнән "тура юлдан барыусы, батыр, ҡыйыу", Шәкүр "мәрхәмәтле" тигәнде аңлата. Яңыраҡ 75 йәшен тултырған күренекле шағирыбыҙ, ғалимыбыҙ Рәшит Шәкүр милләтебеҙ алдында исеменең есеменә бермә-бер тап килгән фиҙаҡәрлек күрһәтте. Әҙәбиәтебеҙ Рәшиттәргә үтә бай булды: Рәшит Ниғмәти, Рәшит Назаров, Рәшит Солтангәрәев, Рәшит Әхтәри һ.б. Рәшит атын йөрөтөүсе был шәхестәр хаҡында ла бик күпте әйтергә булыр ине, һәр хәлдә, улар был исемгә тап төшөрмәне.

Мәрйәм исеме ғәрәп, боронғо йәһүд теленән тәржемә иткәндә "бик шәп", "ханым", "әсә" тигән мәғәнәләргә эйә. Күренекле яҙыусыбыҙ, "Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторы, 5 бала әсәһе, күп кенә ейән-ейәнсәрҙәргә өләсәй һәм картәсәй булған Мәрйәм Бураҡаева һәр йәһәттән үҙ исемен лайыҡлы рәүештә аҡлап йөшәй.

Хәҙер инде ошо уҡ әйтемде кирегә бороп әйтәйек, йәғни "Есеменә күрә исеме". Ошо юҫыҡта бер ҡыҙыҡлы ғына тәжрибә үткәреп ҡарайыҡ. Беҙҙең ҡаршыла бер ваҡытта ла осрашмаған, күрмәгән ят кеше баҫып тора икән, ти. Беҙ уның ниндәй сифаттарына, холоҡ-фиғеленә һәм башҡа билдәләренә ҡарап, ниндәй исем йөрөтөүен төҫмөрләй алабыҙ һуң? Бер уйлағанда, был юл менән кешенең исемен белеү ҙә мөмкин түгел һымаҡ. Шулай ҙа үҙебеҙҙең алға шундай бурыс ҡуйып ҡарайыҡ. Уйлана торғас, ундай ысулдар хәтһеҙ генә булып китте:

- кешенең йөҙөнә ҡарап, ниндәй дингә, расаға, милләткә ҡарауын билдәләп була икән, был уның исемен билдәләүҙәге тәүге аҙым була ала;
- ата-әсәһенең исемен һорашыу ҙа исеменең яҡынса нисек яңғырашын билдәләргә ярҙам итә, ни өсөн тигәндә, ата-әсәйҙәр балаларына исемде үҙҙәрекенә оҡшаш итеп ҡуша;
- әгәр ҙә һин үҙеңә таныш булмаған был кешенең ырыуҙатын, туғандарын яҡшы белһәң, был мәғлүмәт тә яҡынса уның исемен төҫмөрләргә булышлыҡ итә;
- сит ил психологтары билдәләүенсә, исемдәре һуҙынҡы өнгә башланыусылар тартынҡы өнгә башланыусыларға ҡарағанда алсағыраҡ, асығыраҡ, ихласыраҡ була икән, тимәк, уның менән күпмелер ваҡыт аралашҡандан һуң исеменең ниндәй өнгә башланыуын төҫмөрләргә була;
- психологтар билдәләүенсә, исемде хасил итеүсе өндәр берләшмәһе яңғырашы кешенең аҫҡы аңында үҙенсәлекле кодты барлыҡҡа килтерә. Сөнки кешегә үҙ исеме менән үҙ ғүмерендә миллиондарса тапҡыр өндәшәләр. Шуға күрә әңгәмәләшкән саҡта үҙ исемендәге өноҡшаш һүҙҙәрҙе ишеткән саҡта кеше үҙе лә һиҙмәҫтән тулҡынланыу кисерә башлауы бар һ.б.

Был ысулдар барыһы ла есемгә ҡарап исемде билдәләү хаҡында. Әгәр ҙә ошондай ысулдар бар икән, тимәк, исеменә бәйле кешенең холҡо, менталитеты формалашыуын да инҡар итеп булмай. Хатта эттең эте - "Маһ-маһ!", тауыҡтың тауығы "Тип-тип!" тимәйенсә, һинә боролоп ҡарамай. Әгәр ҙә кеше үҙенең милләте өсөн хас булған исемде йөрөтмәй икән, тимәк, был эткә "Тип-тип!", тауыҡҡа "Маһ-маһ!" тип өндәшкән һымаҡ. Беҙгә үҙ асылыбыҙҙы һаҡлар өсөн кәрәк исемдәребеҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 14-се һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Сибай ҡалаһындағы "Сулпан" Башҡорт дәүләт балалар драма театры ойошторолоуға быйыл 20 йыл тула. Коллектив ошо көндәрҙә Төркиәнең Конья ҡалаһында үткәрелгән 5-се Төрки халыҡтарының театрҙар фестиваленә китте. Улар унда Зәйнәб Биишеваның "Мөхәббәт һәм нәфрәт" повесы буйынса эшләнгән спектаклде күрһәтәсәк. Режиссеры - Гөлнара Вәлитова.

✓ Башҡортостанда иғлан ителгән санитар айлыҡ сиктәрендә БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы инспекторҙары санкцияланмаған сүплектәрҙе асыҡлау буйынса тикшереү алып барасаҡ. 2011 йылда яҙғыһын Башҡортостанда 1100-ҙән ашыу һәр төрлө объект тикшерелгән, 300-ҙән ашыу административ штраф һалынған. Экологик өмөләр һөҙөмтәһендә 300-ҙән ашыу санкцияланмаған сүплек бөтөрөлгән, уларҙың 225-е һаҡланған һыу объекттары зонаһында урынлашҡан булған. Территорияларҙы санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү айлығы 14 апрелдән 19 майға тиклем дауам итәсәк.

✓21 апрелдән Башҡортостанда яңы һунар миҙгеле асыла һәм ата өйрәктәргә, вальдшнептарға, ҡаҙҙарға, ҡор һәм һуйырҙарға һунар рөхсәт ителә. Хәтерегеҙҙә төшөрәйек, әле республикала иҫке һунарсы билеттарын берҙәм федераль өлгөләге документтарға алмаштырыу дауам итә. Берҙәм федераль өлгөләге һунарсы билеты - мөҙҙәте сикләнмәгән һәм бөтә ил биләмәләрендә ҡулланырға мөмкин булған документ. Билеттар бушлай алмаштырыла, уларҙы 2012 йылдың 1 июленә тиклем алмаштырып бөтөргә кәрәк.

✓Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының музыка-хореография бүлеге студенттары Болгарияла үткән XIII "Орфеева Дарба" халыҡ-ара бейеүселәр һәм йырсылар конкурсында алтын миҙалға лайыҡ булды. "Халыҡ йыры" номинацияһында вокал бүлегенең 2 курс студенты Эльза Бәзретдинова алтын миҙал яуланы. Өфө бейеүселәре Линера Зәйнетдинова, Екатерина Малыгина һәм Алена Гофман "Модерн һәм характерлы бейеүҙәр" номинацияһында беренсе урын алды. Болгариялағы еңеүҙән һуң педагогия университеты студенттары Италияла үтәсәк халыҡ-ара конкурсҡа саҡырыу алды.

**"Башинформ"дан.**

**✓ Кеше үлеме менән бәйле булған юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоуҙың төүге осрағында уҡ машина йөрөтөү хоҡуғынан мәңгелеккә мәхрүм итеү киләсәктә бындай фажиғәләр ҡабатланмаһын өсөн кәрәк.**



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЭСЕРГӘ ЯРАТҺАҢ...
## машинаң менән мәңгегә хушлаш

**"Алкоголгә ҡаршы фронт" йәмәғәт ойошмаһының исерек килеш автомобиль йөрөткән өсөн водитель таныклығынан мәңгелеккә мәхрүм итеү тураһындағы тәҡдимен Федерация Советында яҡлап сыҡтылар.**

Был мәсьәлә буйынса сенаторҙарҙың фекере парламенттың юғары палатаһының рәсми сайтында урынлаштырылған. "Кеше үлеме менән бәйле булған юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоуҙың төүге осрағында уҡ машина йөрөтөү хоҡуғынан мәңгелеккә мәхрүм итеү киләсәктә бындай фажиғәләр ҡабатланмаһын өсөн кәрәк. Һәр хәлдә, закон нигеҙҙәрендә медицина экспертизаһы үтеүҙең бөтә ҡағиҙәләрен айырым-асыҡ итеп яҙырға кәрәк, сөнки уның һөҙөмтәләре хоҡуктан мәхрүм итеү тураһында ҡарар сығарыу өсөн нигеҙ буласаҡ", - тип белдерҙе Федерация Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары Александр Торшин.

Ә Федерация Советының сәнәғәт сәйәсәте буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Сергей Шатиров, йәмәғәт ойошмаһы тәҡдимен сенаторҙар корпусы ла яҡлаясаҡ, тип өҫтәне. Шул уҡ ваҡытта хоҡуҡ һаҡлаусылар был башланғысҡа ҡаршы сығыш яһаны. Ҡайһы бер сығанаҡтар, Автомобиль хужаларын хоҡуки яҡлау коллегияһы президенты Виктор Травиндың фекеренә һылтанып, бындай норманы индерергә ярамай, тип белдерҙе. Уның фекеренсә, медицина тикшереүе үтеү процедураһы камил булмайынса тороп, хоҡуктан мәңгелеккә мәхрүм итеү сараһын индерергә ярамай. Өҫтәүенә, юлдарҙа ришүәтселек тә бик көслө.

"Алкоголгә ҡаршы фронт" тәҡдиме Дәүләт Думаһы ҡарауына ошо йылдың сентябрендә индереләсәк. Ойошма исерек килеш машина йөрөткән водителдә өс тапҡыр тотҡандан һуң хоҡуғынан мәхрүм итеү яғында. Әлеге ваҡытта бындай хоҡуҡ боҙоусылар 1,5 -2 йылға хоҡуҡ таныҡмаһынан яҙа.

# ЯҢЫ ЙЫЛ ҠЫҪҠАРА...
## май байрамы оҙая

**Дәүләт Думаһы ҡышҡы каникулдарҙы 10 көндән 8 көнгә - 1-8 ғинуарға тиклем ҡалдырыу тураһында РФ Хеҙмәт кодексына төҙәтмәләр индереү тураһындағы мәсьәләне ҡараясаҡ.**

Дәүләт Думаһының Хеҙмәт һәм социаль сәйәсәт буйынса комитеты башлығы Андрей Исаев әйтеүенсә, был өҫтәмә ял көндәре, йәкшәмбегә яҡын тороуҙарына ҡарап, 1 йәки 9 майға өҫтәлә һәм оҙайлы ял мөмкинлеге тыуҙырасаҡ. Бынан тыш, әлеге закон проекты 6, 7, 8, һәм 9 майҙы байрам көндәре итеп билдәләү тураһында хөкүмәт ҡарарын нығытып ҡуясаҡ.

РФ Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, быйыл рәсәйлеләр 29 апрелдән 1 майғаса һәм 6-9 майҙа ял итәсәк. Февраль башында премьер-министр Владимир Путин яңы йыл байрамдарын 7 ғинуар менән сикләргә, ә өҫтәмә ял көндәрен майға күсерергә тәҡдим иткәйне. Ун көнлөк яңы йыл байрамдары Рәсәйҙә 2005 йылда индерелгәйне, ләкин күп тә үтмәй, был яңылыҡты тәнҡитләүҙәр башланды. Яңы йыл каникулдарын ҡыҫҡартыу һәм май байрамдарын оҙайтыу, йә булмаһа яңы байрам көндәре булдырыуҙы тәҡдим иткән закон проекттары Дәүләт Думаһына бер нисә тапҡыр индерелгәйне инде.

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# Ни өсөн туктауһыҙ янғындар сыға? Төп әәйепте ҡоролоҡ һәм башҡа стихиялы бәләләргә һылтау дөрөҫмө?

**(Башы 1-се биттә).**

***Марат БОРХАНОВ, Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының БР буйынса идаралығы матбуғат хеҙмәте хәбәрсеһе:*** БР Хөкүмәте ҡарары менән 1 апрелдән 15 майға тиклем Башҡортостан биләмәһендә янғынға ҡаршы махсус режим булдырылды. Был сара урман массивтарында янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү кұҙәтеүен көсәйтеүгә, урмандарҙа патруль хәрәкәтен ойоштороуға булышлыҡ итәсәк. Хөкүмәт документында янғынға ҡаршы саралар комплексын бойомға ашырыу тәртибе ҡарала: граждандарҙың урман биләмәләренә сығыуын сикләү, урмандарға яҡын ерҙәрҙә һаҡлағыс бураҙналар ярыу, тораҡ пункттар ерҙәрен сүп-сарҙан һәм кипкән үләндәрҙән таҙартыу, бөтә муниципаль янғын бүлексәләрендә лә тәүлек әйләнәһенә дежурлыҡ итеү, шәхси тораҡ йорттар милекселәрен шәхси хужалыҡтарында һыу тултырылған һауыттар һәм янғынға ҡаршы эш ҡоралдары менән йыһазландырыуҙы талап итеү, өгөтнәсихәтте әүҙемләштереү. Янғынға ҡаршы махсус режим осоронда "Торлаҡ" иҫкәртеү операцияһы сараларын да тормошҡа ашырыласаҡ. Йәғни күп балалы ғаиләләр, өлкән йәштәге яңғыҙ граждандар, халыҡтың социаль йәһәттән имен булмаған ҡатламдары йәшәгән, шулай уҡ тәғәйен йәшәү урыны булмаған кешеләрҙең тупланыу урындары махсус күҙәтеүгә алынасаҡ. Республиканың башҡарма власть органдарына һәм урындарҙағы үҙидара органдарына юлдарҙы, шул иҫәптән һыу сығанаҡтарына үтеү урындарын таҙартыу, бөтә тораҡ пункттарын да телефонлаштырыу, аҙ тәьмин ителгән һәм күп балалы ғаиләләрҙең, инвалидтарҙың йорттарындағы мейестәрҙе һәм электр ҡоралдарын йүнәтеү, янғын хәүефһеҙлеге, хоҡуҡ һаҡлау органдары, үҙ теләктәре менән янғынға ҡаршы берләшкән төркөмдәр, урындарҙағы үҙидаралыҡ органдары вәкилдәре составында күсеп йөрөүсе төркөмдәр ойоштороу буйынса яуаплылыҡ йөкмәтелә. Мәғлүм булыуынса, былтыр май айында Рәсәй Дәүләт Думаһы административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында РФ Кодексы ҡабул иткәйне. Унда янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен һанламаған һәм боҙған өсөн ҙур ғына күләмдә штраф һалыу ҡарала. Янғын хәүефһеҙлеге буйынса ябай ғына ҡағиҙәләрҙе даими иҫтә тотоу - һәр кешенең граждандыҡ бурысы: урманда ҙур усаҡ яғыуға һәм уны ҡарауһыҙ ҡалдырыуға юл ҡуймаҫҡа; машина майы, бензин һеңгән сепрәк-сапраҡ кеүек тиҙ тоҡаныусан әйберҙәрҙе, быяла шешәләрҙе ҡырҙа ташлап ҡалдырыу ҡәтғи тыйыла. Сөнки, мәҫәлән, шул уҡ быяла һауыттың үҙендә ҡояш нурҙарын фокус рәүешендә туплап, линза һымаҡ ҡоро үләндә ялҡын хасил итеү ихтималы барлығын оноторға ярамай - бының ҙур фажиғәгә килтереүе бар. Ғөмүмән, ер-һыуыбыҙ, урмандарыбыҙ һәм төйәк иткән ауыл, ҡала һәм йорттарыбыҙ имենлеге күп йәһәттән үҙебеҙҙең фиғелебеҙгә бәйле.

***Илсур ХӘМЗИН, Янғынға ҡаршы федераль хеҙмәттең БР буйынса 28-се отряды начальнигы:*** Белорет муниципаль районында янғындан һәр төрлө иҫкәртеү саралары даими үткәрелә. "Торлаҡ" операцияһы ваҡытында шәхси хужалыҡтар, күп балалы ғаиләләр, инвалидтар, спиртлы эсемлектәр менән мауыҡҡан граждандар йәшәгән урындар тикшерелә. Янғын хәүефһеҙлеге буйынса 1675 кешегә инструктаж үткәрелде, 2094 кеше уҡытылды. Киң мәғлүмәт саралары аша сығыштар яһала, листовкалар, белешмәләр таратыла. Әлеге ваҡытта Белорет муниципаль районында урман янғыны сығыу хәүефе булған ял урындары, ауылдар иҫәпкә алынған. Янғындан һаҡланыу һыҙаттары яңыртыла, яңылары эшләнә. Шуныһы үкенеслe: ҙур эш алып барылыуға ҡарамаҫтан, районда янғындар һаны кәмемәй. Бер йыл эсендә уртаса 160 янғын сыға. Әле, мәҫәлән, йыл башланыуға ярты йыл да үтмәгән, районда 43 янғын сығып, 1 600 000 һумлыҡ зыян килтерелгән. Янғын ваҡытында 4 кешенең ғүмере өҙөлдө. Янғындарҙың күбеһе торлаҡ йорттарҙа сыға. Ут төртөү, электр приборҙары, ут менән һаҡһыҙ эш итеү, мейес яҡҡанда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен боҙоу бәлә-ҡазаға килтереүсе төп сәбәптәр булып тора. Районның ҙур булыуы янғын подразделениеһы хеҙмәткәрҙәренә һәр сәҡта ла 20 минут эсендә янғын урынына барып етергә мөмкинлек бирмәй. Өҫтәүенә, бөтә ерҙә лә янғын һүндереү машиналарын һыу менән тултырыу мөмкинлеге булмау ҙа ваҡытты юғалтыуға килтерә. Шуға күрә ирекле янғын һағы подразделениелары булдырыу мәсьәләһе бик көнүҙәк бөгөн. Был район янғын һағы гарнизоны эшмәкәрлеген күпкә ҡеүәтлерәк итәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ШАҢДАУ

# НИҢӘ УҠЫМАЙҺЫҢ,
## ниңә театрға йөрөмәйһең?

**Беҙ гәзиттәрҙе күп итеп яҙҙырабыҙ, булмағанын һатып алабыҙ. Уларҙы баштан аҙағынаса ентекләп уҡып сығабыҙ. Мин гәзит тә, журнал да, китап та уҡымаған күп ғаиләләрҙе беләм. Ата-әсәһе уҡымаған, балаһында китап уҡыуға ҡарата ниндәй һөйөү уянһын инде? Театр, концерттарға йөрөмәгән ғаиләләр ҙә күп. Үҙ халҡының ғөрөф-ғәҙәтен, мәҙәниәтен, телен яратмайҙармы икән ни улар, тип аптырайым гелән. Шуға ла ундайҙарҙың балалары ла мәҙәниәтебеҙгә битараф, туған телен белмәй үҫә.**

Замана йәштәре өсөн интернет, әлбиттә, мәғлүмәт алыу өсөн бик кәрәкле, уңайлы, тик унда ла насар хәбәрҙәр бик күп. Улар балаларға насар йоғонто яһай. Шуға ла интернет менән ҡулланғанда сама белергә кәрәк. Хәҙерге бала китап уҡымай, гәзит-журналдар тураһында һүҙ ҙә юҡ. Китап уҡымаған кешеләрҙе аңламайым мин. Сөнки беҙҙе атай-әсәйҙәр китап уҡырға өйрәтеп үҫтерҙе, китапҡа һөйөү тәрбиәләне. Үҙ сиратымда мин дә ҡыҙыма шул тәрбиәне һалдым. Оло кешеләргә ихтирамлы, изгелекле, йомшаҡ күңелле, бәләгә тарыған кешегә ярҙам ҡулы һуҙырға ла әҙер ул. Сөнки был сифаттарҙы миндә, өләсәһендә күреп үҫте. Телевизор, компьютерҙан да уҡыуға кәрәкле мәғлүмәттәрҙе генә һайлап ала ҡыҙым. Һәр беребеҙ балаларыбыҙҙа матур сифаттарҙы ғаиләлә тәрбиәләһәк ине. Юҡһа, Көнбайыштан бөтөн насарлыҡты алырға өйрәнеп киттек түгелме? Беҙ электән тәртипле, тыйнаҡ, әҙәплелек менән юғары булғанбыҙ, балаларыбыҙҙы ла шул рухта тәрбиәләргә тырышайыҡ, тормошта дөрөҫ юл һайларға өйрәтәйек.

**Фәниә ӘХМӘТОВА. Өфө ҡалаһы.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Әҙер торлаҡҡа уртаса хаҡ Өфөлә - 2,1, йыл башынан алып 6 процентҡа артты. Апрель башынан бер квадрат метрҙың хаҡы Башҡортостандың баш ҡалаһында уртаса алғанда 53360 һум тәшкил итә. Күсемһеҙ милек агентлыҡтарының береһенең мәғлүмәттәренә ярашлы, иң ҡыйбат торлаҡ ҡала үҙәгендә тәҡдим ителә, унда "квадратына" 65 мең һум самаһы түләргә тура килә. Икенсе урында Октябрь проспекты (56250), "Йәшел саукалыҡ" (55850) һәм Сипайлово (51920 рублей) биҫтәләре килә. Иң арзан фатирҙар иһә Затонда (41700) һәм Шакшала (44900 рублей) һатыла.

✓2012 йылдың 24 апрелендә "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы" башҡарма комитеты Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм "Киске Өфө" гәзите менән берлектә "Конгресс-холл" концерт залында "Айыҡ ауыл 2011" конкурсына йомғаҡ яһау гала-концерты уҙғара. 18.00 сәғәттә башлана. Инеү бушлай.

✓Апрель һәм май айҙарында республикала оло йәштәгеләрҙең "Яратам һине, тормош!" художестволы үҙешмәкәр иждады фестивале үтәсәк. Башҡортостан Республикаһы Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, фестивалдә ҡатнашыусылар үҙ һәләттәрен вокал, бейеү, музыка ҡоралдарында уйнау, әҙәби әҫәр уҡыу һәм оригиналь жанр номинацияларында күрһәтә ала. Ҡатнашыусыларҙың йәше: ҡатындар - 55 йәштән алып, ир-аттар - 60 йәштән алып. Фестиваль гала-концерты 8 июнда "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында уҙғарыласаҡ.

✓2012 йылдың ғинуарындағы мәғлүмәттәр буйынса Башҡортостандағы уртаса эш хаҡы 18371 һум тәшкил итә. Хеҙмәткә яраҡлы граждандар өсөн йәшәү минимумы 5781 һумға еткән. Шул уҡ ваҡытта республикалағы уртаса эш хаҡы Рәсәй буйынса уртаса эш хаҡынан 22 процентҡа ҡалыша. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында бишенсе урында килә.

✓Билдәле ҡурайсы Роберт Юлдашев үҙенең "Ҡурайсы" коллективы менән Санкт-Петербургта үткән абруйлы TE-REM CROSSOVER конкурс-фестивалендә бер юлы ике номинацияла еңеү яуланы. Башҡортостан ҡурайсыһы "Милли үҙенсәлек" һәм "Тамашасы һөйөүе" призрарына лайыҡ булды. Фестивалдә донъяның 12 иленән 28 коллектив һәм 150 музыкант ҡатнашты.

✓ *Эшкәрткән ерҙе хосуси милек итеп рәсмиләштереү өсөн дә аҡсалата ярҙам алып була. Тик ерҙе хосуси милеккә күсереү өсөн тотонолған аҡса бөтә процедура тамамланып, ер рәсмиләштерелгәс кенә ҡайтарылырға мөмкин.*



ЙӘШ ЭШҠЫУАРҒА

# ЭШКӘ ТОТОН ДА...

## ауылға һулыш өр

**1990 йылдар башында крәҫтиән-фермер хужалыҡтарының күпләп артыуы һөҙөмтәһендә 1995 йылда ил буйынса уларҙың һаны 280 меңгә етте. Ләкин артабанғы йылдарҙа, киреһенсә, уларҙың кәмеү тенденцияһы көсәйҙе. Былтыр Рәсәй Хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән "2012-2014 йылдарҙа яңы эш башлаған фермерҙарҙы яҡлау" федераль программаһы ошо проблеманы бөтөрөү һәм крәҫтиән-фермер хужалыҡтарын арттырыуҙы күҙ уңында тота.**



Өс йылға иҫәпләнгән программаның финанслау күләме 15,25 миллиард һум буласаҡ. Ошо йылдар эсендә яңы эш башлаған фермерҙарҙың аҡсалата алған кредит һәм займдар күләме 14,9 миллиард һум тәшкил итәсәк, ә программа ярҙамында бөтәһе 7200 фермер үҙ эшен яйға һаласаҡ, тип күҙаллана. Был һан уйландырырлыҡ, сөнки бөгөнгө көндә ер эшенә яңы тотонған крәҫтиән-фермер хужалыҡтары һәм ауыл хужалығы өлкәһендә эшләүсе эшҡыуарҙар әллә күпме ауырлыҡтар менән осраша. Мәсәлән, күптәрҙең эште башлау өсөн башланғыс капиталы, ә кредит алыу өсөн банкка залогҡа һалырлыҡ мөлкәте юҡ. Шулай уҡ яңы хужалыҡ төҙөгән хәлдә лә, уны инженер селтәрҙәргә тоташтырыу, төрлө проект сметалары әҙерләү һәм башҡалар - барыһы ла үҙ эшен башларға теләүселәргә кәртә булып тора. Һанап үтелгән проблемаларҙы хәл итеү юлын таҡмайынса тороп, үҙ эшмәкәрлеген яңы башлап ҡына торған хужалыҡтарҙың күбеһе был өлкәлә конкурентлыҡ булдыра алмаясаҡ һәм тора-бара бөтөнләй юҡҡа сығыуҙары бар. Ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алғанда, Рәсәй Хөкүмәте бик ваҡытлы һәм кәрәкле программаны тормошҡа ашыра.

Программа, әйтеп үтелгәнсә, үҙ эшен яңы башлап тороусы фермерҙарға тәғәйенләнгән. Был категорияға эшкә яраҡлы, ауыл хужалығы буйынса махсус урта, юғары белем алған, шулай уҡ махсус курстар үткән йәки ауыл хужалығы өлкәһендә 3 йыл эшләү тәжрибәһе булған крәҫтиән-фермер хужалығы етәксеһе йәки шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлгән Рәсәй гражданы инә. Программала ҡатнашыу өсөн крәҫтиән-фермер хужалығы дәүләт теркәү палатаһында иң күбе 36 ай элек теркәлгән һәм тауар һатыу күләме бер йылда 30 мең тирәһе булырға, ә быға саҡлы алып барған шәхси хужалығын КФХ булараҡ теркәгән осраҡта ауыл хужалығы тауарын үҫтереү тәжрибәһе өс йылдан да кәм булмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ Программала ҡатнашырға теләк белдергән КФХ етәксеһе, талаптарға ярашлы, һуңғы 12 айҙа ғариза биргән төбәктә, ауыл ерендә йәшәргә бурыслы. Ҡатнашырға теләүселәр өсөн тағы ла бер талап: улар үҙ хужалығын үҫтереү өсөн 100 мең һум күләмендә төүге иғәнә индереү мөмкинлегенә эйә булырға тейеш.

Дәүләт ниндәй маҡсаттарға аҡса бүлә? Тәү сиратта, крәҫтиән-фермер хужалығы төҙөү өсөн грант бүленә. Был аҡса эшмәкәрлек алып барыу өсөн ер алыуға, инженер селтәрҙәренә тоташтырыуға, ауыл хужалығы объекттары төҙөү өсөн проект-смета документтары әҙерләүгә тотонолорға мөмкин. Грант фермер хужалығына бер тапҡыр ғына бирелә.

Икенсеһе - инвестицион кредиттарҙы субсидиялау. Бындай кредит ауыл хужалығы техникаһы һәм ҡоролмаһы, йорт хайуандары һатып алыу өсөн бирелә. Кредит суммаһы 5 миллионға тиклем күләмдә тәшкил итергә һәм кире ҡайтарыу ваҡыты 15 йылға тиклем булырға мөмкин.

Өсөнсөһө - үҙ эшен яңы башлаусы фермерға йәшәү шарттарын яҡшыртыу өсөн грант. Бүленгән аҡса торлаҡ төҙөүгә, йорт йыһазы һатып алыуға тотонолорға мөмкин. Билдәләп үтергә кәрәк, бүленгән грант күсемһеҙ милек базарындағы икенсел торлаҡ һатып алыуҙы түгел, ә йорт төҙөүҙе йәки яңы төҙөлгән йорттан фатир һатып алыуҙы күҙаллай. Был төр грант та бер тапҡыр ғына бирелә.

Дүртенсе төр дәүләт ярҙамы - лизингҡа алынған ауыл хужалығы техникаһы, ҡоролмаһы, мал-тыуар өсөн түләүҙең тәүге взносын субсидиялау.

Шулай уҡ эшкәрткән ерҙе хосуси милек итеп рәсмиләштереү өсөн дә аҡсалата ярҙам алып була. Тик ерҙе хосуси милеккә күсереү өсөн тотонолған аҡса бөтә процедура тамамланып, ер рәсмиләштерелгәс кенә ҡайтарылырға мөмкин. КФХ тарафынан алынған һәр матди ярҙам өсөн фермер дәүләткә отчет тапшырырға бурыслы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Крәҫтиән-фермер хужалыҡтарын тергеҙеү һәм яңынан булдырыу, яңы эш урындары барлыҡҡа килеү, тимәк, ауылға яңы һулыш биреүҙе аңлата. Көтөлгән прогноздар буйынса, Программа ярҙамында 2014 йылға Рәсәйҙә КФХ-лар һаны 9 меңгә етәсәк һәм бер КФХ 3 йыл эсендә өс эш урыны булдырасаҡ, тип фараз иткәндә лә, бөтәһе 27 мең яңы эш урыны барлыҡҡа киләсәк, тигән һүҙ. Шулай уҡ Программаны ғәмәлгә ашырыу бюджеттан эшһеҙлек буйынса пособиелар түләүҙең кәмеүенә, ә йыйыласаҡ һалымдарҙың артыуына килтерәсәк.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА**
**әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## АЙЫРМАҺЫ НИҘӘ?

**"Хеҙмәт ветераны" исеменә элек лайыҡ булғандар һәм был исем ошо йыл башынан бирелә башлағандар араһында ниндәй айырма бар? Һуңғыларына ни өсөн аҙыраҡ түләнә?**

-"Хеҙмәт ветераны" исеме Рәсәй дәүләт власы органдары тарафынан наградланған кешеләргә бирелә. Уларға ай һайын 376 һум күләмендә аҡсалата түләү һәм индивидуаль тәртиптә иҫәпләнеп, торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн айлыҡ компенсация (ЕДК) ҡаралған. Ә инде 2012 йылдан алып "Оҙайлы эш стажы булған хеҙмәт ветераны" исеме пенсия йәшенә еткән һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн - 35, ирҙәр өсөн 40 йыл стажы булған кешеләргә бирелә. Бының өсөн дәүләт наградаһы талап ителмәй. Уларға үҙ сиратында 145 һум 93 тин айлыҡ аҡсалата түләү ҡаралған. Был осраҡта торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн социаль яҡлау саралары тәғәйенләнмәй.

## "КҮРШЕМ ИНДЕРМӘЙ..."

**"Коммуналь фатирҙан бүлмә һатып алғайным,күрше ҡатын мине индермәй, дөйөм ишектең йоҙағын алмаштырған, асҡыс бирмәй. Кемгә мөрәжәғәт итергә?"**

-Яңы йәшәү урынығыҙ буйынса теркәлгәс, унан полицияның участка инспекторына күршегеҙҙең баш-баштаҡлығы тураһында ғариза яҙығыҙ. Шул уҡ ваҡытта бүлмәгеҙгә урынлаштырыуҙы һәм күршегеҙҙән суд сығымдарын, матди һәм мораль зыянды ҡаплатыуҙы юллап судҡа ла ғариза бирергә хоҡуғығыҙ бар.

## ЫШАНЫСЛЫ ТУРФИРМА ҺАЙЛА!

**Йәйге отпускымда ғаиләм менән Таиландта ял итергә йыйынабыҙ, тик сит илдәрҙә беҙҙең туристар менән булып торған күңелһеҙ хәлдәр һағайта төшә.Турфирма һайлағанда иң тәүҙә нимәгә иғтибар итергә кәрәк?**

Туристик компаниялар күбәйеп китеү сәбәпле, уларҙың ҡайһыны һеҙҙе хәүефһеҙ һәм сифатлы ял менән тәьмин итә алырын өҙөп кенә әйтеүе лә ауыр хәҙер. Туристик фирманың ышаныслылығы, юҡмы икәнлеген асыҡлау өсөн бер генә юл бар: унын хаҡында рәсми сығанаҡтарҙан һәм күргән-белгәндәрҙән мөмкин тиклем күберәк мәғлүмәт туплау. Тегe йәки был агентлыҡ офисына барырҙан алда сит илдә ялда булып ҡайтҡан дуҫ-иш һәм танышҡарығыҙҙың ниндәй компания хеҙмәттәре менән файҙаланыуҙары тураһында ҡыҙыҡһынығыҙ.Улар һеҙгә мотлаҡ кәңәш бирер. Фирманың туризм баҙарында туплаған эш тәжрибәһе хаҡында Интернет аша белешмә алығыҙ, ләкин форумдарҙағы фекерҙәргә бигүк ышанып та бармағыҙ, сөнки, ҡағиҙә булараҡ, үҙҙәре хаҡындағы ыңғай фекерҙәрҙе реклама маҡсатында турагентлыҡтар үҙҙәре лә яҙа ала. Шунан һуң офисҡа ла инеп сығығыҙ. Унда инде алтаҡтаһынан алып бөтә нәмәгә лә иғтибар итегеҙ: техник йыһазланышы ниндәй, күпме хеҙмәткәр эшләй һ.б. Үҙен ихтирам иткән һәм билдәлелек яулаған фирмалар иҫке компьютерҙар менән ҡыҫыҡ ҡына мөйөштәргә һыйынып ултырмай - шуны ла белеп ҡуйығыҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Бәрелгән урынға

Яңылыш бәрәй урынға бәрелһәгеҙ, тәнегеҙгә яңы ғына һығылған һуған һутынан йәки һуғандан яһалған шыйыҡ "бутҡа"нан компресс яһап һалығыҙ.

### Отит

Хәҙер һыуыҡ көндәрҙә лә ялан баш йөрөйҙәр, быһа ғәжәп. Шуға ла ҡолаҡ отиты йыш осрай. Был осраҡта уны түбәндәгесә дауаларға мөмкин: 1 балғалаҡ киптерелгән аҡ сәскәне (ромашка) 1 стакан ҡайнаған һыуҙа тәнәтергә, йылымыс көйө һөҙөргә, сәскәһен һығып алырға. Мамыҡ тампонды ошо тәнәтмәлә сылатып, көнөнә 2-3 мәртәбә һаҡ ҡына ҡолаҡҡа ҡуйырға.

Ҡолаҡ һыҙлағанда эмаль һауытҡа 1 стакан һыу, 5 лавр япрағы һалып, ҡайнау хәленә еткереп алырға ла, 2-3 сәғәткә урап ултыртырға. Һыҙлаған ҡолаҡҡа 8-10 тамсы тамыҙырға һәм 2-3 ҡалаҡ тәнәтмәне эсергә. Был дауаны көнөнә 2-3 тапҡыр ҡабатларға.

### Стресс булғанда

Ҡулдарҙы өҫкә күтәрергә һәм киҫкән рәүештә тубыҡҡа төшөрөргә кәрәк. Бының менән беҙ үҙебеҙҙе күкрәк тултырып тын алырға мәжбүр итәбеҙ, ҡанды кислородҡа байытабыҙ. Стресс мәлендә тын ала алмауҙан ҡотолабыҙ.

### Склероздан

1 стакан һуған һутын 1 стакан бал менән болғатырға. Ашарҙан алда көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡлап бер ай буйына эсергә. Ике аҙна ял иткәс, тағын ике ай эсергә.

### Тын юлдары ауыртҡанда

2 ҡалаҡ аҡ май, 2 йомортҡа һарыһы, 2 балғалаҡ бойҙай оно, 2 балғалаҡ балды бергә болғап, көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Панкреатит

1 стакан һолоны йыуып, ит турағыстан үткәрергә, 5 стакан һыу өҫтәп, 10 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт тәнәтергә. Хроник панкреатит булғанда көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 30-40 минут алда яртышар стакан эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИЗГЕ ЭШТӘРЕҢ...

## тау тишегенән дә ҡотҡарыр

**Бер ваҡыт өс йәш ир-егет сәфәргә сыға. Юлда көслө ямғыр башлана. Егеттәр яҡын-тирәләге тау мәмерйәһенә йәшенергә була. Ямғырҙан ҡотолдоҡ ҡына тигәндә, ҡапыл ҡая башынан таш төшөп, мәмерйә ауыҙын ҡаплай.**

Егеттәр ҡаушап ҡала, ләкин имандары уларға тыныслыҡ һаҡларға ярҙам итә. Берәүһе: "Дөрөҫлөк һәм ихласлыҡтан башҡа беҙҙе бер нәмә лә ҡотҡара алмай. Шуға, әйҙәгеҙ, Хоҙайҙан ярҙам итеүен һорайыҡ. Сөнки беҙ һәр ваҡыт намыҫлы булдыҡ. Ауыр хәлдә лә иман нурын һүндермәнек. Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп, унан изге эштәребеҙ өсөн беҙҙе кисереүен үтенәйек", - тип тәҡдим итә. Һәм ир-егеттәрҙең береһе доға уҡып, шулай ти: "Эй, Хоҙайым. Минең атам-әсәм инде ҡартайған. Аш мәлендә улар ризыҡланып бөтмәйенсә, балаларыма һәм ҡатыныма өҫтәл артына ултырырға рөхсәт итмәйем. Бер саҡ мин алыҫ урманда мал көттөм. Өйгә һуң ғына ҡайтып ингәндә, атай-әсәйемдең йоҡларға ятҡанын күрҙем. Улар йоҡонан уянмайынса, үҙем менән алып килгән ризыҡты өйҙәгеләргә тәҡдим итмәй торҙом. Эй, Хоҙайым. Әгәр ҙә минең был ҡылығым Һинең тарафтан хуплау тапҡан икән, беҙҙе ошо бәләнән ҡотҡарсы". Был һүҙҙәрҙән һуң таштың бер бәләкәй киҫәге ярылып төшә. Әммә мәмерйәнән сығыу мөмкинлеге булмай.

Икенсе егет Хоҙайҙан шулай тип үтенә: "О, Аллаһым. Мин туған кешемдең - бабайымдың ҡыҙына ғашиҡ булдым. Уны һөйөп, иң көслө мөхәббәт утында яндым. Уның менән бергә булырға теләнем, ләкин ул минең тәҡдимде ҡабул итмәне. Йылдарҙың береһендә уңыш уңманы. Ғаиләһен аслыҡтан ҡотҡарыр өсөн был ҡыҙ минә ярҙам һорап килде. Мин уға, әгәр ҙә минең менән булһаң, етерлек аҡса бирәм, тинем. Уның башҡа әмәле юҡ икәнен белә инем. Шул саҡ ул, Хоҙайҙан ҡурҡ, гонаһ ҡылыуҙан тыйыл, тине. Ғишыҡ тойғоларым көслө булһа ла, Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыуым көслөрәк булып сыҡты. Һәм ҡыҙға теймәйенсә, уға бөтә булған аҡсамды биреп сығарҙым. Эй, Хоҙайым! Әгәр ҙә был ҡылығымды ҡабул итһәң, беҙҙе бәләнән ҡотҡар". Таштың тағы бер киҫәге ярылып китә. Ләкин барлыҡҡа килгән ярыҡтан сығырлыҡ булмай әле.

Шунан өсөнсө егет доға уҡый башлай: "Эй, Хоҙайым! Мин үҙемә бер нисә хеҙмәткәр алдым һәм уларға эш хаҡы тәғәйенләнем. Бер аҙҙан бер хеҙмәткәрем минән китте, әммә тейешле эш хаҡын алманы. Уның аҡсаһын мин кәсебемде үҫтереүҙә файҙаландым. Бер нисә йылдан һуң минә шул кеше осраны һәм эш хаҡын түләүҙе һораны. Шул саҡ мин уға: "Ошо дөйә, үгеҙ һәм һарыҡҡа күҙ һал. Уларҙы мин һиңә тейешле булған аҡса менән һатып алдым. Шуның өсөн ул хайуандар хәҙер һинеке", - тинем. Ул бик аптыраны, мине шаярта тип уйланы. Һүҙҙәремдең эскерһеҙ икәнен белгәс, мөлкәтен алып, үҙ юлында булды. Эй, Хоҙайым, әгәр был ҡылығымды изге тип һанаһаң, ҡотҡар беҙҙе". Шул мәлдә күҙгә күренмәгән көс ташты ситкә этәрә. Егеттәр Хоҙайға рәхмәт әйтеп, мәмерйәнән сыға һәм юлдарын дауам итә.

Бәйғәмбәребеҙ сәхәбәләргә был фәһемле тарихты йыш һөйләй торған булған. Йәнебеҙ хазинаһында Хоҙай хуплаған эштәр күберәк булырға тейеш. Изге эштәребеҙҙе телгә алып, беҙ доға ҡыла аласаҡбыҙ. Изге эштәребеҙ өсөн Аллаһы Тәғәлә беҙҙе бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торор.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# "ТАМЫРЫ ТАМЫРҘА" БУЛҒАНДАР...

## егерме йыллыҡты билдәләй

**Гөлназ ҠОЛЬАРИНА, "Тамыр" телеканалы етәксеһе:** "Тамыр"ҙың тыуған көнө тип "Сәңгелдәк" тапшырыуы сыға башлаған көн һанала. Шуның өсөн быйыл 20 йыллыҡ юбилейыбыҙҙы "Тамыры - "Тамыр"ҙа тип аталған программа менән ҡаршыларға булдыҡ. Был проект 3 мартта уҡ старт алды. Унда "Сәңгелдәк" тапшырыуының тәүге алып барыусы балалары, хәҙер инде үҫкән егеттәр-ҡыҙҙар ҡатнаша. Уларға бәләкәй саҡтарында кейгән кейемдәренә оҡшатып кейем тектерҙек, декорация ла элекке тапшырыуҙыҡын теүәл ҡабатлай.

Бөгөнгө "Сәңгелдәк"тең эшенә килгәндә инде, әлегә унда 6 бәләкәс һәм өлкән алып барыусы эшләй. "Тамыр" телеканалы үҙенең геройҙарын балалар баҡсаларында, төрлө сараларҙа таба. Шул ваҡытта башҡортса яҡшы һөйләшеүсе баланы күреп ҡалһаҡ, студияға саҡырабыҙ, кескәйҙәр штаты шулай туплана. "Сәңгелдәк" тапшырыуы балаларына ете йәш тулғас, беҙ уларҙы "пенсияға" оҙатабыҙ. Әлбиттә, был улар менән бөтөнләйгә хушлашыуҙы аңлатмай. Улар икенсе тапшырыуҙарҙы алып барыуҙа ҡатнаша башлай. Әйткәндәй, "Сәңгелдәк"тә күрһәтелгән әкиәттәрҙе тәржемә иткәндә, төрлө кейектәрҙең балалары тауыштарын актерҙар түгел, ошонда эшләгән балалар һынландыра. Эш барышында ҙур ауырлыҡтар килеп тыуғаны юҡ, сөнки бәләкәстәр нимәне, кемде булһа ла ҡабатларға ярата бит. Был улар өсөн уйын кеүек кенә. Тауышты яҙҙырыу бүлмәһендә балалар менән бергә тауыш режиссеры Азамат Рәхимов һәм дубляж редакторы Ләйсән Усманова эшләй.

20 йыллыҡ эшебеҙ үҙ баһаһын таба килә. Республикалағы тәүге "Алтын Орфей" ҙа беҙҙең иҫәптә. "ТЭФИ-Регион" телевизион премияһы 2005 йылда "Ҡоралай" әкиәт-фильмы, 2011 йылда "Байтус" тапшырыуы өсөн бирелде. Бынан тыш, Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты булып торабыҙ.

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА, "ӘЮЯ ҡаласығы" тапшырыуын алып барыусы:** "ӘЮЯ ҡаласығы"ның маҡсаты - балаларҙы уҡырға, яҙырға, башҡортса дөрөҫ һөйләшергә өйрәтеүҙән ғибәрәт. Күп ата-әсәләрҙең логопед ялларға аҡсаһы ла, ваҡыты ла етмәй. Ошо урында беҙ ярҙамға киләбеҙ. Тапшырыуыбыҙҙа логопед күнегеүҙәре, ижектәр әйттереүгә, хәрәкәт итеүгә, артикуляцияны яҡшыртыуға ҡоролған уйындар күрһәтәбеҙ. Башҡорт алфавиты хәрефтәре менән таныштырып бөткәндән һуң ижектәргә күскәйнек, хәҙер һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү, уҡыу буйынса уйын-күнекмәләр эшләтәбеҙ. Мәктәптә уҡытылған кеүек, үтелгәнде ҡабатлатып киләбеҙ. Әммә беҙҙең тапшырыуҙа материал балаларға ҡыҙыҡлы, күңелле итеп, уйын формаһында бирелә. Уҡытыусылар шылтыратып, сценарийҙы нисек төҙөүем тураһында һорашып, ҡыҙыҡһынып торалар. "Тапшырыуҙарығыҙ - әҙер дидактик материал бит һеҙҙең!" тип ебәрәләр. Дәрестә ҡулланыу өсөн дискылар сығарып бирә алмаҫһығыҙмы икән, тиҙәр.

**Салауат ӘБДЕЛВӘЛИЕВ, "ӘЮЯ ҡаласығы" тапшырыуын алып барыусыларҙың береһе, 6 йәш:** Мин 4 йәшемдә "Сәңгелдәк"кә килдем. Әле "Сәңгелдәк"тең алып барыусыһы һәм шул уҡ ваҡытта йыл ярым тирәһе инде "ӘЮЯ ҡаласығы"ның төп алып барыусыларының береһемен. Миңә бында эшләү оҡшай. "Сәңгелдәк" төшөргәндә көнө буйы студияла булырға тура килә. Тапшырыуға әҙерләнгәндә сценарий буйынса һүҙҙәрҙе ятлау бер аҙ ауырыраҡ, әлбиттә. Әсәйем был саҡта мине уйнарға ла сығармай, компьютер артында ултырырға ла рөхсәт итмәй. Мин әсәйемде һәр саҡ тыңлап йөрөргә тырышам. Ул мине ҡайһы ваҡыт: "Ялҡауҙар иленә" ебәрәм һине,"- тип ҡурҡыта. Ә минең унда барғым килмәй, унда төрлө торттар, туңдырмалар, тәмлекәстәр биреп, балаларҙы һимертәләр. Минең һимергем килмәй. Быйыл миңә "Тамыр"ҙа 4 мең һум эш хаҡы түләгәйнеләр, мин шуның 3 мең һумына сенсорлы телефон һатып алдым. Минең олатайым һәм ике өләсәйем, бәләкәс кенә ҡустым бар. Улар мине телевизорҙан ҡарай. Маҡтап торалар, егәрлебеҙ беҙҙең, тиҙәр.

**Лилиә ДӘҮЛӘТБАЕВА, Хәрефбикә:** "ӘЮЯ ҡаласығы" тапшырыуына мине "Тамыр" үҙе саҡырып алды. Ошоға шатланып бөтә алмайым, сөнки балалар менән аралашҡанда бер нисә сәғәткә бала сағыма ҡайтҡандай булам. Уйнайым, көләм, бейейем, туйғансы һикерәм. "ӘЮЯ ҡаласығы" миңә яҡшы кәйеф биреүҙән тыш, хәтеремде яҡшыртырға ла ярҙам итә. Сөнки күп осраҡта Өнбай менән сценарийҙы тапшырыуҙы яҙҙыра башлауға биш минут ҡалғас ҡулыбыҙға алабыҙ. Баштараҡ шиғри юлдарҙы иҫтә ҡалдырыуы ауырыраҡ булһа, хәҙер тиҙ генә отоп алам. Тапшырыуҙы төшөргәндә мауығып йөрөп, ҡайһы ваҡыт өйгә ҡайтырға сыҡҡанда "һипкелдәремде" юйырға онотам. Ул саҡта инде урамда осраған балалар: "Был бит Хәрефбикә!" - тип танып ҡала. Һипкелдәремде юйһам, танымайҙар. Геройымдан айырмалы рәүештә, мин бит 14 йәшлек үҫмер түгел, ә Өфө сәнғәт академияһы студенты, кейәүҙәмен.

**Фәрхәт ҒӘЙНЕТДИНОВ, "Шәп арба" тапшырыуын алып барыусы:** Тапшырыу "Малайҙар - буласаҡ атайҙар" девизы аҫтында үтә. Телевизор ҡараусы малайҙарҙы бала саҡтан уҡ эшкә, тырышлыҡҡа, оҫталыҡҡа өйрәтеп тәрбиәләргә булышлыҡ итәбеҙ. Заман ата-әсәләренең ваҡыты бик тығыҙ булыуын иҫәпкә алғанда, күбеһенең эш, аҡса табыуҙы хәстәрләп йөрөп, улы менән ағас юнып, ниҙер өйрәтеп, эшләп ултырырға форсаты юҡ. Мин бына тапшырыуҙың сценарийын төҙөгәндә ошоно күҙ уңында тоторға тырышам, бәләкәй саҡта үҙемде нимәләр ҡыҙыҡһындырған, шуны балаларға эшләп күрһәтәм. Бәлки, мин эшләргә өйрәткән әйберҙәрҙең күбеһенең көндәлек тормошта кәрәге лә теймәйҙер, был мөһим түгел. Балаларҙа эшкә ҡыҙыҡһыныу уятып, әйберҙәрҙең эшләнеш конструкцияһын өйрәтеү маҡсатын ҡуям. Сөнки мин өйрәткән пластик ҡул йыуғысты өйҙә элеп ҡуймаҫтар, әммә егет кеше уны экстремаль шарттарҙа тиҙ генә эшләп ҡуя белергә тейеш. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, ти халыҡ аҡылы. Мәҫәлән, малай саҡта кемдең генә уҡ юнып эшләгеһе килмәй икән, әммә атайҙар улын был шөғөлгә өйрәтергә форсат тапмай, уның ҡарауы, "Шәп арба" тапшырыуы ярҙамға килә...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалының юбилейы айҡанлы был көндәрҙә төрлө саралар үтә. Мәҫәлән, 1 апрель көндө БСТ каналы буйынса күрһәтелгән һәр тапшырыу "Тамыр" студияһы балалары ҡатнашлығында үтеүенә шаһит булынды. Ә инде 18 һәм 19 апрель көндәрендә Конгресс-холл бинаһында "Егерме йыл. Тамыр менән бергә үҫәбеҙ" тип аталған оло байрам кисәһе үтәсәк. Унда махсус саҡырылған ҡунаҡтар - "Класс!" телекомпанияһы генераль директоры, Рәсәй телевидениеһы академияһы ағзаһы, "Спокойной ночи, малыши!" тапшырыуы авторы Людмила Зайцева һәм башҡаларҙың ҡатнашыуы көтөлә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

✓ *Ихтилал баҫтырыла, ә Борай башҡорт кантоны бөтөрөлә. Әммә Өфө губернаһы крәҫтиәндәре өсөн автономиялы Башҡорт республикаһына ҡушылыу ынтылышы бушҡа китмәй. 1920 йылда ҡушылыу хәрәкәте яңы көс менән тоҡана.*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# БОРАЙ КАНТОНЫ




Большевистик йүнәлештәге "Көрәш" татар гәзите ҡылыҡһырлауынса, "Борай болаһының" идея етәкселәре "революцияға ҡаршы буржуйҙар" - Дүртөйлөнән Сәхибзада Мәксүтов һәм Борайҙан Шәрәфи Хәмидов була. "Был халыҡ дошмандары Бөрө өйәҙендәге Манһары кеүек аҫаба башҡорт ауылдарын фетнәгә ҡоторта, йәнәһе лә, большевиктар килеп, мәсеттәрҙе емереп, динде бөтөрәсәк. Ҡотортоу һөҙөмтәһендә Борай ауылында большевиктарға ҡаршы көрәшергә ҡарар иткән ҡоралды төркөм барлыҡҡа килә..." Ҡотортоусылар нимәлә хаҡлы булмай һуң? Бер аҙҙан большевиктар крайҙағы барлыҡ мәсеттәрҙе һәм сиркәүҙәрҙе емерә, динде һәм "Көрәш" гәзитенән большевиктарҙың йырын йырлаусылар үҙҙәренең агиткаларында ҡулланған гәрәп графикаһындағы яҙыуҙы тыя. Парадоксаль хәл-торош тыуа: Башҡорт хөкүмәте ағзалары төрмәлә ултыра, ә Борай һәм башҡа кантондар ай ярым үҙ аллы автономиялы Башҡортостан исеменән идара итә. Өфө губернаһында борайҙар тәүгеләрҙән булып ауыл халҡынан һуңғы иген запасын тартып алған Өфө большевиктарына ҡаршы асыҡтан-асыҡ һуғыш башлай. Был ваҡытта Борай Башҡорт автономиялы районы Өфө губернаһы башҡорттарының буласаҡ Башҡорт республикаһы тураһындағы хыялының көүҙәләнеше булып тора, уны тормошҡа ашырыу өсөн борайҙарға бөтмәҫ батырлыҡ һәм халҡының үҙбилдәләнеше идеяһына ышанырға кәрәк була. Былар барыһы ла XX быуат башында төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының башҡорт этносының башҡа өлөшө менән дә, уның үҙ хоҡуҡтары өсөн күп быуатлы ҡаһарман ҡоралды көрәше тарихы һәм рухы менән дә бәйләнешен юғалтмағанлығын раҫлай.

Борай ихтилалының идея рухландырыусылары кемдәр була һуң?

Шәрәфи Хәмидов хаҡында уның тыуған ауылында һаман да иҫләйҙәр, "Шәрәфи бай" йәшәгән ҙур ағас өйҙә күрһәтәләр. Архивта уның тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һаҡланған. 1917 йылғы Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу анкеталарында бына нимә тип яҙылған:

**Йәшәгән урыны:** Өфө губернаһы, Бөрө өйәҙе, Борай олоҫо, Борай ауылы. **Исеме:** Хәмидов Шәрәфетдин; **ҡатламы:** аҫаба; **милләте:** башҡорт; **малы:** 4 аты, 2 һыйыры, 2 быҙауы бар. **Сауҙа-сәнәғәт биналары:** ярма тарттыҡғыс - 1, тирмән - 3, иген пристане - 1. **Шөғөлө:** сауҙа. **Ауыл хужалығы ҡоралдары:** 7 арба. **Йорт хужаһына мөнәсәбәтле кешеләр:** эшсе- 28 йәштә, эшсе - 43 йәштә, улы - 7 йәштә, хужа - 53 йәштә. **Ҡатын-ҡыҙҙарҙан:** ике һеңлеһе - 17-шәр йәштә, ҡыҙы - 5 йәштә, әсәһе - 100 йәштә, ҡәйнәһе - 62 йәштә, ҡатыны - 52 йәштә, ҡатыны -28 йәштә.

Сәхибзада Мәксүтов тураһында уның сауҙагәр булыуы, Ш. Хәмидов кеүек иген менән сауҙа итеүе билдәле. 1902 йылда Бөрө өйәҙ земство йыйылышының асыҡ вәкиле итеп һайлана, ә 1906 йылда беренсе саҡырылыш Рәсәй Дәүләт Думаһының мосолман фракцияһы ағзаһы була. Уның шул уҡ иҫәп алыуҙағы карточкаһында былай тип яҙылған: **Йәшәү урыны:** Өфө губернаһы, Бөрө өйәҙе, Елдәк олоҫо, Дүртөйлә ауылы. **Исеме:** Мәксүтов Сәхибзада Дәүләтша улы. **Ҡатламы:** Әсән олоҫо крәҫтиәне. **Милләте:** татар. **Мал-тыуары:** 5 аты, 3 һыйыры, 3 быҙауы, 3 кәзәһе бар. **Сауҙа-сәнәғәт биналары:** ярма тарттырғыс - 6, пар тирмәне - 3, киптергес - 3. **Шөғөлө:** сауҙа. **Йорт хужаһына мөнәсәбәтле кешеләр:** улы - 6 йәштә, улы - 23 йәштә, хужа - 45 йәштә; ҡатыны - 40 йәштә, ҡыҙы - 10 йәштә, ҡыҙы - 15 йәштә, ҡыҙы - 17 йәштә, хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ - 16 йәштә, ашнаҡсылар 17 һәм 40 йәштә.

Мәскәүҙә Борайҙағы ваҡиғалар борсоуға һала. РСФСР-ҙың аҙыҡ-түлек буйынса комиссары Цюрупа Өфөгә телеграмма һуға: "Борайҙарҙың сығыштарын туҡтатыу өсөн бер нәмә алдында ла туҡтап ҡалмайынса, бөтөн ысулдарҙы ла ҡулланыуығыҙҙы һорайым. Тарҡатыусылар - һатлыҡ йәндәр менән бер ниндәй килешеү булырға тейеш түгел! Отрядтар ебәрегеҙ, етәкселәрҙе ҡулға алығыҙ, уларҙы ҡаты хөкөмгә тапшырығыҙ..." Күрәһең, тап ошонан һуң Борайға Ҡыҙыл Гвардия отряды йүнәләлер ҙә инде. Үрҙә телгә алынған Акимовҡа ышанғанда, 1918 йылдың февралендә Бөрөгә Ҡатау-Тамаҡ заводы эшселәренән төҙөлгән А. Вострецов етәкселегендәге отряд килеп етә. 2-3 көн эсендә ул батальонғаса үҫә. Тап ошо батальон 3 мартта баш күтәреүсе Борай автономиялы районына инә. Артабанғы сығанаҡтар ваҡиғаларҙы төрлөсә һүрәтләй. Г. Акимов: "Борайға етмәҫ элек отряд алғы һыҙыҡҡа һаҡ, дозорҙар ҡуйып, йәйәү китте... 3 март иртәһендә, ауыл ситендә отряд күренеү менән, муллалар беҙгә ҡаршы ҡарттарҙың, ҡатын-ҡыҙҙың тыныс халыҡ ағымын ебәрҙе. Тыныс осрашыу үтте... Ихтилал штабы беҙҙең отрядтың өҫтөнлөгөн күреп, ҡаршы тороуҙың файҙаһыҙ булыуын иҫәпкә алды. Бынан бер көн алда, 2 мартта, отрядтарҙы таратыу, ҡоралды төрлө ерҙәргә йәшереп, беҙҙе тыныс ҡаршы алырға тигән ҡарар ҡабул ителгәйне. Аҡ гвардия офицерҙары крәҫтиән булып кейенеп, өйҙәрҙә йәшеренде. Ихтилал башлыҡтарынан 10 кешене ҡулға алып, олоҫ Ревкомы төҙөп, отряд кире китте". Борайҙа, Акимов әйтеүенсә, ҡыҙылгвардеецтарҙың взводы төҙөлә.

"Көрәш" гәзитендә ваҡиғалар бөтөнләй икенсе төрлө яҙыла: "Был ваҡиғаларҙың ҡыҙған мәлендә Борайға ҙур булмаған Ҡыҙыл Гвардия отряды килде. Борай баш күтәреүселәре Ҡыҙыл Гвардияға ҡаршылыҡ күрһәтте; улар Совет власын танырға теләмәне. Ҡыҙыл Гвардия отрядына кире ҡайтырға тура килде. Өфөнән Борайға совет ғәскәрҙәрен ебәреп, боланы баҫтырырға ҡарар ителде..." "Көрәш" гәзитенең версияһы дөрөҫлөккә тап килгәнерәк булып күҙ алдына баҫа, сөнки улар 1918 йылдың 4 апреле менән билдәләнә, йәғни тап Борай ихтилалы мәлендә яҙыла, ә Акимовтың хәтирәләре тиҫтәләрсә йылдар үткәс яҙыла һәм шуға күрә анахронизмдар һәм һуңғы күренештәрҙе, мәҫәлән, Борай аҡ гвардия офицерҙары кеүек, интерполяциялау менән сыбарланған.

Мәғлүм булыуынса, 1918 йыл башында Аҡ гвардия булмай. Шул уҡ ваҡытта, әгәр Совет власы Борайҙа, Акимов яҙғанса, 3 мартта урынлаштырылһа, большевиктарға уны ҡабаттан 1918 йылдың 27 мартында Өфө гарнизоны ғәскәре ярҙамында урынлаштырыу кәрәкмәҫ ине: "Шаршамбы, 27 мартта, төнөн Өфөнән килгән совет ғәскәрҙәре "Борай фронтын" ҡамап алды. Борайҙы алып, улар ҡаты тәртип урынлаштырҙы". Күрәһең, Г. Акимов 1918 йылдың ҡышындағы ваҡиғалар барышын аңлы рәүештә үҙгәрткәндер, сөнки был Совет власының Граждандар һуғышы башланғанға тиклем триумфаль хәрәкәтенә бер нисек тә тап килмәй.

"Борай бола"һын баҫтырыу көндәрендә Бөрөлә Советтарҙың Өсөнсө съезы үтә. 28 марттағы ултырышта Бөрө халыҡ комиссарҙары рәйесе И. С. Чернядьев ҡәнәғәтлек менән "Советтарға ҡаршы Борай хәрәкәтенең бөтөрөлөүе тураһында" хәбәр итә. 31 мартта боласы автономиялы районға барыусы делегат Ҡудашев Ҡыҙыл Гвардия тарафынан "ҡайһы бер Борай фирмаларына Совет власына ҡаршы агитация алып барған өсөн" 2 миллион һумға контрибуция һалыу тураһында хәбәр итә. Ихтилал баҫтырыла, ә Борай башҡорт кантоны бөтөрөлә. Әммә Өфө губернаһы крәҫтиәндәре өсөн автономиялы Башҡорт республикаһына ҡушылыу ынтылышы бушҡа китмәй. Ул һуңыраҡ ҡабатланыусы бындай күренештең тәүге тәжрибәһе була. Артабан күреүебеҙсә, 1920 йылда ҡушылыу хәрәкәте яңы көс менән тоҡана.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН,**
**Рөстәм ТАЙМАҪОВ.**

**(Аҙағы. Башы 14-се һанда.)**

*ХАҠ ТАМЫРЫБЫҘ*

# ЯҘМЫШЫБЫҘ...

## ергә бәйле

**Бөгөнгө ер мәсьәләһен ҡуҙғатҡанда, мотлаҡ тарихты байҡап эш итергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Республикабыҙ ергә бәйле хоҡуҡтарын яҡлағанда тарихи мәғлүмәттәрҙең нескәлеген белеп, үткән быуаттарҙағы тәжрибәгә таянып ҡарар ҡабул итергә тейеш. Бер нисә әһәмиәтле фактты ғына атап үтәйек.**

Алтын Урҙа осоронда, Рәсәй батшалығы дәүерендә лә ер айырым бер башҡортҡа түгел, ә ҡан-ҡәрҙәшлек буйынса олоҫҡа берләшкән бер нисә ауылға ҡарап бүленгән. Йәғни башҡорт аҫабалығын шулай аңларға кәрәк - ул шәхси милек түгел, ер туғандарҙы, зат-зәүерҙәрҙе берләштергән коллективтыҡы, бер нисә ауылдың дөйөм милке булған. Индивидуаллеккә ҡаршы торған халҡыбыҙға хас коллективлыҡ рухы бына ошонан килә лә инде. Тап олоҫтар, ә башҡа административ бүленештәр түгел, Сыңғыҙхан исеменән ярлыҡ, аҙаҡтан Рәсәй батшаһынан жалованный грамота ала. Һуңғы документ рәсми рәүештә 1917 йылға тиклем үҡ үҙ көсөндә була. Әммә, белеүебеҙсә, ысынбарлыҡта аҫабалыҡ хоҡуҡтары 17-се, 18-се быуаттарҙа боҙола башлай. Күсенеп килгән крәҫтиәндәрҙең байтағы башҡорт ерҙәренә законһыҙ килеп ултыра. Бер туҡтауһыҙ ихтилалдар тоҡана. Шуға күрә ер мәсьәләһен көйләү маҡсатында 18-се быуат урталарында бөтә ил буйлап ерҙе генераль межалау башлана. Был бик оҙайлы эш быуаттан ашыу ваҡытҡа һуҙыла һәм бер нисә этаптан тора. План буйынса башҡорт ерҙәрен башта элеккесә - ауылдар берләшмәһенә беркетәләр. Бер нисә тиҫтә йыл үткәс, ер бер ауыл милке булып һанала башлай. Ә 19-сы быуат аҙағында ер пайҙары ғаиләләргә бүленеп бөтөрөлә. Башҡорт ерҙәрен межалау - Столыпин реформаһын һынап ҡарау ҙа ул. Ләкин был реформаның һөҙөмтәләрен беҙ беләбеҙ.

Бөгөн дә беҙ ерҙең шәхси ҡулға күсеүенең ыңғай яҡтарын күрмәйбеҙ. Ауыл кешеһенең үҙ ер пайы менән файҙаланыу мөмкинлеге юҡ. Ул уны ҡуртымға бирә, йә бөтөнләй һатып ебәрә - еребеҙ шулай юҡҡа сыға. Тарихҡа таянып, проблеманы хәл итеүҙең бер юлын шунда күрәм: ауыл халҡына ерҙәрен берләштереп, ирекле рәүештә кооперативтар ойоштороу шарттарын тыуҙырырға була. Дәүләткә бөтөрөлгән колхоз-совхоздарҙың яңы типтарын тергеҙеп ҡарарға кәрәктер. Был осраҡта ҙур финанс ярҙам күрһәтеү, процентһыҙ кредит бүлеү, тәүге осорҙа һалым түләүҙән бушатыу талап ителәләр. Бында халыҡтың да теләге булырға тейеш, әлбиттә. Әйткәндәй, көнбайыш илдәрендә лә - Швеция, АҠШ, Германияла шундай кооперативтар шәхси фермерҙар менән бер рәттән уңышлы эшләп килә. Икенсенән, ерҙәребеҙ ситкә китмәһен тиһәк, ценз, йәғни сикләүҙәр индереүҙе талап итергә кәрәк. Батша хөкүмәте осоронда башҡорт аҫабалығын һаҡлар өсөн тап шундай сикләүҙәр индерелә. 1649 йылғы Соборное уложение буйынса, башҡорт ерҙәрен 12 йылға ғына ҡуртымға алыу рөхсәт ителә, ә уларҙы һатыу-һатып алыу бөтөнләй тыйыла. 1736 йылда сыҡҡан законға ярашлы, башҡорт ерҙәрен һатып алыу хоҡуҡы хәрбиҙәр һәм дворяндарға ғына бирелә. Хатта 19-сы быуатта башҡорттар өҫтөнлөккә эйә була. Бер башҡорт йәне иҫәбендә 40-60 гектар ер булһа, күсенеп килгән крәҫтиәндәргә ҡуртымға 15 гектар ер генә алыу рөхсәт ителә. Артабан гектар иҫәбе тағы ла кәметелә. 1882 йылғы закон буйынса, башҡорттарҙан ерҙе дәүләт учреждениелары һәм крәҫтиән общиналары ғына һатып ала ала. Хәҙерге заман шарттарында икенсе төбәктәрҙә йәшәгәндәргә ер һатыуҙы тыйырға йә булмаһа сикләргә кәрәк. Бынан тыш, ер майҙаны билдәле бер күләмдә - әйтәйек, бер ҡулға 10-15 гектарҙан да күберәк булмаған күләмдә генә һатылырға тейештер.

**Айтуған АҠМАНОВ,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**

*✓ Туризм дәүләт ярҙамына мохтаж өлкә. Ә беҙҙең республикала туризм эйәрсән ҡойроҡ ролендә, йәғни үгәй бала кеүек, гел генә ниндәйҙер дәүләт органына ҡушымта булараҡ ҡына көн күрә.*



**Туризм - нефть, нефть продукттары һәм автомобиль төҙөү сәнәғәтенән ҡала донъя иҡтисадына тос өлөш индереүсе өлкә. Ләкин был исемлеккә беҙҙең илде ҙур ҡыйынлыҡ менән генә индереп була, сөнки әлегә тиклем Рәсәйҙә дәүләт тарафынан туризмға иғтибарҙың әҙ бүленеүе, ә халыҡтың был тармаҡты файҙалы һәм килемле итеп күрмәүе уға киң ҡолас йәйеп үҫергә ирек бирмәне. Шулай ҙа һуңғы йылдарҙа туризмға ҡараш ыңғай яҡҡа үҙгәрә. Республикала ла был өлкәлә ыңғай тенденция барлыҡҡа килде. Тиҙҙән туристарҙың ныҡлап әүҙемләшкән миҙгеле - йәй етеүен иҫәпкә алып, редакцияға ҡунаҡҡа Башҡортостан Республикаһының Туриндустрия союзы рәйесе Кинйә КУСКИЛДИНды һәм Бөрйән районының "Йәш натуралистар станцияһы" етәксеһе, "Шүлгән-тур" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте генераль директоры Урал ХӘЛИУЛЛИНды түңәрәк өҫтәл янына һөйләшеүгә саҡырҙыҡ.**

**Бөгөн туризмды үҫтереү, уның яңынан-яңы тармаҡтарын асыу, ҡулайлаштырыу хаҡында һүҙ күп алып барыла. Шуға күрә һөйләшеүҙе, бөгөнгө көндә республикала туризм ни хәлдә, тигән һорауҙан башлағы килә.**

**Кинйә КУСКИЛДИН:** Республикала туризм йылдам үҫә, ләкин эшләйһе эштәр, хәл итәһе мәсьәләләр күп. Бер йыл элек республика Президенты тарафынан туризм буйынса Башҡортостан концепцияһын булдырыу һәм туризмды үҫтереүҙең маҡсатлы программаһын төҙөү мәсьәләһе күтәрелгән һәр кеше интернет селтәре аша беҙҙең районның туристик маршруттары, базалары һәм башҡа мәғлүмәтте ҡарай аласаҡ. Артабанғы маҡсатыбыҙ районда берҙәм туроператор булдырыу, сөнки был, беренсенән, туризм өлкәһендә эшләүсе эшҡыуарҙарға ҙур ярҙам, икенсенән, беҙгә кереүгә бар көсөн һалып тырышһа ла, эштәре дәүләт кимәлендә яҡлау тапмаһа, туризмдың ышанызлы һәм ныҡлы аҙымдар менән алға китеүе икеле. Әлбиттә, ҡасан да булһа туризм юғары кимәлгә етәсәк, ләкин юғарынан таяныс көслө булһа, был үҫеш тиҙерәк барасаҡ. Бының шулай икәнен аң-

өйрәнергә һәм тәжрибә уртаҡлашырға кәрәк, сөнки беҙҙә бөтә донъяға сығарып күрһәтер тәбиғи һәм рухи байлығыбыҙ күпкә артығыраҡ. Туризм, әлбиттә, үҙ эсенә эшҡыуарлыҡты ала, ләкин дәүләт ярҙамы һәм терәге булмайынса, был өлкәне үҫтереү һәм киңәйтеүе үтә лә ауыр. Туризм - ул дәүләт эше.

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Тәү ҡарашҡа, беҙҙә туризмды үҫтереүгә бөтә мөмкинлектәр ҙә бар кеүек, ләкин ҡаршылыҡтар ҙа, ҡытыршылыҡтар ҙа юҡ түгел. Тәү сиратта ошо өлкәгә ҡағылған закондарҙың ныҡлап уйланылып, урын-еренә еткереп эшләнмәүе, ә ҡайһы берәүҙәренең хатта бер-береһенә ҡаршы килеүе ҙур проблемалар тыуҙыра. Мәҫәлән, ауылда йәшәүсе һәм ауыл хужалығында эшләүсе кешегә туризм менән шөғөлләнеү мөмкин түгел, сөнки был за-

барьер барлыҡҡа килтерә һәм эшкә аяҡ салырға мөмкин, ә икенсе осраҡта иһә ул хәл итәһе юлдар эҙләй һәм, һис шикһеҙ, таба.

**▸ Туризм менән шөғөлләнергә теләп тә, был эшкә тотонорға ҡыймаған ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, был өлкәлә "еләкле урындар" ҡалмаған инде...**

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Бындай фекерҙе теләге булып та, дарманы етмәгәндәр әйтә йәки ялҡаулығын ошо фекер менән аҡларға тырыша, сөнки бөгөнгө көндә туризм баҙары бөтөнләй үҙләштерелмәгән, тип әйтергә була. Был өлкә һөрөлмәгән ерҙе хәтерләтә һәм эшләргә теләгән кешегә ҡолас йәйеп эшләү мөмкинлеге ҙур. Ләкин туризмды тиҙ һәм мул килем килтереүсе өлкә тип кенә уйлап, был эшкә тотоноусылар төптө хаталана, сөнки

# БАШҠОРТОСТАН

## "еләкле" урындар

гәйне. Бөгөн шул программа өҫтөндә ҡыҙыу эш алып барыла. Тағы ла Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетында ла тик туризм мәсьәләләре менән шөғөлләнеү өсөн өҫтәмә эш урындары булдырыу ыңғай күренеш, тиергә кәрәк. Шулай уҡ туриндустрия өлкәһендә эшләүсе эшҡыуарҙар ҙа тик ятмай, күберәк туристар йәлеп итеү өсөн төрлө юлдарын эҙләй, был өлкәлә яңынан-яңы офоҡтар аса, төрлө күргәҙмәләргә йөрөп, үҙенең туристик продуктын тәҡдим итә. Ғөмүмән, уҙған йылдар менән сағыштырғанда, туризм өлкәһендә эштәр әүҙемләште, шулай уҡ был тармаҡҡа инергә теләүселәр ҙә күп, тимәк, халыҡ туризмдың баһаһын ныҡлап аңлай башланы.

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Был өлкәлә мин 1999 йылдан эшләйем һәм, әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа туризмға булған ҡараш бермә-бер ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, был тармаҡҡа иғтибар артты. Элек бары тик күңел асыу итеп кенә ҡаралған тармаҡ хәҙер төбәкте үҫтереүҙең, тормошто ыңғай яҡҡа үҙгәртеүҙең бер ысулы булараҡ ҡабул ителә. Яңыраҡ республика Президенты Бөрйән районында булды һәм төбәктәге иҡтисадты үҫтереү өсөн туризмға ла йөҙ бороу кәрәклеген билдәләне. Шулай уҡ Президент район хакимиәте башлығының туризм буйынса урынбаҫары штаты булдырыу зарурлығын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был осраҡта төбәктә туризмға иғтибар тағы ла артасаҡ һәм уны үҫтереү мөмкинлектәре лә киңәйәсәк.

Шулай уҡ районда туризм буйынса үҙәк тә уңышлы эшләп килә. Үҙәк тарафынан районның туристик каталогы булдырылды, ә оҙаҡламай эшләй башлаясаҡ сайттан теләләргә теләүсе туристарға ла уңайлы һәм файҙалы буласаҡ.

**▸ Ә туризмды үҫтереүҙә ниндәй ауырлыҡтар һәм ҡытыршылыҡтар бар, тип билдәләр инегеҙ?**



лау өсөн бер миҫал килтерәм. Яңыраҡ туризмға ҡағылышлы ҙур күргәҙмәлә булып, Рәсәйҙең төрлө төбәгендә туризмдың үҫешен баһалау һәм үҙебеҙҙеке менән сағыштырыу мөмкинлеге алдыҡ. Мәҫәлән, Алтай крайы экспозицияһы майҙаны күләме менән беҙҙекен сағыштырғанда ғына ла айырма иҫ китерлек. Беҙ өс йыл элек 50 квадрат метрҙан башлап быйыл 140 квадрат метрға барып етһәк, улар майҙанын 400 квадрат метрҙан 600 (!) квадрат метрға тиклем киңәйтте. Шулай уҡ күргәҙмәгә крайҙың губернаторы килеүе лә, экспозицияны күрһәтеү сағыу һәм бай тамаша менән бергә үрелеп барыуы ла Алтай стенды янына халыҡты күпләп йыйконды боҙоу була. Шулай уҡ эшҡыуар булдырған туристик базала ике төр хеҙмәтләндереү ҡаралған икән, мәҫәлән, туристарҙы йәшәтеү һәм ашатыу, закон буйынса ул туроператор лицензияһын алырға тейеш. Был процедура иһә күп ваҡытты ала, ҙур сығымдар талап итә, ә үҙ эшен яңы башлап тороусының күп осраҡта бындай мөмкинлеге булмай. Тимәк, уға йәки законды боҙорға, йәки эшен ябырға тура килә. Шулай уҡ агротуризмды үҫтереү хаҡында йөрөгән һүҙҙәр ҙә әлегә буш ҡыуыҡ ҡына, сөнки законда "агротуризм" төшөнсәһе бөтөнләй ҡаралмаған, тимәк, уны үҫте-

туризм түҙемлек, ныҡышмалыҡ талап итә. Шулай уҡ кеше менән аралаша белеү һәм үҙ эшенә яуаплы ҡарау ҙа мөһим факторҙар. Тағы ла махсус белемдең булыуы ла эште күпкә еңеләйтәсәк. Туризм индустрияһына килеүселәр ҡайһы саҡта барлыҡҡа киләсәк ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡты, битарафлыҡты, хәүефте лә яйлау мөмкинлеге таба белеү һәләтенә эйә булырға тейеш.

**Кинйә КУСКИЛДИН:** Уралдың фекеренә ҡушылам. Ысынлап та, туризм өлкәһендә баш баҫып, бар күңелде биреп эшләрҙәй урындар күп. Мәҫәлән, ошондай тармаҡтарҙың береһе - изге урындарға барыу, ғибәҙәт ҡылыу менән бәйле туризм. Беҙҙә ундай урындар бик күп һәм тиҫтәләрсә мең кеше ошо изге урындарға сәфәр ҡыла. Ләкин уларҙы ойоштороп алып йөрөүселәр араһында ерле халыҡ - башҡорттар юҡ. Ни өсөн үҙебеҙҙең милләт егеттәре һәм ҡыҙҙарына ошо тармаҡты үҙ ҡулына алмаҫҡа һәм үҫтермәҫкә, аҡса эшләмәҫкә? Шулай уҡ батырҙарыбыҙ менән бәйле урындар ҙа бихисап. Мәҫәлән, "Салауат Юлаев эҙҙәре буйлап" тип аталған туристик маршрут ойоштороу ҙа тос емеш бирәсәк. Шулай уҡ социаль туризмды ла тулыһынса үҙләштерелмәгән өлкәгә индереп була. Беҙҙең пенсионерҙар бик әүҙем, ҡыҙыҡһыныусан халыҡ, шуға күрә ҡыҙыҡлы маршруттар ойоштора һәм рекламалай белгәндә, күп кешене йәлеп итергә була. Тағы ла әлегә өйрәнелмәгән майҙан - ул балалар туризмы. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә баш ҡалала йәшәүсе балалар Өфөнө йүнләп белеп етмәй, ә тотош

*Тәү ҡарашҡа, беҙҙә туризмды үҫтереүгә бөтә мөмкинлектәр ҙә бар кеүек, ләкин ҡаршылыҡтар ҙа, ҡытыршылыҡтар ҙа юҡ түгел. Тәү сиратта ошо өлкәгә ҡағылған закондарҙың ныҡлап уйланылып, урын-еренә еткереп эшләнмәүе, ә ҡайһы берәүҙәренең хатта бер-береһенә ҡаршы килеүе ҙур проблемалар тыуҙыра. Мәҫәлән, ауылда йәшәүсе һәм ауыл хужалығында эшләүсе кешегә туризм менән шөғөлләнеү мөмкин түгел, сөнки был законды боҙоу була. Шулай уҡ эшҡыуар булдырған туристик базала ике төр хеҙмәтләндереү ҡаралған икән, мәҫәлән, туристарҙы йәшәтеү һәм ашатыу, закон буйынса ул туроператор лицензияһын алырға тейеш. Был процедура иһә күп ваҡытты ала, ҙур сығымдар талап итә, ә үҙ эшен яңы башлап тороусының күп осраҡта бындай мөмкинлеге булмай. Тимәк, уға йәки законды боҙорға, йәки эшен ябырға тура килә.*

**Кинйә КУСКИЛДИН:** Туризм дәүләт ярҙамына мохтаж өлкә. Ә беҙҙең республикала туризм эйәрсән ҡойроҡ ролендә, йәғни үгәй бала кеүек, гел генә ниндәйҙер дәүләт органына ҡушымта булараҡ ҡына көн күрә, ә нәҡ туризм менән генә айырым шөғөлләнгән дәүләт органы юҡ. Шуға күрә урындағы эшҡыуарҙар үҙ төбәгендә туризмды үҫтереүҙе. Бында бөтә мәсьәлә финанслауға һәм дәүләт кимәлендә күрһәтелгән ярҙамға ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, Алтай крайы экспозицияһының бюджеты беҙҙекенән 12 тапҡырға күберәк, тимәк, мөмкинлектәре лә юғарыраҡ. Шулай уҡ уларҙың федераль үҙәк менән тығыҙ бәйләнештә эшләүе лә тик файҙаға ғына. Шуның өсөн беҙгә уларҙан реү мөмкинлеге лә юҡ. Ғөмүмән, туризм өлкәһендә хәл итәһе мәсьәләләр һәм эшләнәһе эштәр бихисап әле. Тағы ла бер мөһим момент: беҙгә туризм өлкәһендә проблемалар күп, тип түгел, ә хәл итәһе мәсьәләләр бар, тип фекер йөрөткәндә һәм эш иткәндә, һөҙөмтәләр тиҙерәк һәм тосораҡ буласаҡ, сөнки "проблема" һүҙе кешелә психологик

***✓ Иҡтисад менән туризмды айырып ҡарарға ярамай, сөнки туризм шул иҡтисадтың эсендә һәм уның күтәрелеүе иҡтисад үсешенә лә бәйле, ғөмүмән, туризм иҡтисадты үҫтереүҙең бер юлы ул.***

# ТУРИЗМЫНДА... бихисап

республиканы алһаң, хәлдәр бөтөнләй хөрт. Шуға күрә балаларҙы йыйып, төркөм-төркөм итеп ойоштороп, уларға ҡыҙыҡлы маршруттар төҙөгәндә лә эштәр бик һәйбәт китәсәк. Тағы ла бар донъяға билдәле "Урал батыр" эпособыҙ нигеҙендә туристик маршрут ойоштороу ҙа файҙалы һәм килемле буласаҡ. Ғөмүмән, мөмкинлектәр бик күп, бары тик оҙаҡ уйлауҙан туҡтап, эшкә тотонорға ғына кәрәк.

Туризм тигәндә, беҙ ер алып, шунда нимәлер төҙөп эш башлауҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. Ләкин туризмға бәйле тармаҡтар бик күп. Мәҫәлән, йәйен Ағиҙел, Әй, Инйәр һәм башҡа йылғалар буйлап кәмәләрҙә ағып төшөүсе бихисап кешегә шул йылғалар буйындағы ауыл халҡы нимәлер бешереп һатып, өй аҙығы тәкдим итеп, йәки мунса яғып төшөрөп тә әллә күпме аҡса эшләй ала. Шуға күрә был өлкәлә "еләкле урындар" ҡалмаған, тигән фекер менән төптө килешмәйем. Йәшәгән ерендең уңайлығын дөрөҫ файҙаланғанда ла әллә күпме килем алырға мөмкин.

**Беҙ әлегә туристарға донъя стандарттарына тура килерлек сервис та, юғары кимәлдәге хеҙмәтләндереү ҙә тәкдим итә алмайбыҙ. Ваҡыты менән быларҙың барыһы ла, әлбиттә, булыр, ләкин бөгөнгө көндә республика туризмын нисек ҡыҙыҡлы итергә? Беҙҙәге туризм ниндәй булырға тейеш?**

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Бөгөнгө көндә Бөрйән район хакимиәте башлығы ҡарарына ярашлы, райондың туризм буйынса концепцияһы әҙерләнә һәм уны эшләү барышында беҙ Европа йәки бөтә донъя стандарттарына тиңләшергә, тигән маҡсат ҡуймайбыҙ. Ғөмүмән, беҙгә экологик туризмды үҫтереүгә нығыраҡ баҫым яһарға кәрәк. Әлбиттә, туристар өсөн һәйбәт һәм уңайлы шарттар тыуҙырырға бурыслыбыҙ, ләкин нәҡ 5 йондоҙло ҡунаҡхана төҙөү һәм башҡа шундай юғары стандарттарға етергә тырышыу кәрәкмәй, сөнки бындай шарттар талап иткән турист йылына берәү-икәү килергә мөмкин, тимәк, ул комплексты төҙөүгә, йыһазландырыуға, ҡарауға киткән сығымдар бөтөнләй ҡапланмаҫҡа ла мөмкин. Шуға күрә беҙгә урта хәлле турисҡа йүнәлеш тоторға кәрәк.

**Кинйә КУСКИЛДИН:** Ысынлап та, беҙҙәге туризмда экзотикаға, этнографик юҫыҡҡа баҫым яһау дөрөҫөрәктер, сөнки мәғрур Урал тауҙарына һыйынып йәшәгән халҡыбыҙ бай тарихлы булыуы менән бергә, үҙенсәлекле милли йырҙары, кейеме, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары менән дә ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, данлыҡлы башҡорт атында һыбай йөрөтөп, французларҙы аптырашта ҡалдырған уҡ-һаҙаҡтан атыуҙы ойоштороп, башҡорт яугирының хәрби походтарҙағы юлдашы - һөңгөнө ташлатып, башҡорт милли кейемен кейҙереп фотоға төшөрөп, шулай уҡ яңы бешелгән, күпереп торған ҡымыҙ тәкдим итеп, ҡырағай бал ҡортоноң балын ашатып һәм башҡа төрлө юлдар менән турист күңелен күрергә мөмкин.

**Республикаға килеүсе туристар һанын арттырырға кәрәк, тибеҙ. Ә урындағы халыҡ уларҙы ҡабул итергә әҙерме? Ғөмүмән, туризм башҡорт менталитетына тап киләме?**

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Башҡорттар элек-электән үҙенең ҡунаҡсыллығы, йомартлығы һәм ихлас күңеллелеге менән дан тотҡан. Аҙналар буйы ҡунаҡ һыйлап, уның күңелен күреүсе нәҡ башҡорт түгелме ни? Дуҫына, ҡунағына, юлаусыға беҙҙең халыҡ һәр саҡ үҙендә булған иң яҡшыһын, иң ҡәҙерлеһен тәкдим иткән, хәленән килгәнсә ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән. Ваҡыт үтеү менән был характер үҙенсәлеге замана талаптарына яраҡлашып, ниндәйҙер кимәлдә үҙгәрештәр кисергән, ләкин юғалмаған. Шуға күрә, урындағы халыҡтың туристарҙы ҡабул итеү-итмәү мәсьәләһе борсолоу тыуҙырмай.

Шулай уҡ, ни өсөндөр беҙ турист тигәндә, күберәген сит ил кешеһен күҙ алдына баҫтырабыҙ, ләкин урындағы халыҡ өсөн ауылға, районға килеүсе, өйө янындағы йылғанан ағып барыусы ят халыҡтың барыһы ла турист булараҡ ҡабул ителә. Һәм быға тиклем ниндәйҙер күңелһеҙлектәр булғанын ишеткәнем дә, күргәнем дә юҡ. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ толерантлы булыуы менән айырылып тора.

**Илдең иҡтисадын үҫтермәйенсә, сәнәғәт һәм башҡа мөһим тармаҡтар эшен алға ебәрмәйенсә тороп, туризм үҫеше хаҡында һүҙ йөрөтөү урынлымы?**

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Әлбиттә, бер факторҙы ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Ләкин иҡтисад үҫмәгән, эш юҡ, тигән һылтау менән туризмды үҫтереүҙән бөтөнләй баш тартыу дөрөҫ булмаҫ ине. Ғөмүмән, әлеге ваҡытта 90-сы йылдар башынан алып күҙәтелгән емерелеү процесы туҡтап, йәмғиәттең үҫеше башланды, халыҡтың йәшәйеше күпкә яҡшырҙы, тип әйтергә кәрәк. Шулай уҡ ял итергә теләгән кеше юлын да, уңайын да, аҡсаһын да таба. Миҫал өсөн Бөрйән районындағы туризмды ғына алып ҡарайыҡ. Рәсми һандар буйынса бер йәй эсендә генә Бөрйәнгә 40 мең тирәһе турист килә. Ләкин был һан күпкә артыҡ, сөнки ҡырағай туризмды үҙ итеүселәр бында индерелмәгән. Туристар ни тиклем күберәк булһа, район бюджетына, урындағы эшҡыуарҙарға, шәхси хужалығында етештергән үҙ тауарын һатыусы ауыл халҡына ла шул тиклем файҙалы. Әйткәндәй, халыҡта туризмға килем алыу мөмкинлеге биргән сығанаҡ итеп ҡараусылар йылдан-йыл арта. Мин эш башлаған йылдарҙа халыҡ үҙ тауарын тәкдим итергә, һатырға тартынһа, бөгөнгө көндә был эш күпкә алға китте. Шулай булғас, туризм иҡтисадты үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе тармаҡ, тип тулы ышаныс менән әйтергә була.

**Кинйә КУСКИЛДИН:** Әлегерәк туризм арҡаға аҫылған рюкзак, усаҡ, палатка булып ҡына күҙ алдына баҫып, уға ҡул һелтәп ҡаралды, иғтибар бөтөнләй булманы. Ә бөгөн уның мәғәнәһе күпкә киңәйҙе һәм туризм төбәкте үҫтереүҙең бер юлы булараҡ ҡабул ителә башланы. Тимәк, иҡтисад менән туризмды айырып ҡарарға ярамай, сөнки туризм шул иҡтисадтың эсендә һәм уның күтәрелеүе иҡтисад үҫешенә лә бәйле, ғөмүмән, туризм иҡтисадты үҫтереүҙең бер юлы ул.

**Туризмды үҫтереү ҙур инвестициялар талап итә һәм күп осраҡта инвестор ситтән килә. Ошо ерҙә тыуып үҫмәгән кешегә тыуған еребеҙ киләсәген ышанып тапшырып буламы? Инвестор үҙенә кәрәк тиклемен "һурғас", барыһына ла ҡул һелтәп, был эште ташлап китмәҫме? Туризмды үҫтереүҙе урындағы ерле халыҡҡа ышанып тапшырыу дөрөҫөрәк булмаҫмы?**

**Кинйә КУСКИЛДИН:** Бөгөнгө көндә төрлө туристик проекттар хаҡында һүҙҙәр күп йөрөй. Ләкин быларҙың барыһын да тормошҡа ашырыу өсөн финанс кәрәк. Туризм килем килтерә башлаһын өсөн кәмендә 10-15 йыл талап ителә, ә был ваҡыт эсендә тормош көтөү өсөн башҡа төрлө аҡса табыу юлы ла булырға тейеш. Шуға күрә туризмға килергә ҙур аҡсалы инвесторҙар ғына баҙнат итә. Әлбиттә, был проекттар өҫтөндә урындағы, ерле халыҡ эшләһә, бик һәйбәт булыр ине, ләкин кемдеңдер ошо өлкәгә килерҙәй мөмкинлеккә тиклем үҫеп етеүен көтөп булмай, ә проекттарҙы тормошҡа ашырырға, эшләргә, туризмды үҫтерергә кәрәк, сөнки был, үҙ сиратында, урындағы халыҡты эш менән тәьмин итәсәк.



Шул уҡ ваҡытта мәсьәләне икенсе яҡтан ҡарау ҙа мөһим. Ситтән килеүсе ҡайһы бер инвестор төбәктә туризмды үҫтереү өсөн ниндәйҙер туристик объект төҙөүгә ерҙе ҡуртымға түгел, ә шәхси милек итеп рәсмиләштереүҙе һорай. Был иһә ниндәй генә ваҡиғалар булып, хәлдәр нисек кенә үҙгәрмәһен, ер уныҡы булып ҡаласаҡ, тигәнде аңлата. Ләкин был юл беҙҙең өсөн түгел, сөнки ер алтынға бәрәбәр һәм уның ҡиммәте бер ниндәй туристик объект хаҡына ла тура килмәй. Шуға күрә бындай тәкдимдәрҙән ҡырҡа баш тартырға кәрәк.

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Бында тағы ла бер моментты билдәләп үтеү мөһим. Туризм алға китһен, үҫешһен өсөн, инвестицияларҙы дөрөҫ йәлеп итеү өсөн белгестәр булырға тейеш. Беҙгә нәҡ шундай белгестәр әҙерләүҙе әүҙемләштерергә кәрәк. Белемле, ошо өлкәне һәйбәт белгән кеше теге йәки был проектты тиҙ һәм файҙалы итеп тормошҡа ашырыу юлдарын яҡшы аңлаясаҡ, буласаҡ сығымдың ниндәй күләмдә буласағын белеп эш итәсәк, инвесторҙар менән дә аныҡ һәм рәсми һөйләшеүҙәр алып барасаҡ. Шулай уҡ бындай эштәрҙең юридик яҡтан етди өйрәнелеп, барлыҡ аспекттар ҙа тикшерелеп, законлы юл менән эш итеүҙе контролдә тотоу ҙа мөһим.

**Кинйә КУСКИЛДИН:** Ситтән килеүсе ниндәй генә яҡшы тормош вәғәҙә итһә лә, мөһабәт биналар төҙөп ултыртһа ла, беҙгә барыбер нимәлер оҡшап етмәйәсәк. Шуға күрә төбәктәге туризмды үҙ ҡулыбыҙҙан ысҡындырмаҫҡа һәм үҫтерергә тырышырға кәрәк. Туризмға бигерәк тә тыуған еренә, тарихына, киләсәгенә битараф булмаған йәштәрҙең килеүе мөһим, сөнки нәҡ улар ҡулында тыуған ерҙең киләсәге, именлеге, тыныслығы, муллығы. Шуға күрә бәләкәйҙән балаларҙа тыуған ергә, илгә, халҡына һөйөү һәм ихтирам тойғолары тәрбиәләргә кәрәк.

**Урал ХӘЛИУЛЛИН:** Беҙҙең халыҡ яйыраҡ һымаҡ күренһә лә, бер ҡыбырлап китһә, башлаған эшен аҙағына тиклем еткермәйенсә туҡтамай. Шуға күрә халыҡты битарафлыҡта ғәйепләргә ярамай, ваҡыты етмәгән, күрәһең, бер аҙ ғына көткәндә, халыҡ тағы ла әүҙемләшәсәк һәм республика туризмын тулыһынса үҙ ҡулына аласаҡ, тип ышанам.

***Ысынлап та, беҙҙәге туризмда экзотикаға, этнографик юҫыҡҡа баҫым яһау дөрөҫөрәктер, сөнки мәғрур Урал тауҙарына һыйынып йәшәгән халҡыбыҙ бай тарихлы булыуы менән бергә, үҙенсәлекле милли йырҙары, кейеме, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары менән дә ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, данлыҡлы башҡорт атында һыбай йөрөтөп, французларҙы аптырашта ҡалдырған уҡ-һаҙаҡтан атыуҙы ойоштороп, башҡорт яугирының хәрби походтарҙағы юлдашы - һөңгөнө ташлатып, башҡорт милли кейемен кейҙереп фотоға төшөрөп, шулай уҡ яңы бешелгән, күпереп торған ҡымыҙ тәкдим итеп, ҡырағай бал ҡортоноң балын ашатып һәм башҡа төрлө юлдар менән турист күңелен күрергә мөмкин.***

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөгөнгө көндә ҡыҙыу үҫеш кисергән туризм индустрияһында тәүге планға төбәктең тәбиғи ҡомарткыһын һәм мәҙәниәтен, милләттең рухи байлығын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм башҡа үҙенсәлектәрен күрһәтеүҙе, һаҡлауҙы алға ҡуйған проекттарға өҫтөнлөк бирелергә тейеш. Бары тик ошондай ихтирам һәм иғтибар булғанда ғына туризм йәмғиәттең социаль һәм иҡтисади тормошона ҙур йоғонто яһаусы өлкәгә әйләнеренә ышанырға була.**

**Әхмәр-ҒҮМӘР ҮТӘБАЙ**
**һәм Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Атай кеше малайҙы тыңламай. Бер көрәк тупраҡ ташлауы булған - унан ап-аҡ бер күгәрсен осоп сыҡҡан. Ул ҡарт инә булған. Ул ейәненә аҡ бәхеттәр теләп, улы менән килененә ҡарғыш әйтеп, осоп киткән.**




Көн менән төн алмашынған мәлдәй генә тойолдо Тәлғәткә йәйге ялы, ҡайтыр ваҡыты ла етте. Ғәлиәнең иһә уҡыу йылы башланғансы мәшәҡәтһеҙ, ығы-зығыһыҙ көндәре бар әле. Өфөгә юлға әҙерләнгәс, Сәғирә ҡарсыҡ ниндәйҙер әрнеү-рәнйеү, әллә һары һағыш менәнме әйтте:

- Һигеҙ бала үҫтереп, тома йәтим ҡалдыммы инде? Ниңә әжәлем килмәй икән?..

- Үҙең әйтмешләй, әжәл әйтеп килмәй шул, ҡәйнәм, - тине Тәлғәт. - Һаулығың һәйбәт, йөҙгә етербеҙ әле. Ҡан баҫымың минекенән дә яҡшы.

Күңеле тулышып, Ғәлиә илай, йәштәре субыр-субыр аға ла аға. Өҫтәүенә, йәнде әллә нишләтеп, Рәми һүҙҙәренә Тәлғәте йырлай:

*Мин тағы ла бер яҙҙы*
*күрһәм,*
*Тәгәрәһәм йәшел үләнгә.*
*Тын да алмай ятһам күккә*
*ҡарап,*
*Иҫәпләмә мине үлгәнгә.*
*Субыр-субыр күҙҙән йәшем*
*аҡһа,*
*Аҫылынып ҡалһа ҡыяҡҡа.*
*Уйлама һин, ҡайғы*
*күтәрмәй тип,*
*Күтәрәм мин, сабыр ул*
*яҡҡа.*

Ярай әле Тәлғәтем тормошҡа өмөт менән ҡараған, донъяны һөйөп туймаған, күңеле изгелек тойғоһонан һуғарылған, ҡыйын саҡтарҙа ла рухы һүрелмәгән кеше, тип уйланы Ғәлиә һәм иренә һис ҡасан һиҙҙермәгән йомшаҡ тауыш менән өндәште:

- Тәлғәт, инәйҙе Өфөгә алып ҡайтабыҙ инде, әлегә башҡа сара юҡ. Бәлки, өйрәнер. Сабырлыҡ, түҙемлек кенә кәрәк.

- Өйрәнһә, уңай булыр ине лә. Мин ни, ҡушҡуллап риза. Аллаға шөкөр, ҡәйнәм менән ҡайнымдан гелән яҡшы һүҙ генә ишеттем. Изгелеккә изгелек ҡылыу фарыз. Тик ҡәйнәм түҙә алмаҫ шул ҡалала.

Инәһенең ҡала тормошона күнегеренә үҙе лә икеләнә Ғәлиә. Йәшерәк саҡтан йәшәһә, ерегер ине лә бит. Ҡаны ла, йәне лә йәнтөйәгенә тарта ла тора шул. Туйға саҡырғастары былтыр ҡышын һеңлеһе Ғәбиҙә уны ике көнгә ҡалала Илбәктәрҙә ҡалдырған. Кисен ҡайтам, тип, әйбер-һәйберен төйнәгән, төндә тороп, тышҡа сыҡҡан. Ишек шаҡылдағанға ярай әле Илбәк уянып киткән. Мөлдөрәмә тулы хискә бирелеүҙәнме, инәһенең шундай хәлгә төшөүенә уның йөрәге әрней. Эйе, еңел түгел шул хәтер юғалтыу аҙаптарын кисереү. Фажиғәле күренештәр ҙә күҙәтелә.

Улы менән килене ауылдан алып килгән ауырыу әбейҙе фатирҙарына бикләп эшкә киткән. Ҡарсыҡ балконға сығып, ҡотҡарыуҙарын ялбарып ҡысҡырып тороп, эттән алып һүгеп, бишенсе ҡаттан ҡолап төшкән. Ни әйтәһең, бындайы күп беҙ фәҡирҙең. Һөнәрҙәше һөйләүенсә, хәтере бөткән инәһен көндөҙөн эшһеҙ ҡалған ире ҡарай. Ҡәйнәһе нимәгәлер ҡотороп китеп, яһиллап, кейәүенең бот араһына типкән. Көсөргәнешле хәлдән бер аҙ арынайыҡ, ял итәйек, тип, ҡарсыҡты һеңлеһенә алып барғандар. Бер көндө ул телефондан һөйләшеп торған арала инәһе фатирҙан юҡ булған. Ә урамда - сатлама һыуыҡ. Эҙләйҙәр, таба алмайҙар. Ихатала өшөп, ҡатып торған әбейҙе шәйләп, мәрхәмәтле бер апай фатирына индереп, сәй эсереп, йоҡларға һалған, шунан милицияға шылтыратҡан.

Нишләйһең, халыҡ әйтмешләй, ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел, бәғзеләргә - хәсрәт, михнәт, ғазап. Ярай әле Ғәлиәнең инәһе тыныс, баҫалҡы, эшсән, башҡалар менән сағыштырғанда - бер тигән.

Һағалап ҡына торҙо. Көн һайын туалеттан файҙаланырға өйрәтте. Әммә инәһе гелән тышҡа, коридорға ыңғайланы, күршеләренең ишеген шаҡыны. Төндә лоджияға сығып, ҡоттарын алып бөттө. Йоҡо аралаш осоп төшһә, ғүмер буйы битәр ишетерһең, үртәлерһең. Йоҡоға һаҡ Тәлғәт ҡатынын биш-алты тапҡыр уятты:

- Тор, тор, инәйең туалет эҙләй.

Ғәлиәнең йоҡоһо ҡасты, башы әйләнде, күҙ алды ҡараңғыланды. Әллә күпме өйрәтеп маташһа ла, инәһе ҡала көнитмешенә күнегерлек түгел ине. Тора-бара быға үҙе лә шау-шыуынан башым былай ҙа ҡатып бөткән.

Бына һиңә, мә... Бына һиңә Сәғирә ҡарсыҡ улына тиң үә хуш күргән нәфис, нәзәкәтле килен. Ҡатын ир тупрағынан яратылған, тиҙәр. Әммә ул, киреһенсә, сибәркәйенең һүҙенән сыға алмай, уның фарманы буйынса йәшәй.

Тәлғәт йәне көйөп торҙо-торҙо ла, аптырағандың көнөнән Ғәбиткә өндәшеп ҡарарға булды. Уның ҡатыны ла кире. Баштан уҡ теҙгенен ҡулға көрмәкләмәгәс, яһалдырыҡ һалмағас ни... Бәлки, имән тамырындай ирен бөтөнләй бойҙай ҡамыры итә алмағандыр... Ни тиер, һынап ҡарайыҡ.

Ҡалала Сәғирә ҡарсыҡ икеөс көндән үк бойоҡто, күҙҙәре моңһоуланып, йөҙөнә һары һағыш яғылды. Ғәлиә уны һүҙ, хәбәр менән албырғатып, фотолар, юбилейҙарҙа, осрашыуҙарҙа төшөрөлгән видеофильмдар күрһәтеп әүрәтергә тырыша. Лоджияға сығып, урамды ҡарап, береһенән-береһе бейек йорттарға бағып һөйләшеп торалар.

- Был Мәскәүме әллә? - тип һорай ҡарсыҡ.

- Юҡ, - ти Ғәлиә. - Беҙ Өфөлә йәшәйбеҙ.

- Ҡайһылай машина күп, кеше күп, ҡырмыҫҡа иләүе кеүек. Бынан сығыр юл, ҡотолор әмәл юҡтыр инде ул. Ҡарурманда аҙашҡандай аҙашырһың. Эҙләп тә тапмаҫтар.

Ҡала геүләй, ҡала ҡайнай. Бында шау-шыу, ығы-зығы, буталыш. Бында кеше мәхшәр эсендә йәшәгәндәй тойола Сәғирә ҡарсыҡҡа. Урамда, йәнәһе, саф һауала йөрөгәндә, еҫ-ҡоҫо танауына бәрелә, күңелен болғата. Үткән-һүткәндәргә текәлеп ҡарай ҙа, эс бушатырлыҡ таныш-белештәр юҡлығына бошона. Тәлғәткә иһә күрше фатирҙа йәшәгән табип асыулана:

- Ни уйлап ғүмере ауылда үткән әбейҙе бында алып килдең? Ҡала фатиры уға - таш диуар, төрмә! Бөтөнләй диуанаға әйләндерәһең бит.

Ғәлиә инәһе эргәһенән бернисә минутҡа ла ситкә китә алманы. Ҡарсыҡ үҙе лә уны инанды. Ауылдағы йортонда инәһе ҡанына, зиһененә һеңгән һиҙем менән дөм ҡараңғыла ла үҙаллы йөрөй, бында ул - тере үлек.

- Бәлки, уҡытыуҙан китерһең, өйҙә инәйеңде генә ҡарап ултырырһың. Һинең эш хаҡың да, инәйеңдең пенсияһы ла берүк, - тип ҡатынына кәңәш, өгөт биреп ҡараны Тәлғәт.

- Эш аҡсала ғынамы ни?.. Мин әле тормошомдо мәктәптән, коллегаларымдан башҡа күҙ алдымда ла килтермәйем. Өйҙән сыға алмай егерме көн эсендә үҙем ауырыуға һабыша яҙҙым.

- Улайһа, Нәрәлегә алып ҡайтырға, ҡарарға, күҙ-ҡолаҡ булырға кеше табырға тура килә инде.

* * *

Бер туған апаһы энеһе менән киленен етмеш йәшен билдәләргә тыуған еренә ҡунаҡҡа саҡырҙы шәмбе-йәкшәмбегә ҡарай. Бармайынса булмай инәһеләй үҙен ҡарап үҫтергән туғанына. Нык үпкәләр. Йома көн кис Тәлғәт ҡәйнәһенең вазифалы урын биләгән улына шылтыратты. Трубканы уның ҡатыны алды.

- Хәйерле кис. Бер үтенес бар ине. Ҡәйнәмде ике көнгә генә һеҙҙә ҡалдырып торайыҡсы? Апайым юбилейына саҡырғайны.

- Юҡ, юҡ, алып ҡала алмайбыҙ. Мин үҙем ауырыйым, тигән ҡоро тауыш ишетелде. - Ҡыҙымдың бала-сағаһының - Һин минең "татлы сир"ҙең холҡон беләһең бит инде... Хатта үҙ туғандарын да һыйҙырмай, - тип әсенеүле тауыш менән хәбәрен теҙҙе Ғәбит.

- Беләм, беләм. Ләкин фатирында инәйеңә ике көнгә лә урын тапмағас, һин ниндәй ир?

- Ирлектәме ни эш! Ниңә мыҫҡыллайһың? Оят та, ҡыйын да. Тешемде ҡыҫып йәшәйем.

- Диңгеҙҙең дә төбө бар, сабырҙың да сиге бар. Алама ҡатындан дейеү пәрейе лә ҡасҡан.

- Мин дейеү пәрейе түгел шул...

Ниһайәт, Тәлғәт Сәғирә ҡарсыҡтың дөйөм ятаҡта йәшәгән ейәнен саҡырҙы. Ул шунда уҡ риза булып, ҡатыны менән Тәлғәттәргә килеп, өләсәй янында ҡалды.

Был хәл тәрән уйҙарға һалды Тәлғәтте. Әүәл килен кеше - кәм кеше, көнләксөгә тиң кеше, тиһәләр, хәҙер бөтөнләй башҡаса. Әлбиттә, элек тә ундай күренештәр булғылаған. Юҡҡа ғына килен яһиллығына бәйле риүәйәт тыумаған.

* * *

Борон-борон заманда үҙенең яңғыҙ ғына улы менән бер ҡатын йәшәгән. Ул үҙенең һаулығын да, көсөн дә йәлләмәгән, улын әҙәм итергә, уға етемлек күрһәтмәҫкә тырышҡан. Малай бер ауырлыҡ та күрмәй үҫеп еткән. Йәше еткәс, күрше ауылдан кәләш алған.

Килен килгәс, ҡарсыҡҡа көн бөткән. Ҡартайып, тик аяҡ юлын ғына күргән ҡәйнәһен килене һыйҙырмай башлаған. Ҡарт ҡәйнә көнөтөнө эшләгән: абына-һөрөнә иҙәнен дә йыуған, һөйәлле, тарамыш ҡулдарын талдырып, көндәр буйы йылғала кер сайҡаған, төнөн ейәнен ҡараған. Ейәне уны бик яратҡан. Бер аҙым да өләсәһенән ҡалмай, әкиәттәр, йырҙар тыңлаған. Әбей ҙә ейәнен яҡын күргән, күкрәгенә ҡыҫып, күҙ йәштәрен күрһәтмәй генә илаған. Килене ажғырынып, яҡты йөҙөн дә күрһәтмәгән. Үҙ улы ла хәҙер уға ят булып күренгән. Бер саҡ әбей бөтөнләй күҙҙән яҙған. Әбейҙе алты йәшлек ейәне генә тәрбиәләгән: бит-ҡулдарына һыу һалған, тышҡа алып сыҡҡан, йәшереп кенә ашарға биргән. Ҡәйнәһенең эштән сыҡҡанын күреп, йәш ҡатын бер көн иренә:

- Әбейҙе урманға алып барып ташла, - тип бойорған.

Ире риза булмаһа ла, өгөтләй торғас, бисәһе күндергән. Шунан һуң ир урманға барып, яңғыҙ ҡайын төбөнә соҡор ҡаҙыған. Соҡорҙоң өҫтөн сыбыҡ-сабыҡ менән ҡаплай ҙа ҡайтып, инәһенә:

- Инәй, мин һине ҡоҙағыйҙарыңа ҡунаҡҡа алып барам, - ти.

Ҡунаҡҡа тигән һүҙҙе ишеткәс, малайы:

- Өләсәйем менән мин дә барам, - тип даулаша башлай. Атаһы бер ҙә риза булмай. Улы күҙ йәшен түгеп илағас, уны ла ултыртып ала. Улар урманға юл ала, килен шатланып, ҡәйнәһенең артынан көл һибеп ҡала. Теге ҡайын төбөнә килеп еткәс, егет:

- Инәй, килеп еттек, төш, - тигән.

Әбейҙең бер-ике атлауы була - соҡор эсенә төшөп тә китә. Быны күреп торған малай атаһына:

- Атай, өләсәйем соҡорға төштө бит, тиҙерәк сығар! - тип ҡысҡырып ебәрә.

Тик атаһы ашыҡмай. Көрәк ала ла инәһенә:

- Инәй, мин һине шунда күмеп китәм, - тигән.

Шул саҡ малай атаһының көрәгенә йәбешеп, йән өҙгөс тауыш менән:

- Күммә өләсәйемде! Теймә уға! Әгәр күмер булһаң, үҫкәс, үҙеңде лә ошонда күмәсәкмен! - тип ҡысҡырып иларға тотона.

Атай кеше малайҙы тыңламай, уны ситкә этеп ебәрә. Бер көрәк тупраҡ ташлауы булған - унан ап-аҡ бер күгәрсен осоп сыҡҡан. Ул ҡарт инә булған. Ул ейәненә аҡ бәхеттәр теләп, улы менән килененә ҡарғыш әйтеп, осоп киткән. Шуға ла малай бөтә ғүмере буйы бәхетле булған, мәрхәмәт белмәгән инәһе менән атаһы, ҡарт инә ҡарғышынан донъялыҡта бәхет күрмәйенсә, үлеп киткән. Инәһен рәнйетеп, ҡарғыш алған кеше йәлсемәй шул.

**(Дауамы бар).**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Мәҙәниәт сығанағы, халыҡ тотҡаһы - фольклор, халыҡ ижады. Заман заңы көсәйгән һайын, уны һаҡлап ҡалыуы ҡыйыныраҡ була бара. Фольклорҙы һаҡлау ғына түгел, уны үҫтереү бурысын үҙ өҫтөнә алған ойошмаларҙың береһе - ул тиҫтәләр йыл эшләп килгән Республика халыҡ ижады үҙәге. Бөгөн үҙәктең эше нимәнән ғибәрәт, уның алдында ниндәй проблемалар тора? Ошо хаҡта үҙәк директоры Байрас ИШБИРҘИН менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



# ЗАМАН ЗАҢЫ - БЕР КӨНЛӨК,

## халыҡ ижады - ғүмерлек

- Быйыл Республика халыҡ ижады үҙәге 75 йыллыҡ юбилейын билдәләй, - тип башлап китте һүҙен Байрас Вәли улы. - Әлбиттә, оҙаҡ йылдар эшмәкәрлек дауамында үҙәктең яуланған ҡаҙаныштары байтаҡ. Төп бурысыбыҙ - халыҡ ижадын һаҡлау. Ә бының өсөн фольклор коллективтарын үҫтерергә, уларҙың ижадын халыҡҡа күрһәтергә кәрәк. Хәҙер мәҙәни тормошобоҙҙо билдәле фольклор байрамдарһыҙ күҙ алдына килтереү мөмкин дә түгел. Тәү сиратта - ул ике йылға бер үткәрелеп торған "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале. Был фестиваль сит ил коллективтары менән аралашыу мөмкинлеге биреүе йәһәтенән үҙенсәлекле. Шулай уҡ "Урал моңо" халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль фестиваль-конкурсы бик мәртәбәле һанала. Өс йылға бер халыҡ театрҙарының "Алтын тирмә" фестивале үтеп тора. Вокаль буйынса Сибайҙа - "Ирәндек моңдары", Нефтекамала - "Дуҫлыҡ моңо", Туймазыла "Оҙон көй" конкурстары, ҡурайсыларҙың Йомабай Иҫәнбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге конкурстары үҙа. Әбйәлилдә кейеҙ баҫыу, Ейәнсурала шәл бәйләү конкурс-байрамдары йылдан-йыл танылыу яулай бара.

➔ **Халыҡ ижады үҙәгенең эшмәкәрлеге фестивалдәр ойоштороу менән генә сикләнмәйҙер? Һеҙҙең ойошманы фольклорҙы һаҡлау һәм үҫтереү буйынса идеологик үҙәк тип ҡабул итергә була. Был йәһәттән ниндәй эш алып барыла?**

- Үҙәктә ике ҙур бүлек - халыҡ ижады һәм мәғлүмәт-аналитик, методик эшмәкәрлек бүлектәре эшләй. Тәүгеһе үҙешмәкәр коллективтар менән эшләй, уларға ижадтарында бәйле кәңәш-тәҡдимдәрен әйтеп, йүнәлеш биреп тора. Һәүәҫкәрҙәргә халыҡ коллективы һәм "өлгөлө" исемдәрен биреү ошо бүлек ҡарамағында. Республикала хәҙер 800-ҙән ашыу фольклор коллективы ошо дәрәжәле исемдәргә лайыҡ. Белгестәребеҙ араһында халыҡ артистары, атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәрҙәре бар. Ғәҙәттә, улар конкурс-фестивалдәрҙән һуң сығыш яһаусылар менән әңгәмә ҡороп, ҡуйылған номерҙарҙың, башҡарылған ижади эштәрҙең ыңғай һәм кире яҡтарын билдәләй, артабан ниндәй юҫыҡта эшләргә кәрәклеген әйтә. Бындай осрашыуҙар үҙешмәкәр артистар өсөн ҙур ярҙам булып тора. Бынан тыш, халыҡ ижады бүлеге белгестәре районҙарға, сит төбәктәргә сығып, семинарҙар ойоштора. Бындай семинарҙар халыҡ ижадының төрлө жанрҙары буйынса уҙғарылып тора. Әйтәйек, быйыл ҡумыҙҙа уйнау һәм өҙләү буйынса мастер-кластар күрһәтелде. Гармунсылар ансамблдәре етәкселәре өсөн семинар, халыҡ бейеү, кейеҙ баҫыу буйынса конференциялар, мастер-кластар булып үтте.

Республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙгә айырым иғтибар бүлергә тырышабыҙ. Был йәһәттән беҙҙең үҙәк "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары" дәүләт программаһын ғәмәлгә ашырыуға үҙ өлөшөн индерә. Силәбе, Ырымбур, Һамар, Һарытау, Ҡурған өлкәләрендә йәшәгән башҡорттар менән һәр ваҡыт бәйләнеш тотабыҙ. Уларға методик ярҙам күрһәтеп, режиссерҙар, бейеүселәр, ҡурайсы-ҡумыҙсылар ебәреп торабыҙ. Мәҫәлән, бейеү коллективтары бар икән, уға бер нисә бейеү һалып китәбеҙ. Шулай уҡ матди яҡтан булышлыҡ итәбеҙ - костюмдар тегәбеҙ, музыка ҡоралдары менән тәьмин итәбеҙ. Бындай бәйләнештең һөҙөмтәләре ҡыуандырылыҡ. Силәбе, Ҡурған, Татарстандың Яр Саллы ҡалаһындағы коллективтар Стәрлетамаҡта үткән "Ашҡаҙар тандары" башҡорт фольклоры байрамында ҡатнашып, призлы урындар алып ҡайтты. Яңыраҡ ҡына Силәбеләге "Айгөл" халыҡ ансамбле Баймаҡ районында гастролдә булды. Күбеһе Арғаяштағы башҡорт халыҡ театрын белә. Быйыл улар "Алтын тирмә" фестивалендә беренсе урын алыуға өлгәште. Сит төбәктәрҙәге коллективтар күп түгел, әммә һуңғы йылдарҙа уларҙың кимәле үҫә. Ошо коллективтарҙы һаҡлап ҡалыу - төп бурысыбыҙ булып тора.

Мәғлүмәт-аналитик бүлегебеҙ районданғы методистар, клуб мөдирҙәре менән эшләй. Мәҙәни саралар ойоштороу менән шөғөлләнгән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эше күҙгә күренеп бармай. Әммә үҙешмәкәр коллективтарының уңышлы сығыштары тап уларға бәйле. Шуға күрә урындағы методистарҙың эшен дөрөҫ ойоштороу - ул бик сетерекле мәсьәлә.

Редакция-нәшер итеү бүлегебеҙ бар. Даими рәүештә календарҙар, буклеттар сығарып торабыҙ. Ғалимдар, фольклор, сәнғәт белгестәре менән бәйләнешкә инеп, уларҙың дәреслектәрен, китаптарын нәшер итеүҙә ҡатнашабыҙ. Былтыр ҡурай буйынса методик дәреслек, балалар баҡсалары өсөн байрам сценарийҙары, Әхмәт Сөләймәновтың башҡорт фольклоры буйынса йыйынтығы әҙерләнеп, нәшриәткә тапшырылды. Быйыл башҡорт халыҡ ижады буйынса сценарийҙар йыйынтығы әҙерләйбеҙ. Йылына бер нисә һаны донъя күреп торған "Байрам" тигән үҙ журналыбыҙ бар. Уны төрлө юл менән таратабыҙ - һатыуға ла сығарабыҙ, мәҙәни саралар үткән ваҡытта дуҫтарыбыҙға ла тапшырабыҙ. Журналда башлыса үҙешмәкәр коллективтар эшмәкәрлеген күрһәтергә тырышабыҙ.

➔ **Ысын фольклор нимә ул? Уның үҙ йөҙө, төп йөкмәткеһе ниндәй кимәлдә һаҡлана килә, тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Сәнғәт өлкәһендә лә хәҙер халыҡты хайран ҡалдырыуы ҡыйын. Профессиональ артистарыбыҙ үҙ тамашаһын табыр өсөн барыһын да эшләй: сағыу костюмдар тегә, клиптар төшөрә. Әммә тамашасы халыҡсанлыҡ тигән күренештән генә бер ваҡытта ла ялҡмай. Шуға күрә һуңғы ваҡытта "этно" тигән стилдең киң танылыуы ала барыуы юҡтан ғына түгелдер. Был ыңғай күренеш, әлбиттә. Тик ул үҙешмәкәр коллективтарҙы ҡыҫырыҡлап сығарырға тейеш түгел. Беҙ саф, таҙа халыҡ ижады хаҡында һүҙ йөрөткәндә, үҙешмәкәр артистарҙы, коллективтарҙы күҙ уңында тотабыҙ. Әлбиттә, улар ниндәйҙер ҡалыптарҙан азат, ҡабатланмаҫ булырға тейеш. Профессиональ сәнғәт эшмәкәрҙәре фольклор башҡармай, улар уны үҙ ижадында ниндәйҙер элементтарын ғына алып, стилләштереп кенә ҡуллана.

➔ **Быйыл тамашасыларға ниндәй фольклор байрамдары көтөргә?**

- Май урталарында Стәрлебаш районында "Алтын тирмә" фестивале үтәсәк. Быйыл ул 1812 йылдағы Ватан һуғышында еңеүҙең 200 йыллығына арнала. Шулай уҡ ошо ҙур юбилейға арналған тағы бер сара - 19 октябрҙә Салауат ҡалаһында үтәсәк ауыҙ-тел ижады жанрына ҡараған "Һүҙ ҡәҙере" республика фестивале ойошторола. Бынан тыш, Ҡырмыҫҡалы районында "Любезники любизар" тигән ҙур сара, Стәрлетамаҡта "төньяҡ амурҙары" варыҫтарының шәжәрә байрамы үтәсәк. Ғата Сөләймәновтың, Фәйзи Ғәскәровтың 100 йыллыҡтарына арналған ҡурай һәм бейеү фестивалдәре уҙасаҡ.

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Нәфисә ТУЛЫБАЕВА, Республика халыҡ ижады үҙәге етәксеһе урынбаҫары:** Шундай бер проблема бар: бөгөн ҡайны бер белгестәр үҙешмәкәр коллективтар алдына профессиональ сәнғәт талаптары ҡуйырға ярата. Был нимә менән янай һуң? Үҙешмәкәр артист сәхнәгә сығыуҙан бөтөнләй баш тартыуы, фольклор менән шөғөлләнеүҙән туктауы ихтимал. Был йырсыларыбыҙға ла, ҡурайсыларыбыҙға, бейеүселәребеҙгә лә ҡағыла. Халыҡ ижады ниндәйҙер кәртәләргә индерелеп, йәшәүҙән туктауы бар. Профессиональ сәнғәт талаптары ҡуйыу - фольклорға ҡаршы эшләнгән эш ул. Хәҙер ҡурайсылар конкурстары бик күп үткәрелә. Әммә ҡатнашыусылар араһында элекке ҡурайсыларҙың мәктәбен дауам итеүселәр юҡ кимәлендә. Ул конкурстарҙа күбеһенсә профессиональ, махсус белеме булған ҡурайсылар ҡатнаша. Һөҙөмтәлә еңеүсе исемен дә улар ала. Шуға күрә лә үҙешмәкәр ҡурайсылар бөгөн бик һирәк.Булғандары иһә ҡулдарына ҡурай алып, сәхнәлә сығыш яһарға базнат итмәй. Йырсылар менән дә шул уҡ хәл. Әйтәйек, Марсель Ҡотоев эргәһенә сығып, ниндәй үҙешмәкәр йырсы уның менән оҫталыҡта ярышырға йөрьәт итһен! Яғымлы тауышлы булғандары, беҙ ундай йырсылар менән көс һынаша алмайбыҙ инде, тип әйтә лә ҡуя. Конкурсҭарҙа жюри составында профессиональ белгестәр эшләй. Тик улар ҙа ҡатнашыусыларҙы һаҡсыл ҡараш менән баһаларға тейеш. Профессиональ сәнғәт әһелдәре менән тиңләшә алырлыҡ талантлы артистарыбыҙ бар ул барлыҡҡа. Абдулла Солтанов үҙе генә ни тора! Коллективтар араһында Хәйбулла районынан "Кош юлы" фольклор ансамбле айырылып тора. Белеме булған сәнғәт эшмәкәрҙәре үҙҙәре уларҙан өйрәнергә тейеш. Элек йәш йырсылар ауылдан-ауылға йөрөп, ололарҙың башҡарыуын тыңлап, өйрәнеп ҡайта торғайны. Был йола хәҙер юғалды. Ә бит был профессиональ сәнғәтте үҫтереүҙән дә, халыҡ ижадын һаҡлап ҡалыуҙың да бер юлы булып торор ине...

**Әйткәндәй, 14 апрелдә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында юбилейға арналған төбәк-ара ижади конференция буласаҡ. Унда халыҡ ижады үҫешенә ҡағылышлы мәсьәләләр, проблемалар күтәреләсәк, мөһим ҡарарҙар ҡабул ителәсәк. Кисен һуңғы биш йылда республика конкурс-фестивалдәрендә гран-при, башҡа лайыҡлы урындар яулаған коллективтар концерт менән сығыш яһаясаҡ.**

**Мөнир ИҠСАНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

КӘКРЕ МӘҠӘЛДӘР

# ҺУҒЫШ БӨТКӘС...

## йоҙроҡ төймә

- Беткә үс итеп тунды күршегә һаттым.
- Бер арҡыры ағас бөтә ылауҙы туктата ала.
- Бер кеше тәхеткә менһә, ҡырҡ кеше ләхеткә керә.
- Бер ҡалаҡтай боҙолғанды ашаһаң, биш тәгәстәй кире сығыр.
- Бер өңгә ике ата айыу һыймаҫ.
- Бер "эт" арҡаһында мең ат ит комбинатына киткән.
- Бесәй бойҙай ашамай, уны бойҙай һаҡларға ҡалдырырға мөмкин.
- Бүре көсө - тешендә, кеше көсө - кеҫәһендә.
- Егет кешегә ете кило ит тә аҙ.
- Егет кешегә етмеш төрлө ҡыҙ ҙа аҙ.
- Eлəк берәмләп йыйыла, күмәкләп һатыла.
- Иламаған балаға матай алып бирмәйҙәр.
- Иле бай ерҙә хәйерсегә хәйергә алтын аҡса бирерҙәр, иле бөлгән ерҙә хәйерсене талап китерҙәр.
- Иләктә һыу тормаҫ, ҡатын- ҡыҙ кеҫәһендә аҡса тормаҫ.
- Инәле бала иркәле, аталы бала аҡсалы.
- Ир иркә булһа, ҡатыны ҡаты була.
- Ир - ат, ҡатын - арба, бала - йөк.
- Иренгән ике эшләр, артынан эте тешләр.
- Иртә барһаң ит бешә, һуңлап барһаң һөйәк ҡала.
- Кем эшләмәй- шул түрә!
- Кемдең ҡулында - шуның кеҫәһенә.
- Кеше балаһын тышаһаң да тормаҫ, үҙ балаң типһәң дә китмәҫ.
- Күҙ ҡурҡа, ҡул урлай.
- Күпте белгән - тиҙ ҡартайған, күпте һөйләгән- ҡартаймай үлгән.
- Ҡарт кеше өсөн таяҡта биш ат көсө бар.
- Ҡоҙғон менән ҡоҙалашһаң, ашағаның емтек булыр.
- Ҡунаҡҡа ваҡытында барыуҙан да бигерәк, ваҡытында ҡайта белергә кәрәк.
- Ҡупшы ҡыҙҙар йәйге сезонды февралдә асыр...
- Ҡуян бала тапҡан, валютаға сит илгә һатҡан.
- Ҡырынған терпенән йөнтәҫ балыҡ бер ҙә артыҡ түгел.
- Оҙон тырнаҡ үҫтергән ҡатындың эш көнө ҡыҫҡа була.
- Оҙон ҡуллы балыҡсы һәр саҡ була алдаҡсы.
- Туй, туйҙан һуң туғыҙ ай ҙа туғыҙ уй.
- Урманға утын ташып байыған.
- Һуғышҡанда йоҙроғо кеҫәһендә булды, һуғыш бөткәс, йоҙроҡ төйә.
- Эт өйөрөн артынан эйәртер өсөн ҙур этлек эшләргә кәрәк.

**Фәнүр ШАҺИЕВ.**
**Учалы районы Әүешкүл ауылы.**

✓ Асыҡ һәм ябыҡ баҙыян, бөтөй, айсыҡ, батмус аҫа, сулпы аҫа, әҙрәс, ҡаҙ тешләтеү, тәкә мөгөҙө - иң боронғо аҫалар иҫәпләнә. Балаҫтың "заманса" варианты - шау сәскәләрҙән генә торғаны күлбарсаһы тип атала икән.



ИНТЕРНЕТТАН



# ЗАРЛАНМАҺАҢ... ауырымаҫһың

■ Кальций организм өсөн бик файҙалы, әммә был микроэлементҡа бай булған һөт аҙыҡтарын яратмайһығыҙ икән, уның урынына башҡа аҙыҡтар ҡулланырға тәҡдим итәләр. Мәҫәлән, борсаҡ йәки чечевица ашы, балыҡ консервалары, һөйәкле иттән бешерелгән аш кальцийға бай. Кальций шулай уҡ аҡ фасолдә, сельдерейҙа күп. Хатта ҡайһы бер тәм-томда ла кальций булыуын иҫәпкә алығыҙ. Тундырмаға миндаль сәтләүеге йәки инжир һалып тәҡдим итһәгеҙ, был аҙыҡтан балалар ҙа баш тартмаясаҡ.

■ Швецияның Лунда университеты ғалимдары йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмаҫҡа һәм дауаларға ярҙам итеүсе вакцина уйлап тапҡан. CVX-210 вакцинаһы иммун системаһы эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, артерияларҙа холестерин төйөрсәләре йыйылыуына юл ҡуймай, һөҙөмтәлә, артериялар ҡыҫылыуы (инфаркт сәбәбе) барлыҡҡа килмәй. Швеция тикшеренеүселәре билдәләүенсә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә физик күнекмәләр етешмәүе, насар туҡланыу, тәмәке тартыу һәм күп күләмдә алкоголь ҡулланыу сәбәпсе булып тора, шулай уҡ нәҫелдән килгән факторҙарҙы ла оноторға ярамай. Тикшеренеү авторы профессор Дэн Нильсон әйтеүенсә, был вакцина әле ҡулланылған башҡа дауалау сараларына өҫтәмә рәүештә ҡулланыласаҡ.

■ Сәләмәт булғығыҙ килһә, үҙегеҙҙе башҡалар менән сағыштырмағыҙ һәм көнләшмәгеҙ, тип белдерә Канаданың Конкордия университеты ғалимдары. Улар кешенең иммунитеты һәм гормональ фоны уның социаль торошо менән бәйле булыуын асыҡлаған. Эксперимент күрһәтеүенсә, үҙен уңышлы кешеләр менән сағыштырып, файҙаның үҙ иҫәбенә булмауына зарланырға яратыусыларҙың иммунитеты ла түбән булған, гормондар дисбалансы ла күҙәтелгән. Дуҫтары һәм хеҙмәттәштәре араһында үҙен кәрәкле кеше тип тойоусыларҙың кәйефе лә яҡшы була, улар төрлө вирустарға ла бирешеп бармай, имеш.

■ Күптән түгел генә Америка ғалимдары шәкәрҙең зыяны тураһында йөмәгәтселеккә еткереп, уны хатта алкоголь һәм тәмәкегә тиңләп ҡуйғайны. Бәлки, ошо мөрәжәғәт һөҙөмтәһелер - шәкәр ҡулланыусылар кәмей бара, ти табиптар. Мәҫәлән, һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡан рәсәйлеләрҙең 27 проценты "аҡ үлем"де үҙенең рационынан алып ташлаған. "Шәкәр ҡулланыуҙы кәметеү өсөн һеҙ нимә эшләйһегеҙ?" тигән һорауға күптәр: "Татлы һәм составында шәкәр күп булған аҙыҡтарҙы ашауҙы кәметтем", - тип яуап бирһә, рәсәйлеләрҙең 27 проценты шәкәр-рафинад, татлы газлы эсемлектәр һәм кәнфитте ҡулланмай. Уларҙың 13 проценты татлы ризыҡты яратмай, шуға ла улар өсөн бындай проблема бөтөнләй юҡ. Ә 29,2 процент яуап биреүсе шәкәр ашауҙы кәметеү өсөн бер нәмә лә эшләмәй, сөнки "бының бер ниндәй мәғәнәһен дә күрмәй". Ғалимдар бигерәк тә иртәнге сәйгә шәкәр һалмаҫҡа кәңәш итә. Татлы эсемлек ҡандағы шәкәрҙең күләмен күтәреп кенә ҡалмай. Уянғас та тәмтом менән "һыйланған" организмға гәҙәттәгенән артығыраҡ калория кәрәк буласаҡ.

■ Йөрәк ауырыуҙарынан, шул иҫәптән, инсульттан һаҡланам тиһәгеҙ, өйҙә ултырмағыҙ, ә күберәк сәйәхәт итегеҙ. Канаданың Торонто университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, ғүмере буйы бер ҡалала ғына йәшәүселәргә ҡарағанда, йәшәү урынын алыштырырға яратыусылар араһында инсульт кисереүселәр 30 процентҡа һирәгерәк осрай. Сәйәхәт яратыусылар ҙа йөрәк сирҙәренә бирешеп бармай икән.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

**Борон-борондан Дим-Өршәк буйы башҡорттарының төп кәсептәренең береһе иҫәпләнгән балаҫ һуғыу бөгөн яңырыу кисерә. Республика халыҡ ижады үҙәгенең Әлшәй районында икенсе тапҡыр уҙғарылған "Быуаттарҙы быуаттарға бәйләп..." тип исемләнгән Республика башҡорт балаҫы фестивале лә раҫлай быны. Сарала Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә, Ғафури, Бишбүләк, Ҡырмыҫҡалы, Архангел райондарынан балаҫ һуғыусы апайҙар ҡатнашты, күргәҙмәлә 100-гә яҡын аҫалы балаҫ күрһәтелде.**

# АҪАЛЫ БАЛАҪТЫҢ...

## яңыса балҡышы



### Йола - ил күрке...

Балаҫ һуғыу - боронғо сәнғәт төрҙәренең береһе һанала. Элегерәк һәр йортта балаҫ, таҫтамал һуғылған, кейеҙ баҫылған. Был әйберҙәр торлаҡты биҙәү өсөн генә түгел, йолалар башҡарыу өсөн дә ҡулланылған. Кешенең был донъялағы төп бурысы - нәҫелен һәм, ғөмүмән, ерҙәге тормошто дауам итеү, шуға ла аҫалы балаҫ туйҙарҙың да төп элементы һаналған. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, баһалама ағзаһы Зилә Дәүләтшина билдәләүенсә, башҡорт балаҫтарының һәм боронғо биҙәктәрҙең беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалыуы өсөн тап йолаларыбыҙға бурыслыбыҙ. Үҙенең гөрөф-ғәҙәтен бер ҡасан да онотмаған башҡорт был йолаларға эйәреп килгән шөғөл-кәсептәрен дә мөмкин тиклем тулы рәүештә быуындан-быуынға тапшыра алған.

Бәхет, ырыҫ теләп һуғылған балаҫ ҡыҙ кешелә яҡты киләсәгенә ышаныс уятҡан, уны ғаилә тормошона әҙерләгән. Шул уҡ ваҡытта балаҫ һуғыусы әсәй, өләсәй балаларын сәнғәткә, иң мөһиме, эшһөйәрлеккә өйрәткән. Һәр епте теҙеү оло сабырлыҡ, балаҫ һуғыу оло таһыллыҡ һәм көс талап итеүгә ҡарамаҫтан, ҡулың башҡара белгән эштең килтергән кинәнесен татыуы икеләтә шатлыҡ - фестивалгә йыйылған оҫтабикәләргә ҡарап, ошоға инанаһың.

### ...биҙәк - балаҫ күрке

Фестиваль күргәҙмәһенең ҙур ғына өлөшөн әлшәйҙәр һуҡҡан балаҫтар биләне. Сурай, Ҡыпсаҡ-Аҫҡар, Яңы Ҡыпсаҡ, Сураҡай, Ирек, Гәйниямаҡ, Ҡармыш, Фән, Иҙрис, Себенле ауылдарынан килгән оҫтабикәләрҙең аҫалы балаҫтары биҙәктәренең боронғолоғо менән айырылып торҙо. Асыҡ һәм ябыҡ баҙыян, бөтөй, айсыҡ, батмус аҫа, сулпы аҫа, әҙрәс, ҡаҙ тешләтеү, тәкә мөгөҙө (Дим буйында ҡусҡар биҙәге "тәкә мөгөҙө" тип йөрөтөлә) - иң боронғо аҫалар иҫәпләнә. Балаҫтың "заманса" варианты - шау сәскәләрҙән генә торғаны күлбарсаһы тип атала икән. 2010 йылда тәүге тапҡыр ойошторолған "Дим буйы биҙәктәре" аҫалы балаҫ һуғыу оҫталары күргәҙмәһе фестивалендә еңеүсе тип табылған Тәслимә апай Кәлимуллина ла был биҙәктәрҙең аҫалы балаҫҡа айырыуса зиннәтлелек өҫтәүе тураһында һөйләне.

Һәр биҙәк - халыҡтың донъяны нисек, ни рәүешле ҡабул итеүе тураһында һөйләй. Башҡорт милли костюмдарын тергеҙеү менән шөғөлләнеүсе Әсмә Усманованың һигеҙ мөйөшлө биҙәкте Хәйбулла районында "һигеҙ ожмах асҡысы" тип йөрөтөүҙәре тураһында һөйләгәнен ишеткәнем бар ине. Был фестивалдә ҡатнашыусы апайҙар менән аралашып, тағы ла ҡайһы бер биҙәктәрҙең мәғәнәләрен асыҡларға мөмкинлек булды. Мәҫәлән, йөрәк формаһындағы билдә башҡорт халҡына хас сифатты - ҡунаҡсыллыҡты, уның күңеленең барыһына ла, шул иҫәптән Хоҙай Тәғәләгә лә асыҡ булыуын белдерә. Башҡорт тирмәләрен хәтерләтеүсе биҙәктәр ҙә башҡорттоң тәбиғәт балаһы булыуын, уның йәшәү рәүешен сағылдыра. Төрлө ромбтар - ҡатын-ҡыҙ символы, ҡатын-ҡыҙ башланғысы, беҙҙең ҡайҙан барлыҡҡа килгәнлегебеҙҙе күрһәтеп тора. Әүернә тип йөрөтөлгән орнамент та бик үҙенсәлекле. Әүернә - соляр биҙәк, ул бар халыҡтарҙа ла ҡояшты сағылдыра. "Балаҫ һуҡҡанда биҙәктәрҙең ҡара йәки һирәгерәк күк ерлеккә һалыныуының да үҙ мәғәнәһе бар. Беренсенән, ҡара ерлектә бөтә төҫтәр ҙә яҡшы уйнай. Икенсенән, ҡара төҫ Ер-әсәбеҙҙе белдерә, беҙ ошо ерҙә йәшәйбеҙ, беҙҙе ул туйындыра. Күк ерлек иһә Тәңрене - иң баш Алланы символлаштыра. Былар барыһы ла халҡыбыҙҙың донъяға ҡарашынан килә", - ти этнограф Зилә Миңлейәр ҡыҙы.

Кейеҙ кеүек үк, балаҫтың да ҡиммәтен ул яһалған материал билдәләй. Йөн - тере материал, ул тын ала, шуға ла кешене дауалау һәләтенә эйә. Борондан бәләкәй балаларҙы, ауырыу кешеләрҙе аҡ кейеҙгә урап дауалау булған. Балаҫ өсөн дә яҡшы сифатлы йөн ҡулланыла. Әлбиттә, магазиндарҙа һатылған ептәрҙән балаҫ һуғыусылар ҙа бар, әммә оҫта балаҫ һуғыусылар ундай балаҫтың шифаһы ла, сифаты ла юҡ, ти.

### Еңеүсе - Дәүләкәндән!

"Бындай сараларға башҡаларҙың эштәрен ҡарарға, үҙем һуҡҡан балаҫтар менән маҡтанырға йөрөйөм", - тигәйне Дәүләкән районы Ҡоръятмаҫ ауылынан килгән 77 йәшлек Разия Фазлый ҡыҙы Әхмәтвәлиева шаярыу ҡатыш. Йәштән эшендә лә эшләп, өйҙә балаҫ һуғырға ла өлгөргән апайҙың маҡтанырға хоҡуғы ла бар шул, балаҫтары Мәскәүгә лә, республиканың үҙәндә лә төрлө күргәҙмәләргә ҡатнашып тора. Быйылғы фестивалдең Гран-прийы ла тап уға эләкте.

- Йолаһы шулай - ҡәйнә йортона оҙатылғанда ҡыҙҙарҙың кейеҙе лә, балаҫы ла, башҡа түшәк-ҡаралтылары ла булырға тейеш. Инәйем оҫта мейес сығарыусы булды, әммә бәйләм тота белмәне. Шуға ла бәйләү-тегеү менән бәләкәйҙән мин булыштым, балаҫ һуғырға ла өйрәндем. Үҙемә үҙем бирнә әҙерләнем. Бөгөн дә ошо күркәм йоланы һаҡлап, ҡыҙҙарына аҫалы балаҫ һатып алырға теләүселәр күп, әммә мин хәҙер һатмайым. Бәләкәйҙән сәскәләр ярата инем, балаҫтарымда уларҙың тағы сағыуыраҡ төҫтәр менән балҡып китеүен күреү шул тиклем күңелгә шатлыҡ өҫтәй. Биҙәктәрен үҙем дә уйлап сығарам, боронғоларын да ҡулланам. Шулай ҙа хәҙер беҙ элек һуҡҡан биҙәктәр һирәк осрай, шуға ла фотоларҙан ҡарап тергеҙеп булһа ла, боронғо башҡорт биҙәгенән генә торған балаҫ һуғырға ниәтләнеп торам. Иң ҡиммәтле балаҫ - һарыҡ йөнөнән һуғылғаны. Хөкүмәткә йөн тапшырған ваҡытта балаҫ һуғыу өсөн йөн табыуы ауыр ине, хәҙер уны маныу өсөн буяуҙар табыуы ауыр. Йөн яҡшы итеп буялһын өсөн уны буяу

✓ *Әгәр нимәлер алырға йәки эшләргә вәғәҙә итһәгеҙ - уларҙы мотлаҡ үтәгеҙ, юҡһа, үтәлмәгән эштәр кармаһы барлыҡҡа килеүе мөмкин. Шуға күрә бер ваҡытта ла бер кемгә лә бер нәмә лә вәғәҙә итмәгеҙ.*

менән бергә бер сәғәт ҡайнатырға кәрәк. Ярты сәғәт ҡайнаһа, тоҙ, һерке һәм бер ҡалаҡ солярка өҫтәп ебәрәм. Һеркә менән тоҙ буяуҙы ныҒытһа, солярка һалып ҡайнатҡан йөндән һуғылған балаҫҡа көйә төшмәй, - тип оҫталыҡ серҙәрен беҙҙең менән дә уртаҡлашты Разия апай. Әйткәндәй, ул оҙаҡ йылдар "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре берекмәһенә аҫалы балаҫтар һуғып әҙерләүсе апайҙарҙың береһе.

## Олоһо ла, кесеһе лә

Фестивалдә ҡатнашыусы райондарҙа бөгөнгө көндә балаҫты балалар ҙа, ололар ҙа һуға. Архангел районы Орловка ауылында клуб мөдире булып эшләгән Фәнисә Сәйфетдинова ауылдар буйлап ташландыҡ хәлдә ҡалған станоктарҙы йыйып, ҡатын-ҡыҙҙарҙы был кәсепкә ылыҡтыра. Табыш килтермәһә лә, ҡул эше менән булышыу гүзәл затты замандың кире тәьҫирҙәренән аралай, ти ул. Ә Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Аҫҡар урта мәктәбендә башҡорт мәҙәниәте һәм хеҙмәт дәрестәре алып барыусы Миңзилә Муллағолова баланың фантазияһын үҫтереү өсөн ҡулдан балаҫ һуғыу техникаһынан да яҡшыраҡ ысул юҡлығын яҡшы аңлап, 1993 йылдан алып балаларға балаҫ һуғырға өйрәтә. Үҙе лә балаҫ һуғыусылар нәҫеленән булған мөғәллимә Әлшәй уҡыусылар һәм пионерҙар йортонда түңәрәк алып барырға ла өлгөрә. "Балаларға өйрәтеүен өйрәтәм дә, тик һәр береһенең өйөндә балаҫ һуғыу станоктары юҡ, шуға ла белгән шөғөлдәре онотолоп та ҡала", - ти Миңзилә Зөлфәр ҡыҙы. Бына бит, бер кәсеп икенсеһен тыуҙыра, хәҙер инде балаҫ һуғыу станоктары эшләүселәр күпләп талап ителә. Фестивалдә станок яһаусылар ҙа ҡатнашасаҡ, тип әйтелһә лә, килеп үҙен күрһәтергә теләүсе ир-егеттәр булманы.

Балаҫ һуғыусылар тураһында һөйләгәндә, Ғафури районы Сәйетбаба ауылын да телгә алмай булмай. Сәйетбаба - әлегә республикала балаҫ һуғыу цехы асҡан берҙән-бер ауыл иҫәпләнә. Ике йыл элек эшләй башлаған цехта ла, өйҙәрендә лә балаҫ һуғыусылар йылдан-йыл арта был ауылда. Уларҙың барыһына ла аҫалы балаҫ һуғырға Рабиға Сәлих ҡыҙы Йәрмиева өйрәтә. Балаҫ һуғыу станоктары етештереүсе оҫталар ҙа байтаҡ Сәйетбабала.

Быйылғы башҡорт балаҫы фестиваленең тағы ла бер әһәмиәте шунда булды - унда оҫталыҡ дәрестәренә күберәк ваҡыт бүленде. Әлшәй, Дәүләкән, Ғафури, Архангел райондарының балаҫ һуғыусылары ике көнгә һуҙылған семинар-практикумда Нефтекама, Өфө, Салауат, Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Белорет, Сибай, Учалы, Күмертау, Бәләбәй ҡалаларынан килгән 25 кешегә башҡорт балаҫы һуғыу техникаһын өйрәтте. Уларҙың барыһына ла уҡыу тураһында сертификат тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡулдан яһалған эш ҡиммәт баһалана. Бөгөн бөтөн донъя халҡы Төркиә менән Ҡытайҙың тәбиғи йөндән баҫылған балаҫтарына ҡарап иҫе китә. Тимәк, беҙҙә лә ата-бабаларыбыҙҙың боронғо һөнәрен тергеҙеү - үҙе заман талабы. Был шөғөлдө халыҡ бынан әллә күпме йылдар элек үк юғары сәнғәт кимәленә күтәрә алған икән, хәҙер беҙгә ошоларҙың барыһын да хәтергә төшөрөргә генә кәрәк. Әлегә лауреаттарҙың уртаса йәше 70 тирәһендә булһа, киләсәктә ошондай фестивалдәр сиктәрендә уҙғарылған оҫталыҡ дәрестәре һөҙөмтәһендә йәштәр ҙә балаҫ һуғыуға ныҡлап тотонор, тигән ышаныста фестивалде ойоштороусылар. Заманса матурлыҡ һәм сифат стандарттарына ярашлы балаҫтар һуғыу - киләсәк эше. Һәм тағы ла. Нимә генә тимәйек, халҡыбыҙҙың зауығын, эске матурлығын билдәләүсе балаҫ һуғыу эшен яңынан яйға һалыу заман талабы булыуҙан бигерәк, күңел талабылыр ул. Быны фестивалдә ҡатнашыусылар ҙа, баһалама ағзалары ла, ғалимдар ҙа бер һүҙҙән раҫланы.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Вәғәҙәләр тураһында

Нескә планда бөтөн нәмә килешеү буйынса башҡарыла һәм быны белергә, вәғәҙәләрҙе үтәргә кәрәк. Әгәр вәғәҙәне үтәү мөмкин түгел икән, килешеүҙе өҙөү зарур.

Әгәр нимәләр алырға йәки эшләргә вәғәҙә итһәгеҙ - уларҙы мотлаҡ үтәгеҙ, юҡһа, үтәлмәгән эштәр кармаһы барлыҡҡа килеүе мөмкин. Был - ыҙа сигеүҙең, ғазаптың бер сәбәбе. Шуға күрә бер ваҡытта ла бер кемгә лә бер нәмә лә вәғәҙә итмәгеҙ. Сөнки был - килешеү, уның өсөн яуап бирергә тура киләсәк.

"Шул сәғәткә киләм", тимәгеҙ. Транспорт йөрөмәүе йәки башҡа мөһим эштәр килеп сығыуы бар. Шуға күрә "шул сәғәткә килергә тырышам йәки шул сәғәттән һуң киләм" тиегеҙ. Хатта һеҙ икенсе көнгә килһәгеҙ ҙә ул әйткән сәғәттән һуң буласаҡ.

Шулай уҡ башҡаларҙан да бер ниндәй ҙә вәғәҙә талап итмәгеҙ. "Сәләм әйт!" тиеү ҙә дөрөҫ түгел, кешенең онотоуы ихтимал. Иң яҡшыһы: "Шул кешегә сәләм!"- тиегеҙ, йәғни һеҙ уға уйығыҙҙа ғына сәләм ебәрҙегеҙ ҙә инде. Әгәр һеҙгә:"Шуға сәләм әйт!" - тиһәләр, вәғәҙә биреү кәрәкмәй, бәлки, тапшыра алмаҫһығыҙ, шуға күрә, "Рәхмәт", тип кенә әйтегеҙ, йәғни шулай итеп һеҙ сәләм алырға тейешле кеше исеменән рәхмәт белдерәһегеҙ.

Хәҙерге заманда теләһә ниндәй ваҡ нәмә лә әһәмиәтле. Шуға күрә быға тиклем булған барлыҡ анттарҙы, вәғәҙәләрҙе үтәү мөмкинлеге юҡ икән, уларҙы өҙөргә кәрәк.

Түбәндә контрактты өҙөү варианты тәҡдим ителә:

Мин, (исем-шәриф), Аллаһы Тәғәлә һәм барлыҡ ҡыҙыҡһыныусы яҡтар алдында быға тиклем ҡабул ителгән, әммә минең үҫешемә һәм эволюцияма тап килмәгән анттар, вәғәҙәләр, килешеүҙәрҙән баш тартам.Мин теләһә ниндәй ҡағиҙәләр, ҡуйылыштар, кодекстар, уйҙырмалар йоғонтоһонан сығам һәм үҙемдең хәҡиҡәтемде әүҙемләштерәм, үҙ һүҙемдең көсөн ҡайтарам.

## Фәрештәләр тураһында

Ышанаһығыҙмы, юҡмы, әммә һәр ҡайһыбыҙҙы кәмендә ике фәрештә һаҡлай. Һәм уларҙың барлыҡ эшмәкәрлеге беҙҙең яҙмышыбыҙ һәм сәләмәтлегебеҙ менән тығыҙ бәйләнгән.

Бер ир күп ҡатлы йорттоң ҡыйығы аҫтында тора һәм ҡапыл уны кемдер ныҡ итеп этәреп ебәрә. Ул ситкә бер нисә аҙым яһап, кем этеп ебәргәнен күрер өсөн боролоп ҡарай һәм әле генә үҙе торған урынға ҙур боҙбармаҡ килеп төшөүен күрә.

Ирәмәл тауына менгәндә бер пациент төркөмдән айырылып ҡала һәм яңғыҙы ғына яйлап атлай. Ҡапыл: "Был ташҡа баҫма, ул тотороҡло түгел", - тигәнде ишетә. Һаҡ һына баҫып ҡарай, ысынлап та, таш һелкенеп тора. Артабан китә һәм уға тағы ла: "Был ташҡа баҫма, ул тая", - тигән тауыш ишетелә. Баҫып ҡарай, ысынлап та, тайып тора. Һуңынан: "Түбәләҫтең теге яғына сыҡ, унда үҙеңде келәмдән барған һымаҡ тойорһоң", - тиҙәр. "Унда ҡайҙан, ниндәй келәм булһын?"- тип аптыраһа ла, шул яҡҡа сыға. Ысынлап та, унда мүк үҫә, атлауы ла келәмдән барған кеүек йомшаҡ була. Пациент аптырай, эргәһендә берәү ҙә юҡ кеүек ине ләбаһа!

- Нисек инде, бер кем дә юҡ, ә беҙ?
- Кем һеҙ?
- Һине һаҡлаусы фәрештәләрең!

Фәрештәләр беҙҙе даими һаҡлай, ҡурсалай, беҙҙең хәҙерге булмышыбыҙ үҙ тәғәйенләнешен үтәһен өсөн тырыша. Даими рәүештә беҙгә аңлатырға, нимәләр әйтергә тырышалар, төштәргә инәләр, төрлө билдәләр күрһәтәләр.

Әгәр һеҙ ҡапыл ғына нимәнелер эшләргә кәрәклеген иҫегеҙгә төшөрһәгеҙ, тимәк, быны тормошҡа ашырыу өсөн иң уңайлы ваҡыт - фәрештәләр иҫкәртә. Был эште иртәгәгә ҡалдырырға ярамай, һуңынан хәл-ваҡиғалар үҙгәреп китеүе ихтимал.

Фәрештәләр хатта әллә ни әһәмиәтле булмаған нәмәләрҙе лә иҫкәртәләр. Шуға күрә төрлө билдәләргә һәм иҫкәртеүҙәргә иғтибарлы булығыҙ. Бәлки, берәй бала йәки үтеп барыусы кеше берәй нәмә тип әйтер, бәлки, плакатта йәки журналда ниндәйҙер әһәмиәтле нәмә күрерһегеҙ. Элек кешеләр билдәләргә иғтибарлы булған.

Йыш ҡына тура телмәр аша ла иҫкәртеү алыуығыҙ мөмкин. Шуға һүҙҙәргә иғтибарлы булығыҙ. Мәҫәлән, кемгәлер хәбәр һөйләйҙәр, ә был һеҙгә ҡағыла (әгәр һеҙ иғтибар итәһегеҙ икән).

Фәрештәләр шулай уҡ һеҙҙең барлыҡ теләктәрегеҙҙе, уларҙың маҡсатҡа ярашлымы, түгелме икәнен айырып тормайынса, үтәй. Уны улар һеҙҙең визуалләштереүегеҙ аша ҡабул итә. Мәҫәлән, үҙегеҙ ялда саҡта өйөгөҙгә бурҙар төшкән һәм бөтөн йыһаздарығыҙҙы алып сыҡҡандар, тип күҙ алдына килтерәһегеҙ икән - тап шулай булыуы ла ихтимал. Фәрештәләр һеҙҙең визуалләштергән картинаны ҡабул итеп, һеҙ ҡайтыуға фатирығыҙҙы мебелдән бушатырға кәрәк икән тип уйлаясаҡ. Шуға күрә бары тик ыңғай күренештәрҙе генә күҙ алдына килтерегеҙ.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Аң тәбиғәте: бығаса булмаған суперярҙам

**"Уй иң тере тормош көсө булып тора, Йыһанда осраған иң тере, иң нескә һәм иң һоҡландырғыс көс... Уй-фекерҙәр - тере йәндәр", ти Свами Сивананда.**

Һеҙҙә әлегә йоҡлаған энергия резервтарын асыу һәм уларҙы эшкә егеү өсөн кеше мейеһенең эшмәкәрлеген аңларға кәрәк. Тормошта барлыҡ мөһим ҡоролмаларҙы, аппараттарҙы, машиналарҙы ҡулланыу өсөн уларға инструкция яҙыла, ә һәр кемдең иңбашында урынлашҡан, ауырлығы 2 килограмдан ашыу булмаған ҡулайламаны нисек файҙаланырға? Мәктәптә беҙҙе алгебранан ауыр мәсьәләләр сисергә һәм, бәлки, беҙ бер ваҡытта ла бармаясаҡ илдәрҙең баш ҡалаларының атамаһын хәтерҙә ҡалдырырға өйрәтәләр. Ә үҙеңдең бөйөк һәләтең - шәхси аңыңды нисек аңларға? Шәхси камиллыҡҡа һәм уңышҡа өлгәшеү өсөн - мейенең нисек эшләүен, еңеүсе булыу өсөн - аңыбыҙҙың тормошобоҙҙо үҙгәртә алыуын аңлау тора. Берҙән-бер сикләү - үҙегеҙгә-үҙегеҙ ҡуйған сикләү. Әгәр үҙегеҙгә бер ниндәй сикләүҙәр ҡуймайынса уйлай һәм хыяллана башлайһығыҙ икән, мөғжизәле ваҡиғалар тыуыуын һәм уйынға иң ҡеүәтле көстәр ҡушылыуын көтөгөҙ.

Мейегеҙҙе иң бөйөк фекер эйәһенең мейеһе кеүек һөҙөмтәле файҙаланыу өсөн аҡылды камиллаштырыуҙың 10 алтын ҡағиҙәһен өйрәнегеҙ.

1. Уңыш кимәле көн һайын һәр минут, һәр секунд нисек фекерләүегеҙгә бәйле. Һеҙҙең уйҙарығыҙ донъяғыҙҙы формалаштыра: аҡыл камиллығы тормош камиллығының нигеҙе булып тора. Бөгөнгө уйҙарығыҙ иртәгәге хыялдарығыҙҙың "кирбестәре" ул.

2. Һеҙҙе урап алған мөхит эске донъяғыҙҙы сағылдыра. Әгәр тормошоғоҙҙо үҙгәртергә теләһәгеҙ, мейегеҙгә һалған уй-фекерҙәрегеҙҙе үҙгәртеүҙән башларға тейешһегеҙ. Тышҡы уңыш эске уңыштан башлана.

3. Нимә тураһында уйлауығыҙға бары тик үҙегеҙ яуаплы. Тағы шуныһы мөһим: аңығыҙҙы көн һайын күнектереп һәм ғәҙәтләндереп, фекерләү образын тулыһынса үҙгәртә һәм кире фекерләү ғәҙәтенән тулыһынса арына алаһығыҙ. Фекерләү моделдәре ғәҙәт булып тора һәм, теләһә ниндәй ғәҙәт кеүек үк, әгәр маҡсатығыҙға өлгәшеү өсөн аныҡ эштәр башҡарырға көслө теләгегеҙ булһа, уларҙы үҙгәртергә мөмкин.

4. Һөҙөмтәле аңға көйләнеү бер көн эсендә генә килмәй. Һеҙгә башҡа өлкәләрҙәге кеүек, ауыр эште атҡарып сығырға кәрәк буласаҡ, бының өсөн бөтөн ғүмерегеҙҙе арнаһағыҙ ҙа насар түгел. Ләкин 30 көнөгөҙҙө көндәлек күнекмәгә сарыф итеп, фекерләү образығыҙҙа, хистәрегеҙҙә, ғәмәлдәрегеҙҙә үҙгәреш күрерһегеҙ.

**Робин ШАРМА.**

✓ *Һөт продукцияһы һатып, ғаиләһен туйындырыусы ҡатын-ҡыҙҙар күп. Ҡыҫҡаһы, гүзәл зат бөгөн йортон да ҡарай, балаһын да тәрбиәләй, иренә лә таяныс булып тора, бары тик уға ваҡытында рухи ярҙам күрһәтеү генә кәрәк.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# "ТАМЫР"ҒА - 20 ЙЫЛ




**Горизонталь буйынса:** 11. Йәнһүрәттәге тутыйғош Кеша "булған" Тымыҡ океан утрауы. 12. Ғибрәтле йә хәсрәтле бер ваҡиғаға арналған шиғри хикәйәт. 13. Михаил Горбачевтың ҡатыны. 14. Энергияның иң бәләкәй өлөшсәһе. 15. Тышҡы шарттарҙың кеше һаулығына тәьҫирен өйрәнгән фән. 21. Айырым бер мәсьәләне ҡараған ғилми хеҙмәт. 28. Хис-тойғоно көйлө тауыш аша сағылдырған сәнғәт төрө. 29. "Эт менән ҡоҙа булһаң, һөйәк менән (...) үткәрерһең". 34. Ҡаҙаяҡ үләненең икенсе исеме. 37. Тауышты билдәле тәртиптә төҙөү ысулы. 39. Ерҙә тереклектең барлыҡҡа килеү гипотезаһын тәҡдим иткән совет биохимигы, академик, Социалистик Хеҙмәт Геройы. 42. Тоҡомо юҡҡа сыҡҡан ҡырағай ат. 47. Бюджет, аҡса, һалым өлкәһендә эшләгән белгес. 50. Сәғәттең үҙ күсәрендә төрлө яҡҡа хәрәкәт итә торған ҡуласаһы. 55. Башҡортостандағы "ҡырғыҙлы" район. 56. Ерҙән бер ниндәй ҙә көс түкмәй даими рәүештә алына торған төшөм. 57. Шоферҙың төп документы. 58. Австралияның символы булып торған хайуан. 59. Уҡыу йортонда уҡымаған көйө үҙ алдына әҙерләнеп, уҡып сығыу системаһы.

**Вертикаль буйынса:** 1. Китапхана йәшниктәрендәге исемлек. 2. Өлкән йәштәге тәжрибәле яугир. 4. Японлар уйлап сығарған ҡағыҙ сәнғәте. 5. Дж.Вердиның бер батшаға арналған операһы. 7. Тупрағында тоҙ күп булған ер. 8. Һырлы-һырлы йөнтәҫ итеп һуғылған кизе-мамыҡ туҡыма. 16. Азиялағы сүллек. 17. Еңел-(...) - тәрән мәғәнәһеҙҙе аңлата. 19. Башынбашҡа терәп, арҡырыға теҙеп һалған көлтә өйөмө. 20. Иң ауыр металл. 22. Йәйен - урманда батша, ҡышын - ҡарҙан да аҫта. 23. Кескәй генә ҡапсыҡ, эсендә һары балсыҡ. 25. Һайлап ҡуйылған юғары дәүләт органы. 27. Был ағастың ашарға яраҡлы ҡуҙаҡтарынан алынған тәмләткес онтаҡ. 28. Бөтөн бер ҙур таш. 30. "Ауыҙ асыу" байрамы. 32. Төркиәләге күл. 33. "Халҡы яман (...) аҙыр, ҡатыны яман ир аҙыр". 40. "Тинтәктең (...)ы төштән һуң". 41. Грузия менән Әзербайжандағы йылға. 44. Берәй эш буйынса алдан ҡоролған уй-ниәт. 45. Ҡалала урынлашҡан йәнлектәр күргәҙмәһе. 46. Эш эҙләп ҡышын ситкә киткән ауыл кешеһе. 48. Әбйәлил, Баймаҡ райондарын тоташтырған тау һырты. 49. Һыҙғыслы музыка ҡоралы. 50. Көньяҡ Америка сүллеге. 51. Ниҙеңдер тәьҫиренән килгән насар һөҙөмтә.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**14-се һандағы сканворд яуаптары:**
**Горизонталь буйынса:** Репетиция. Вәлмөхәмәтов. Роллер. Кәпәс. Комод. Рысбаев. Наказ. Пробирка. Окапи. Компостер. Каюта. Нәфсехур. Дан. Ырым. Теш. Резонанс. Аккордеон. Әтраф. Кәмит. Нафталин. Кеше. Пенсне. Нонсенс. Әлифба. Шәжәрә. Тоҫҡама. Луна. Ришүәтсе. Булат. Ҡәбилә. Тамаша. Венера (Рәхмәтуллина). Әбей.
**Вертикаль буйынса:** Доға. Романтик. Манеж. Шәрбәт. Бысҡы. Кенә. Рене. Вирд. Кворум. Нәфсе. Салауатов. Рәмил (Хәзиев). Старт. Еләк. Ҡара. Күрк. Фәйрүзә. Бисә. Цитоплазма. Игәт. Сулпан (Хөсәйенова). Рушан (Биктимеров). Ебәләй. Әрме. Аманат. Зифаф. Бусидо. Талҡаҫ. Хима (Йәнбирҙина). Лирика. Рөхсәт. Ноғала.
**Пароль:** Юлдаш.




*ИҒТИБАР!*

## ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Баш ҡатырғыста билдәләнгән түңәрәктәрҙәге хәрефтәрҙән **пароль-һүҙҙе** табып, редакцияға шылтыратып, дөрөҫ яуап биргән еңеүсе **18 апрелдә "Тамыр" телеканалы үткәргән юбилей кисәһенә саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ГРАЖДАНЛЫҠ ЙӘМҒИӘТЕНЕҢ...
## иң әүҙем ойошмаһы

**Башҡортостан Ҡатын-ҡыҙҙар советы ойошторолоуға 25 йыл тула. Ул бөгөн иң әүҙем эшләүсе йәмәғәт ойошмаһы иҫәпләнә. Ошо ваҡиға уңайы менән райондарҙағы ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйестәренә мөрәжәғәт итеп, совет эшенең әһәмиәте тураһында һөйләштек.**

**Роза СОЛТАНОВА, Хәйбулла районы ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе:** Быйыл республикала ҡатын-ҡыҙҙар советтары барлыҡҡа килеүҙең 25 йыллығы билдәләнһә лә, был рәсми дата ғына. Ҡатын-ҡыҙ - ул донъя тотҡаһы, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр, һәр ауылда ағинәйҙәр тәрбиә эше менән булышҡан, уларҙың күҙенән бер нәмә лә ситтә ҡалмаған. Ҡатын-ҡыҙҙар советы - ул йәмәғәт ойошмаһы, шулай ҙа беҙгә дәүләт вәкилдәре ҙур ярҙам күрһәтә. Бәлки, шуғалыр ҙа, ойошманың халыҡ араһындағы абруйы ҙур, шулай булмаһа, ярҙам һорап, хаттар, ғаризалар яҙмаҫтар ине.

Эшебеҙ башлыса ғаиләләр менән бәйле. Йәмғиәт ниндәй генә үҙгәрештәр кисермәһен, был иң тәүҙә ғаиләлә сағыла. Балалар ата-әсәһе менән үҫһен өсөн ҡулдан килгәнден барыһын да эшләйбеҙ. Эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ замандарында төшөнкөлөкә бирелеп, ирҙәре ыңғайына эскелеккә киткән ҡатындар булды. Улар менән бер туҡтауһыҙ әңгәмәләр алып барып, хатта дауаланырға ебәргән осраҡтар булды. Кешенең тормошҡа, киләсәккә ышанысын уятып ебәреү өсөн бер һүҙ ҙә етеүе ихтимал. Хәҙер беҙ был проблеманы еңдек, тип уйлайым. Төрлө саралар ойошторабыҙ, йыл һайын урамдар байрамы үтә, быйыл был сара менән "Ғаилә көнө" үткәрәсәкбеҙ. Айыҡ ауылдар бар, халыҡ йәйлап сәләмәт йәшәү рәүешенә күнә бара.

**Маргарита СӘФӘРҒӘЛИНА, Салауат районы ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе:** Бөтөн илгә хас проблемалар беҙҙә лә бар. Шул уҡ эшһеҙлек, эскелек, балалар тәрбиәләү мәсьәләләре беҙҙе лә урап үтмәй. Ун алты ауыл биләмәһендә лә ҡатын-ҡыҙҙар советтары булдырылған, улар ветерандар, ағинәйҙәр ойошмалары менән дә, урындағы власть менән дә бергә эшләй. Хәҙер замандың тағы ла бер яман күренеше беҙҙе хафаға һала - ауылдарҙа типһә тимер өҙөрлөк ир-аттар пенсия йәшендәге атай-әсәй елкәһендә ята, етмәһә, уларҙың аҡсаһын спиртлы эсемлек һатып алыу өсөн тотона. Шуға ла балалар, үҫмерҙәр менән күберәк эшләргә тырышабыҙ, ата-әсәләр менән әңгәмәләр үткәрәбеҙ, улар кистәрен урамда йөрөмәһен өсөн күрәшәбеҙ, рейдтар үткәрәбеҙ. Районда эшһеҙлекте кәметеү маҡсатында эшҡыуарҙарға ярҙам итергә тырышабыҙ, улар араһында ҡатын-ҡыҙҙар ҙа байтаҡ ҡына. Теплицала йәшелсә үҫтерәләр, хәҙер бына ҡыяр-помидорҙарын район халҡына ла, күрше Силәбе өлкәһенә лә сығарып һата башлаясаҡтар. Бынан тыш, һөт продукцияһы һатып, ғаиләһен туйындырыусы ҡатын-ҡыҙҙар күп. Ҡыҫҡаһы, гүзәл зат бөгөн йортон да ҡарай, балаһын да тәрбиәләй, иренә лә таяныс булып тора, бары тик уға ваҡытында рухи ярҙам күрһәтеү генә кәрәк. Ҡыҙҙары, ейәнсәрҙәре менән клубҡа йөрөһөндәр, тип, унда төрлө саралар үткәреп торабыҙ, ҡул эштәре күргәҙмәләре, фестивалдәр ойошторабыҙ, ҡыҫҡаһы, бер көн дә буш ултырмайбыҙ.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

*✓ Ҡурайҙы бар урынға ла ҡыҫтырырға ярамай, ул йомошсо малай түгел, ул үҙ урынында ҡалырға тейеш. Юғиһә, һәр рәсми тантана барған урында ҡурай яңғыраталар, хатта тантаналы сараларҙа "Тәфтиләү"ҙе лә уйнап ҡуялар.*

ТУРА ЯРЫП...

# ҮҘ ИЛЕНДӘ ӘҮЛИӘ БУЛМАҺА ЛА...

## йәки "Урал моңо" на әҙерлек хаҡында бер кәлимә



**Совет осоронда Алма-Атала төрки халыҡтарҙың "Азия тауышы" тигән Халыҡ-ара фестивале уҙа торғайны. СССР тарҡалғандан һуң был фестиваль юҡҡа сыҡты, уның ҡарауы, Башҡортостанда барлыҡҡа килгән төрки йәштәрҙең халыҡ-ара "Урал моңо" музыкаль ижад конкурс-фестивале әҙерлек һәм үткәрелеү кимәле буйынса "Азия тауышы"нан һис тә кәм булмаған сараға әүерелде. Быйыл "Урал моңо" конкурс-фестивале Өфөлә 16-сы тапҡыр 24-26 майҙа уҙасаҡ. Урынлы һорау тыуа: ни өсөн оло тарихлы, бай йөкмәткеле һәм зауыҡлы булған милләтебеҙ сәнғәте ошо конкурс-фестиваль йөҙөндә балҡыш кисерә алмай һуң? Уңыштар бөтөнләй үк юҡ түгел, әммә 16 йыл эсендә уңыш ҡояшы беҙгә бик-бик һирәк йылмайҙы. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең сәнғәт әһелдәре донъяның башҡа тарафтарында ошо уҡ төрки милләттәр ҡатнашлығында үткән конкурс-фестивалдәрҙән күп осраҡта "еңеү тейәп" ҡайта. Нимә, был "Үҙ илендә әүлиә булмай" тигән халыҡ әйтеменең сәнғәттәге үҙенсәлекле сағылышымы?**
**Ошо һорауҙарға Республика халыҡ ижады үҙәге баш белгесе, төрки йәштәрҙең халыҡ-ара "Урал моңо" музыкаль ижад конкурс-фестивале координаторы Рөстәм БАҺАУВ яуап эҙләй.**

### Ябай концерт түгел

Беҙҙә, нисектер, "Урал моңо"на әҙерләнгәндә ябай концертҡа әҙерләнгәндәгеләй кәйеф күҙәтелә. Унда ҡатнашыусылар был сараны кемдәндер концертында бер йыр башҡарып сығыуға тиңләй һәм янылыша. "Урал моңо" - ябай ғына концерт түгел. Ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар, әзербайжандар, хакастар һәм башҡа республикалар халыҡтары был бәйгегә, ҙурҙан ҡубып, йыл һуҙымында әҙерләнә. Улар элек "Азия тауышы"на нисек әҙерләнһә, "Урал моңо"на ла шундай уҡ әҙерлек менән килә. Шуға күрә һайлап алыу турына ғаризалар ҡабул иткәндә беҙ яңы ижади кәстәрҙе һәм сығыштарҙы күрергә теләнек. Ни тиһәң дә, республикабыҙ сәхнәләрендә, телевизор экранында, радио эфирында туктауһыҙ яңғыраған сығыштарҙы беҙ ятлап бөткәнбеҙ бит инде. Беҙ исемдәре таныш булған сәхнә оҫталарының да конкурс-фестивалдә ҡатнашыуына ҡаршы түгел, тик уларҙа үҫеш булырға тейеш. Ошо күҙлектән сығып, һайлап алыу турында жюри 49 ҡатнашыусыны тыңланы. Улар араһынан туғыҙын һайлап алдыҡ. Әгәр ҙә конкурс-фестивалгә биш ҡатнашыусыны сығарһаҡ, апрелдә 2-се һайлап алыу туры үткәреү ҙә талап ителәсәк. Май айында инде костюмдар әҙерләү, репетициялар үткәреү менән мәшғүл булырбыҙ, тибеҙ.

### Ҡурай ҡурай ул...

Беҙ төлкө бүрек, елән кейеп сәхнәгә сығып ҡурай уйнауҙы, йырлауҙы, бейеүҙе генә милли сәнғәт үҫеше тип анлап, нык яңылышабыҙ. Төптән уйлаһаң, стилләштерелгән был сәхнә кейеме менән дә беҙ үҙебеҙҙе сикләйбеҙ, ысынында, беҙҙең милли кейемебеҙ күпкә байыраҡ, мәртәбәлерәк, күркәмерәк булған. Был йәһәттән "Урал моңо" конкурс-фестивале беҙгә артабанғы йылдарҙа милли сәнғәтте фәлсәфәүи яҡтан тәрәнәйтеү, уны бар донъя ҡабул итерлек кимәлгә еткереп, ҡыҙыҡлы һәм зауыҡлы итеү зарурлығын аңлата. Беҙ һәр урында ҡурайҙы яңғыратып, уны модаға әйләндереп ебәрмәнекме икән? Урынлымы-урынһыҙмы, көйө тура киләме-юҡмы, бөтә ерҙә лә ҡурай тауышы. Ҡурай - ул ҡурай, ул гармун да, шарманка ла түгел, уның үҙ урыны бар. Ҡурай - беҙҙең тарих та, моңобоҙ ҙа, булмышыбыҙ ҙа. Ҡурайҙы бар урынға ла ҡыҫтырырға ярамай, ул йомошсо малай түгел, ул үҙ урынында ҡалырға тейеш. Юғиһә, һәр рәсми тантана барған урында ҡурай яңғыраталар, көйөн дә айырып тормайҙар, хатта тантаналы сараларҙа "Тәфтиләү"ҙе лә уйнап ҡуялар. Ҡыҫҡаһы, шундай мөмкинлектәребеҙ була тороп, беҙ "Урал моңо"нда үҙебеҙҙең моңдо күрһәтә алмайбыҙ. Һуңғы тапҡыр Венера Рәхмәтуллина Гран-приға эйә булды ла, шуның менән - вәссәләм.

### Төньяҡ-көнбайыш әүҙем...

Нишләптер, беҙҙең ҡайһы бер төбәк сәнғәт оҫталары һалҡаүләнде. Конкурс-фестивалға теге йәки был сәнғәт маһирын саҡырып, төньяҡ-көнсығыш райондары мәҙәниәт бүлектәренә шылтыратһам: "Әллә, ул бара алырмы икән? Ул әҙер түгел бит әле, йүнле костюмы ла юҡ. Әллә, аҡса таба алһаҡ, бәлки, ебәрербеҙ", - тип яуап бирәләр. Ә бына төньяҡ-көнбайыш районларына шылтыратып та өлгөрмәйбеҙ: "Бар, бар беҙҙең сәнғәт оҫталары, ебәрәбеҙ, аҡса ла бар, ҡасанға, нисә номер кәрәк?" - тип яуап бирәләр. Яңыраҡ беҙ Тәтешле районының ҡурайсылар ансамблен тыңланыҡ. Ансамблдең етәксеһе һәм төркөмдөң яртыһы - удмурт егеттәре. Бынамын тигән итеп башҡорт көйҙәрен уйнап торалар. Ә көньяҡ-көнсығышта һәр икенсе кеше ҡурайсы, әммә ундай дәрт һәм дарман һиҙелмәй. Удмурт егеттәре үҙҙәренең музыка ҡоралында ла уйнап, удмурт мәҙәниәтен дә күтәрә. Һәр хәлдә, афариндар! Тик бына Уралтауҙың үҙендә йәшәүселәрҙең "Урал моңо"на ынтылмауын аңлап булмай.

### Күркәм йолалар...

"Урал моңо", "Байыҡ" кеүек конкурс-фестивалдәргә килеүсе ҡунаҡтар менән аралашҡанда уларҙың үҙ милли йолаларына тоғролоғона һоҡланмау мөмкин түгел. Әйтәйек, мин "Байыҡ"ҡа килгән ҡаҙаҡ ҡыҙҙарын оҙатып йөрөнөм. Улар миңә: "Ағай, ағай, һеҙ беҙҙең арала берҙән-бер ир-ат", - тип, ҡунаҡ булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙҙәре миңә хәленсә хөрмәт күрһәтергә тырышты. Ир-егеткә хөрмәт менән ҡарауҙы ҡаҙаҡ ҡыҙҙарына бәләкәй сағынан уҡ һеңдергәндәре күренеп тора. Ҡабарҙы-Балҡар ҡыҙҙары барыһын да уҙҙырҙы. Уларҙың Йәмилә тигәне тағы ла бер ҡыҙҙы алып, ашхана етәкселегенә мөрәжәғәт итеп, үҙҙәре менән килгән өс егеткә һәм ҡыҙҙарына милли ризыҡтарын бешереп ашатты. Беҙҙе лә һыйланылар. Беҙҙең халыҡ-ара ризыҡса улар әйләнеп тә ҡараманы.

Ҡабарҙы-балҡарҙар һаулыҡ һорашҡан саҡта оло кеше ҡул бирһә генә, йәш кеше ҡулын һуҙа, оло кеше ике ҡулын һуҙһа ғына, йәше лә ике ҡулын һуҙа. Ошондай күркәм йолаларҙы ни өсөн иҫкә алдым һуң? Нимә генә тимә, "Урал моңо" конкурс-фестивалендә төрки халыҡтарҙың тарихы ла, фольклоры ла, эстрада үҫеше лә, йола-традициялар күсәгилешлеге лә берҙәй үк сағылырға тейеш. Үкенескә күрә, беҙ күп кенә йола-традицияларыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ һәм, кем белә, бәлки, ошо юғалтыу беҙҙең конкурс-фестивалдә өлгәшкән һөҙөмтәлә лә сағылалыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һайлап алыу турында "Арғымаҡ" (Өфө ҡалаһы), "Ҡараташ"( Әбйәлил районы), "Олотау"(Благовар районы), "Латын кварталы"(Өфө ҡалаһы) төркөмдәренең, Сәйфетдинов Руслан менән Шабанова Ленараның (Өфө), Мифманов Илнурҙың (Әбйәлил), Сөләймәнова Фиданияның (Бөрө), Усманов Илдарҙың (Учалы), Аралбаев Иҙелдең (Баймаҡ) сығыштары юғары баһа алды. Уларҙы 2-се һәм төп тур көтә. 2-се тур 20 апрелдә, Кустарная, 17 адресы буйынса 11.00 сәғәттә башлана. Уңыштар теләйек!**

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**яҙып алды.**

---

АҠЫЛ-ҠАЗНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠСАҒА ҺАТ...

## аҡсаға һатылма

Айырылмаҫтай дуҫыңа ҡайырылмаҫтай һүҙ әйтмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Уңышҡа табан юл... үҙ алдынан ирен этәреп алып китеп барған ҡатын-ҡыҙҙар менән тулған.

**(Томас Дьюар).**

Мөхәббәттән барлыҡҡа килгән яралар, үлтермәгәндә лә, бер ваҡытта ла уңалмай.

**(Джордж Байрон).**

Кешенең тәртибе уның кейеме һымаҡ булырға тейеш: бик үк һығып та тормаһын, бик үк киңәйеп тә китмәһен - хәрәкәт һәм эш ирекләге һаҡланырға тейеш.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Кеше намыҫлы булһа, башҡаларҙы намыҫһыҙлыҡта ғәйепләргә батырсылыҡ итмәҫ. Түбән йәнлеләр хатта иң изге ҡылыҡтарҙы ла юҡҡа сығарырға әҙер тора.

**(Марк Цицерон).**

Көн дә ҡабатланған хәл-ваҡиғалар алдында кеше ҡурҡыуын юғалта. Ә бит тап ошо хәл-ваҡиғалар уның өсөн иң ҡурҡынысы булыуы мөмкин.

**(Николло Макиавелли).**

Хаталар һәм тупаҫлыҡ кешегә тормошта икмәк менән һыу кеүек үк кәрәкле.

**(Анатоль Франс).**

Барлыҡ бәхетле ғаиләләр ҙә бер-береһенә оҡшаш, ә һәр бәхетһеҙ ғаилә үҙенсә бәхетһеҙ.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡалдан һорағандар:**
**- Әйтегеҙ әле, һеҙҙе хаҡ юлға кем сығарҙы?**
**- Минең этем, - тип яуап бирә аҡһаҡал.**
**- Нисек инде улай? - тигән аптырауға ҡаршы аҡһаҡал былай тип яуаплай:**
**- Бер саҡ урман-ҡырҙар буйлап сәйәхәт итеп арып, этем менән бергә бер йылға буйына килеп туҡтаныҡ. Арыған, сарсаған этемдең йылға ситенә баҫып, һыуға эйелгән ыңғайы тертләп китеүенә иғтибар иттем. Ул үҙенең һыуҙағы сағылышын күреп ҡаушап ҡалған икән. Ләкин сарсауы ла, ярһыуы ла сиктән ашҡан булғандыр инде: бер мәл этем һыуҙан үҙенә баҡҡан "этҡә" ырғыны, һәм уның һыуҙағы сағылышы ла, һыу менән уның араһындағы кәртә лә юҡҡа сыҡты... Бына шулай, тормоштағы кәртәләр, икеләнеүҙәр бары тик тәүәккәллек ярҙамында артҡа сигенә икәненә инаныу арҡаһында килдем мин үҙ хәҡиҡәтемә..."**


1158221891100 6

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 13 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.



«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5387
Заказ 1396